ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

14-20 декабрь (аҡъюлай) 2019

№50 (884)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мискәләге балға...

бер ҡалаҡ дегет



3

Республика менән бергә үҫәйек!



4-5

Мөхәббәт йырсыһы



8-9

Башҡорт шәле тигән мөғжизә



10

ТВ-программа 14

**Республика етәксеһе Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһында башҡорт телен дәүләт теле һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының дөйөм милли байлығы, башҡорт халҡының айырып алғыһыҙ мәҙәни һәм рухи мираҫы булараҡ һаҡлау, ярҙам итеү һәм үҫтереү маҡсатында "Башҡорт теле көнө"н булдырыу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Документ буйынса "Башҡорт теле көнө" йыл һайын 14 декабрь, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөндә билдәләнә.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаларыбыҙҙа, йәштәребеҙҙә нисек, ниндәй саралар ярҙамында башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уятырға?




***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре:*** Туған тел, туған моң - кешегә тәбиғәттән бирелгән иң ҙур бүләк. Ул һәр кешенең, һәр милләттең үҙенсәлекле булмышын һаҡлай. Ә был төрлөлөк кешелек донъяһының йәшәйеше өсөн мөһим шарттарҙың береһе. Шуның өсөн тәбиғәттән һәр кешегә иҫ китмәле һәләт бирелгән: кеше мейеһе бер нисә тел үҙләштерә ала. Әйҙә, нисә тел үҙләштерһәң дә ихтыярың, тик туған телең иҫәбенә булмаһын, тигән заң һалынған Бөйөк Аҡыл эйәһе - Тәбиғәт тарафынан. Һәм тап Ул үҙе беҙгә әле йәшәү ҡағиҙәһе итеп алған ҡанундарҙан тыш Тәбиғәт ҡанундарын биргән. Кешелек донъяһы ла, ундағы бар тереклек тә, үҫемлек донъяһы ла ошо ҡанундар менән йәшәй, аҙ ғына тайпылыу ҙа төҙәтә алмаҫлыҡ хаталарға килтерә. Әммә Ер йөҙөндәге иң аңлы тип һаналған кешеләр уны тупаҫ боҙа. Сөнки кеше алдауға, алдаштырыуға, аң бутауға тиҙ бирешә. Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосында, кешене ҡол иткең килһә, уның теленә хужа бул, тигән фекер әйтелгән. Аң бутаусылар быны оҫта файҙалана. Байлыҡ яратыусыларға - байлыҡ, һылыу ҡыҙға ымһыныусыларға - ҡыҙҙар, вазифа яратыусыларға - вазифа вәғәҙә итеп, телебеҙгә хужа булырға, телһеҙ ҡалған халыҡты илһеҙ ҙә ҡалдырып, ҡол хәлендә ҡалдырмаҡсылар. Ә ҡол кем ул? Үҙең өсөн йәшәмәү, икенселәр мәнфәғәте өсөн көс түгеү. Аң бутаусылар кешенең, айырыуса әсәйҙәрҙең иң нескә тойғоларына баҫым яһай һәм иң ғәзиздәре - балалары мәнфәғәте аша эш итә. Имеш, туған тел - артыҡ йөк, балаң наҙан ҡала.

Мин бер теләк әйтәм: аң бутаусыларға ышанып, үҙ аңығыҙҙы юғалтмағыҙ, Тәбиғәт ҡанундары менән йәшәгеҙ. Ә тәбиғәттә һәр йән эйәһе үҙ балаһы менән өн аша аралаша, өн аша яҡыная, күңелдәре өн аша тоташа. Ҡаныбыҙға һалынған тойғолар: күңел яҡынлығы, һәләт, илһам, сәләмәтлеккә тәьҫир, аң яҡтылығы, зирәклек ошо өн-моң аша асыла. Тимәк, ҡанға һалынған бөтөн рухи ҡиммәттәрҙең асҡысы - ул туған өн. Туған өнһөҙ ҡалыу, тимәк, туған тел аша аралашмау, туған телдән яҙыу ул. Тимәк, бындай балаларҙа быуындан-быуынға күсә килгән ҡан һәләте уянмай; кеше йыр аша нерв күҙәнәктәренә ыңғай йоғонто яһай алмай, тимәк, үҙ сәләмәтлегенә тәьҫир итә алмай; балалар атай-әсәйҙәре менән күңел яҡынлығы тоймай (күҙ алдына килтерегеҙ әле, донъялағы бөтөн йән эйәләре лә балаларын үҙ өндәре менән иркәләй, үҙ өндәре аша табыша - баҡыра, баҡылдай, һайрай, сутылдай, өрә, мыяулай һ.б.). Ә кешеләр еңел генә балаһын сит өнгә күсерә, имеш, сәңгелдәктән үк имтихан бирергә әҙерләй.

Туған телен, мәҙәниәтен юғалтыу арҡаһында тарҡалған милләттәр үҙҙәре менән бергә күпме асыш, күпме ҡиммәтле ғилемде юғалта. Ә бит улар кешелек донъяһы өсөн мөһим булған ҡиммәттәр. Шул уҡ ҡымыҙ, бал, буҙа, ҡорот, талҡан, ҡурай, дебет шәл, кейеҙ һәм башҡа һанап бөткөһөҙ һәм башҡорт өсөн генә түгел, бөтөн милләттәр өсөн дә файҙаһы тейерлек ризыҡтарҙы, көнкүреш әйберҙәрен башҡорт булмаһа, кем уйлап табыр ине?

Тағы ла ҡабатлап әйтәм: тәбиғәт кеше мейеһенә шундай мөмкинлек биргән: кеше әллә нисә тел үҙләштерә ала, аңлай, һөйләшә. Тик туған телең - ҡан телең иҫәбенә булмаһын тигән фекер һалынған был сифатҡа. Үҙ аңыбыҙ менән йәшәйек, туғандар, тәбиғәт ҡанундарынан, тәбиғәт беҙгә үҙе үк юл асҡан тәбиғи сараларҙан тайпылмайыҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

## БАШҠОРТЛОҠТОҢ...

### орлоҡтарын сәсәм

*Урыҫ мәктәбендә дәрес бирәм,*
*Өйрәтәмен башҡорт теленә.*
*Кем өсөндәр ҡыҙыҡ минең дәрес,*
*Кем өсөндәр сәйер күренә.*

*Телһеҙ башҡорттарҙы телле итеү -*
*Бөгөн минең изге бурысым.*
*Башҡорт менән бергә белем ала*
*Татар, мордва, сыуаш, урыҫым.*

*Телде белеү төрлө милләттәрҙе*
*Дуҫлыҡ, татыулыҡҡа өйрәтә.*
*Тик бер һүҙгә теле байыһа ла,*
*Күңелдәре байый меңләтә.*

*Башҡортлоҡтоң орлоҡтарын сәсәм.*
*Эйе, ауыр минең был эшем.*
*Килер бер көн ағас үҫеп сығыр,*
*Һәм ул ағас бирер емешен.*

*Ә әлегә өс һүҙ белһәләр ҙә,*
*Күңелемдә арта ырыҫтар.*
*"Һаумыһығыҙ!" тиеп саф башҡортса*
*Һаулыҡ ҡуша миңә урыҫтар.*

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

(Теманың дауамын 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).

12+

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БЕРГӘ БУЛАЙЫҠ!



**Яңы 2020 йылда ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеп торһон тиһәгеҙ, ошо көндәрҙә уға яҙылып ҡалыу хәстәрен күрегеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ. Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға ун көн самаһы ғына ваҡыт ҡалып бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән кемдәрҙер матур китаптарға эйә буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.**

Киләһе йылда ла гәзитебеҙ уйландырыр, фекер төйнәтер, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, анды яҡтыртыр, дөрөҫ ҡарарҙарға килтерер ҡыҙыҡлы йөкмәтке вәғәҙә итә. Гәзит халыҡ трибунаһы булырға тейеш, тигәнде иҫтә тотоп, йөкмәткене бергәләп ижад итәйек, тимәксебеҙ. Бының өсөн үҙегеҙҙе борсоған хәл-күренештәр тураһында "Әйтер һүҙем бар!", "Тураһын әйткәндә", "Килешмәйем" рубрикаларына хаттар яҙып ебәрә алаһығыҙ. "Зыялылар майҙаны", "Уйлыға - уй" рубрикалары иһә һеҙҙән сәмләндерер, ғәмләндерер, уйландырыр сығыштар көтә. Ғилем һәм мәғрифәт сығанағы булған башҡа традицион рубрикаларыбыҙҙағы сығыштар ҙа һеҙҙең күңелдәрҙә бөтөнлөк, шандауҙар уятмай ҡалмаҫ тип ышанабыҙ.

Киләһе 2020 йыл да иҫтәлекле ваҡиғаларға бай буласаҡ, тип көтөлә. 9 майҙа илебеҙ халҡы Бөйөк Еңеү яулауыбыҙға 75 йыл тулыу айҡанлы тарихи хәтеребеҙҙе яңыртасаҡ. Гәзитебеҙҙең киләһе һандарынан башлап беҙ гәзит биттәрендә данлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһына арналған төрлө мәғлүмәттәр баҫа башлаясаҡбыҙ. Ошо тарихи хроникала башҡорт яугирҙары хаҡында 1941-1945 йылдарҙан башлап тупланған материалдар урын аласаҡ.

Әле республикабыҙ гөр килеп Бөтә донъя фольклориадаһын ҡаршыларға әҙерләнә. Был ваҡиғаға беҙ ҙә үҙ өлөшөбөҙҙө индереп, милли кейем, милли биҙәүестәр өлгөләре, халҡыбыҙҙың оҫталыҡ мәктәбе, шулай уҡ милли йолаларыбыҙ тураһында тарихи материалдар, белгестәр сығыштары, сценарийҙар, түңәрәк ҡорҙар ойоштороуҙы дауам итәсәкбеҙ.

Октябрь айында Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы уҙасаҡ икәнен дә беләһегеҙҙер. Был да бик мөһим ваҡиға. Милләтебеҙҙең бер генә вәкиле лә теркәлмәйенсә ҡалмаһын, тигән теләкте еткерәбеҙ һәр кемгә. Бигерәк тә үҙ милләтен билдәләй алмай, аҙашып йөрөгәндәр шәжәрәләренә күҙ һалып, ата-бабалары тарихын өйрәнеп, ошо мөһим сарала үҙ милләтенең улы йә ҡыҙы булып, үҙ хәҡиҡәте менән ҡатнашһын, тип теләйбеҙ.

Әйткәндәй, уҡыусыларыбыҙҙың талантлы ҡәләм оҫталарының әҙәби әҫәрҙәренә ихтыяжын да онотмайбыҙ. Ошо арала һеҙҙең иғтибарға яҙыусы, журналист, редакциябыҙ хеҙмәткәре Миләүшә Ҡаһармановaның мауыҡтырғыс, мажаралы яңы әҫәре тәҡдим ителәсәк. Повесть был йылдың һуңғы һанында баҫыла башлай ҙа, яңы йыл һандарында дауам итәсәк. Повесть халҡыбыҙ тарихының 1770 йылдарҙан һуңғы ваҡиғаларына арнала. 25 йыллыҡ батша хеҙмәтендә йөрөгән башҡорт егете Ҡазыхандың ҡайтыр ере юҡ. Ул хеҙмәттә саҡта илдә ихтилал булып, тыуған төйәге аяуһыҙ баҫтырыла. Ҡатыны, улы, ата-әсәһе, ағайҙары, башҡа туғандары үлтерелгән, тыуған ауылы яндырылған. Тик һис көтмәгәндә ир ҡатынын Петербург баҙарында осрата...

**Шулай итеп, киләһе йылда ла бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Балаларыбыҙҙа, йәштәребеҙҙә нисек, ниндәй саралар ярҙамында башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уятырға?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлназ ЙОСОПОВА, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры:*** Туған телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, уны популярлаштырыу өсөн беҙҙең фонд заманса алымдарҙы үҙләштерергә һәм ҡулланырға тырыша. Үҫеп килгән быуындың күп ваҡытын интернет селтәрендә үткәргәнен иҫәпкә алып, Фонд тарафынан 9 видеояҙма сығарылды. Улар туған телдә һөйләшеүҙең өҫтөнлөктәрен күрһәтә һәм заман талаптарына яраҡлаштырып, сифатлы, сағыу итеп төшөрөлгән.

Туған телде төрлө смартфон ҡушымталары аша өйрәнеү ҙә күҙ уңынан ситтә ҡалмай: әлеге ваҡытта Android һәм ios өсөн "IQБалаБаш", "Inofon BASH" ҡушымталары донъя күрҙе. "IQБалаБаш" тирә-яҡ мөхитте бәләкәстәргә уйын рәүешендә өйрәнергә ярҙам итә. Шулай уҡ ҡушымта аша башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтергә өйрәнеү мөмкинлеге лә бар. "IQБалаБаш" сағыу һүрәттәр, анимациялар менән биҙәлгән. Ул логиканы, хәтерҙе, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә йүнәлтелгән уйынсыҡтар менән байытылған. "Inofon BASH" ҡушымтаһында һүҙҙәр тематик төркөмдәргә бүленгән, нигеҙҙә, көнкүрешкә бәйле һүҙҙәр йыйылған һәм улар сюжетлы иллюстрациялар менән байытылған, һүҙҙең әйтелеше, яҙылышы һәм һүрәте бирелгән.

Июндән алып башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр өсөн курстар эшләй. Әлеге ваҡытта ике төркөмдә: башҡорт телен башлап өйрәнеүселәр өсөн дәрестәр һәм дауам итеүселәр өсөн "Эшлекле башҡорт теле" курсы алып барыла. Майҙа үткән "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант" та башҡорт теленә ҙур иғтибар йәлеп итте. Аналитика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, барлығы 69 987 кеше 1220 майҙансыҡта диктант яҙған. Уларҙың яртыһы башҡорт телен яҡшы белһә, ҡалғандары - өйрәнә башлаусылар. Йәштәр өсөн башҡорт телендә иркен аралашырға "Аҫылташ" бренды майҙансығы бар. Ул башҡорт мәҙәниәте форумын, башҡорт телендә дебат уйындары чемпионатын, медиа-үҙәкте, шиғырҙар интернет-марафонын һәм мәғариф майҙансыҡтарын берләштерә. Был саралар йәштәргә фекерләү ҡеүәһен үҫтерергә, фекерҙәштәр табырға һәм саф башҡортса һөйләшә белеү һәләтен камиллаштырырға ярҙам итә. Туған телгә һөйөү онлайн һәм оффлайн режимда ғына түгел, ә радио, телевидение аша ла алып барыла. Фонд тарафынан "Рәсәй-Башҡортостан" каналында "Матур башҡорт теле" телевизион проекты донъя күрҙе. Радио тулҡындарында "Башҡорт телен өйрәнәбеҙ" программаһы көн һайын эфирға сыға.

***Рузилә КИНЙӘБУЛАТОВА, Balalar проектының авторҙашы һәм етәксеһе:*** Ошо көндәрҙә беҙ, проекттың авторы һәм инициаторы Илдар Кинйәбулатов етәкселегендәге команда, бәләкәй балаларға донъяны башҡортса танып-белеү маҡсатында эшләнгән йәнһүрәттәрҙең тәүгеһенең исем туйын үткәрҙек. Бергәләп башҡорт телен цифрлаштырыу йүнәлешендә эшләйбеҙ, сөнки хәҙерге ваҡытта барлыҡ атай-әсәйҙәр генә түгел, уларҙың балалары ла интернетта ултыра. Шуға күрә башҡорт теле интернетта булырға тейеш. Ул йәнһүрәттәр булһынмы, ҡушымталармы, башҡорт телендә эҙләү системаһымы - бөтөн нәмә тулыһынса башҡорт теленә күсергә тейеш. Шулай уҡ, мәҫәлән, "Бәйләнештә", Инстаграмда мәҡәләләрҙе, текстарҙы башҡортса яҙа башлау. Беҙ ошо проекттың сәхифәһен Инстаграмда башҡортса алып барабыҙ. Әлбиттә, ул кешеләргә ниндәйҙер этәргес көс. Улар башҡортса яҙғандарҙы күрә лә, тимәк, башҡортса яҙырға була икән, кешеләр белмәй яҙмайҙыр әле, тип уйлай.

Йәнһүрәттең премьераһына балаларға байрам ойошторорға ҡарар иттек. Ул ябай һәм матур килеп сыҡты, ата-әсәйҙәргә, балаларға этәргес көс булды. Кеше күп килде, улар барыһы ла үҙҙәренең яңғыҙ булмауын күрҙе. Уларҙың үҙҙәренең башҡорт булыуына, телде белеүенә йәки өйрәнергә теләп, дөрөҫ юл һайлауына ышанысы артҡандыр, моғайын. Тимәк, беҙгә матур, яҡшы кимәлдә эшләнгән саралар кәрәк. Улар заманса, ойоштороу кимәле юғары һәм атай-әсәйҙәргә лә, балаларға ла ҡыҙыҡ булырға, онлайн ғына түгел, ә оффлайн рәүешендә лә булырға тейеш. Үҫмерҙәрҙе күҙ уңында тотһаҡ та, әгәр саралар яҡшы кимәлдә үтһә, улар теләп йөрөйәсәк. Бында мәсьәлә кимәлгә барып төртөлә, сөнки хәҙерге йәштәр бик аҡыллы, улар сараларҙың нисек үтергә тейешлеген интернет аша күреп белә һәм һығымта яһай. Ғөмүмән, балаларҙы, йәштәрҙе телгә ылыҡтырырға теләйбеҙ икән, башҡорт мөхитен заманса, уларға аңлайышлы итеп, матур тышлыҡҡа төрөп бирергә тейешбеҙ.

***Вячеслав ЧЕРНЕВ, полиглот, башҡорт телен заманса уҡытыу методикаһы авторы:*** Был мәсьәләнең бер нисә аспекты, бер нисә яғы бар тип әйтергә була. Мәктәп системаһын алып ҡарағанда, беренсенән, ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн уҡытыусылар үҙҙәре башҡорт теленә ихтирамды, һөйөүҙе һәр аҙымы, һәр ҡылығы менән күрһәтергә тейеш. Ә инде уҡытыусыға бер нәмә лә ҡыҙыҡ булмаһа, йә инде, Аллам һаҡлаһын, ул фәнде тейешле кимәлдә уҡыта алмаһа, ул балаларҙа бер ҡасан да ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра алмаясаҡ.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, шундай етди мәсьәлә лә бар: балалар башҡорт теленең икенсел, өҫтәмә тел булыуын ғына күреп, уның дәүләт теле булыуына йә төшөнөп етмәй, йә быға ниндәйҙер миҫалды, этәргесте күрмәй. Мәҫәлән, уның власть даирәләрендә, йәмғиәттә ҡулланылышы етерлек булмауы ла шәп түгел. Шуға күрә, дәрестән тыш та, клуб рәүешендәме, йәиһә уҡыусылар төркөмө рәүешендәме, балаларҙы йәлеп итерлек саралар ойошторорға кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Указы менән "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалына Дүртөйлө районынан Первушиндар ғаиләһе лайыҡ булды. Ирле-ҡатынлы Первушиндар 9 бала тәрбиәләй. Өфөнән Александр Буринин улының спорт өлкәһендәге уңыштары өсөн ошондай уҡ награда алды. Тағы 48 күп балалы ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнде. Әлеге ваҡытта республикала 50 меңдән ашыу күп балалы әсә йәшәй.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хабиров Өфө ҡалаһының Тарих музейында булды. Был музей сентябрҙә асылғайны. Ул XVI быуаттан хәҙерге көнгә тиклемге тарихты үҙ эсенә алған дүрт экспозиция залынан тора. Меңләп экспозициянан тыш, күп архив материалдары цифр форматында йыйылған. Радий Фәрит улы шулай уҡ Камил Буҙыҡаевтың күргәҙмәһен дә ҡараны.

✓Башҡортостанда республиканың киләһе йылға бюджетын 10 миллиард һумға арттырыу тураһында мәсьәлә хәл ителә. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары 19 декабрҙә пленар ултырышта тейешле закон проектын ҡарай. Дөйөм алғанда, 2020 йылда бюджет сығымдары 226,6 миллиард күләмендә планлаштырылған, килемдәр 204,6 миллиард һум булыр тип фаразлана.

✓Бөгөн баш ҡалала "Башҡорт теле көнө" саралары үтә. "Мега", "Ультра", "Башҡортостан", "Үҙәк" сауҙа-сервис комплексы" сауҙа үҙәктәрендә мәғлүмәт-мәғрифәтселек саралары ойошторола. Уларҙа башҡорт бейеүе дәрестәрен, Башҡортостан Башлығы гранттарына тормошҡа ашырылған проекттарҙың һәм башҡорт телен өйрәнеү өсөн мобиль ҡушымталарҙың презентацияһын ҡарарға мөмкин буласаҡ. Башҡорт дәүләт педагогия университетында башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән республика асыҡ дәресе үтә.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәренең 31 декабрҙе ял көнө итеү башланғысын хупламайҙар. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев парламенттың рәсми позицияһын әйтте. Республикала байрам көндәре исемлеген киңәйтеү төбәк иҡтисадында кире сағылыш табыуы ихтимал, тип иҫәпләй ул.

*✓ Әммә Рәсәй кимәлендәге ҡайһы бер чиновниктар ғына түгел, хатта ғалим исемен йөрөтөүсе вазифалы шәхестәр ҙә туған тел уҡытыу проблемаларына маҡсатлы рәүештә сәйәси төҫ биреп, үҙ мәртәбәләрен күтәрергә тырыша.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ!*

**Илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә 2007 йылдан бирле Мәғарифты үҫтереүҙең федераль институты тарафынан "Туған тел уҡытыусыларының Бөтөн Рәсәй мастер-класы" тип аталған махсус конкурс ойошторола. Һүҙ юҡ, ошо күркәм сара Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыусы педагогтар араһында ҙур популярлыҡ яуланы. Уларҙың иң-иңдәре ошо сәмле үә үтә лә ғәмле ярыштарҙа ҡатнашып, үҙҙәре һымаҡ изге туған телдәрен һөйгәндәр менән яҡындан аралашып, яуаплы эштәренә дәрт-көҙрәт өҫтәрҙәй һабаҡтар алып ҡайта баш ҡаланан.**

# МИСКӘЛӘГЕ БАЛҒА...

## бер ҡалаҡ дегет

Быйыл да ошо конкурстың Мәскәүҙә үтәсәк финалында ҡатнашыу хоҡуғына милли республика һәм округтарҙан 23 педагог лайыҡ булды. Финал 12 - 14 ноябрҙә уҙғарылды, ошо сара сиктәрендә "Яңыртылған мәғариф ҡануниәте шарттарында дөйөм белем биреү эшмәкәрлегендә дәүләт тел белеме сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыу практикаһы" исеме аҫтында түңәрәк ҡор үткәреү ҙә ҡаралғайны. Түңәрәк ҡорға "Тел һәм мәҙәни күп төрлөлөк шарттарында Рәсәй берҙәмлеген һаҡлау", "Рәсәй халыҡтары телдәрен уҡытыу һәм өйрәнеү буйынса яңыртылған ҡануниәтте ғәмәлгә ашырыу хәүефтәре", тип аталған темалар тәҡдим ителде.

**Шундай һорау тыуа: түңәрәк ҡорға сығарылған етди һәм үтә ҡатмарлы педагогик мәсьәләне - туған телдәрҙе уҡытыуҙы ҡануниәткә ярашлы башҡарыу проблемаһын ни өсөн ниндәйҙер сәйәси хәүефтәр менән бәйләү кәрәк булды әле?**

Түңәрәк ҡорҙоң төп ҡатнашыусылары - Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен уҡытыусы педагогтар ине. Ябай, ҡәҙимге уҡытыусылар ғына түгел ине улар - үҙ төбәктәренең, туған халыҡтарының илселәре булып, ошо өлкәлә тупланған эш тәжрибәләрен, педагогик һәм методик маһирлыҡтарын башҡалар менән уртаҡлашыр өсөн йыйылғайнылар. Ярыштар, конкурс талаптары күп төрлө булғандыр, һәр кем бында үҙ эшен, үҙ оҫталығын тейешле кимәлдә күрһәтә лә алғандыр. Әммә тап үрҙә телгә алынған түңәрәк ҡор ошо телһөйәр уҡытыусыларҙың һушын алғандыр ҙа, йөрәктәрен әрнетеп, күңелдәрен шик-шөбһәләр менән тултырып ҡайтарғандыр, тим. Рус әйтеме быйндай хәлде мискәләге балға бер ҡалаҡ дегет һалыуға тиңләй. Шулай тип һығымта яһар өсөн дәлилдәр етерлек: интернет селтәрҙәрендә шау-шыу тыуҙы, ә Мәскәүгә махсус рәүештә барып, дегеттәй ҡара уйҙары менән ошо түңәрәк ҡорҙоң йәмен-ҡотон осорған ике ҡатындың ниҙәр һөйләгәнен тыңлаһаң, биллаһи, телһеҙ ҡалырһың.

Етди фекер алышыуға үҙ халыҡтарының милли кейемдәрендә килгән уҡытыусылар алдында тәүҙә Белем биреүҙең милли проблемалары ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры, туған тел уҡытыусылары ассоциацияһы рәйесе Ольга Артеменко сығыш яһаны. Тап уның сығышы туған телдәрҙе уҡытыу проблемаһын тик сәйәсәт призмаһы аша баһалауға арналды ла инде. Башта Артеменко Сталин замандарындағы тел сәйәсәтен күпертеп маҡтаны: йәнәһе, артта ҡалған, үҙ яҙма телдәре булмаған Рәсәй халыҡтары өсөн Иосиф Сталин тырышлығы менән сифатлы әҙәби телдәр булдырылды. Әлеге лә баяғы, кәкере шайтан таяғы, тигәндәй, Рәсәй этностарының советтарға тиклем яҙмаһы ла, әҙәби теле лә булмаған, тип, уларҙы ярым ҡырағай халыҡтар рәтенә төшөрөүсе элекке идеологик уйҙырма яңынан тергеҙелде. Хәйер, биология фәндәре кандидаты, психофизиолог Ольга Артеменко Рәсәй халыҡтарының телдәре һәм яҙма әҙәбиәте тарихын ҡайҙан белһен инде! Әммә ул туған тел уҡытыусылары алдында тел сәйәсәтенә бәйле фекерҙәрен барыбер асыҡтан-асыҡ белдерҙе. Йәнәһе, 1992 - 2007 йылдарҙа Рәсәй халыҡтары телдәренең йәмғиәттәге функцияларын киңәйтергә тырышыу уңышһыҙ, сәйәси яҡтан үтә зарарлы (!) күренеш булған.



**Артеменко фекеренсә, йәнәһе, белем биреүҙең милли-төбәк компоненты республикалар власы тарафынан сәйәси маҡсаттарҙа ҡулланылған. Ул туған телдәрҙе уҡытыуҙы сикләүсе ҡануниәтте яҡлап, ошо закондарҙы дөрөҫ үтәмәү арҡаһында төрлө конфликтлы ситуациялар барлыҡҡа килә, тип, үҙ фекерен башҡаларға тағырға тырышты. Башҡортостан, Татарстан властарын күҙ уңында тотто инде ул, һәм асыҡтан-асыҡ, дәлил килтермәй генә ғәйеп тағып маташты...**

Артеменко үҙ сығышын тамамлау менән һүҙҙе Өфө ҡалаһының 69-сы мәктәбенең тарих уҡытыусыһы Лариса Удинцеваға бирҙе. Шуныһы ғәжәп: тарих уҡытыусыһының Бөтөн Рәсәй туған тел уҡытыусылары мастер-класына ниндәй мөнәсәбәте бар һуң? Әлбиттә, бер ниндәй ҙә. Әммә ул үҙен бында Башҡортостан уҡытыусылары вәкиле булараҡ килеүен белдерҙе. Кем уға ошондай вәкәләтлекте тапшырған - билдәһеҙ. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, ошо ҡатын Башҡортостанда "законһыҙлыҡҡа" ҡаршы 19 йыл буйына "титаник көрәш" алып барған, ә уға ҡаршы тоталитар режим туҡтауһыҙ баҫым яһап торған икән. Уныңса, Башҡортостанда әлегә тиклем граждандарҙың туған телдәрҙә уҡытыуҙа ихтыяри һайлап алыу хоҡуғы тыйылған. Республиканың башҡарма властары, мәғариф министрлығы, мәктәп директорҙары - улар барыһы ла закондарҙы боҙоусылар. Ә дәлилдәр ҡайҙа?..

Ә Татарстан "ҡунағы" (ул хатта уҡытыусы ла түгел) Татьяна Череватая Удинцева тоҡандырған утҡа кәрәсин һибергә теләгәндәй, ҙур тырышлыҡ менән яҙып бирелгән телмәрен шыпшыма итеп уҡып бирҙе. Был ҡатын закон положениелары, норматив акттар, юридик терминдар менән юристарҙан оҫтараҡ манипуляциялар ҡыла - ул да Татарстандағы "законһыҙлыҡты" фаш итә бит! Уныңса, хатта русса акцент менән һөйләшкән уҡытыусылар рус телле балаларҙың хоҡуғын боҙа икән! Һәм ул ҙур ҡәнәғәтләнеү менән үҙ тәҡдимдәрен индерә - уҡыу пландарының мотлаҡ уҡытыла торған предметтары араһында туған телдәр булмаҫҡа тейеш! Республикаларҙың үҙаллы мәғариф министрлыҡтарын бөтөрөп, улар урынына Федераль министрлыҡ филиалдарын ғына ҡалдырырға! Ата-әсәләр араһында теге йәки был туған телде уҡытыуҙы пропагандалаған, өгөт-нәсихәт алып барған өсөн, йәғни шул юл менән федераль закондарҙы боҙған өсөн мәктәп етәкселәрен енәйәт яуаплылығына тарттырырға!

Йә, туғандар, һеҙ шәхсән ошо залда ултырған булһағыҙ, ни ҡылыр инегеҙ, ә? Зал тынып ҡалды. Миненсә, улар психологик шок хәленә төшкәндер. Ә модератор Ольга Артеменконың йөҙө айҙай балҡымаһа ла, ул оло ҡәнәғәтләнеү кисергәндер. Юғиһә, ул Коми Республикаһынан килгән педагогия фәндәре кандидаты, мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреү буйынса белгес Зоя Остапованың ике теллелектең шәхес үҫешенә ыңғай йоғонто яһауы хаҡында һөйләгәндәренә реплика ташлап, былай тип әйтмәҫ ине: "Ғәфү итегеҙ, мине ике теллелек бер нисек тә байытманы. Мин украин телендә уҡыным. Миндә украин теленең рус теленә интерференцияһы (ҡамасаулауы - **Авт.**) әлегә тиклем бар..." Бына һеҙгә, туған тел уҡытыусылары, майланмаған бер ҡоймаҡ! Был хәлде психологтар туған теленән оялыу нигеҙендә хасил булған шәхси кәмһенеү тойғоһо, тип нарыҡлай. Әммә, һис бер икеләнеүһеҙ, бар ғаләм алдында үҙендең кәмселегендә башҡалар өсөн өлгө итеп ҡуй әле!

Әлбиттә, Рәсәй төбәктәренән килгән туған тел уҡытыусылары ошо провокацион сығыштарҙы ыңғай ҡабул итмәне. Үҙ фекерҙәрен педагог ҡатын-ҡыҙҙарға хас булған тыйнаҡлыҡ һәм эске инанғанлыҡ менән белдерҙе улар.

**Дағстандан килгән Хадижат Бечедованың әйткәндәре уларҙың уртаҡ яуап һүҙе булып яңғыраны: "Әле һөйләнгән нәмәләр конкурс сиктәренә тап килмәй. Беҙ бында туған тел уҡытыусылары булараҡ килдек. Беҙ барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙең телдәребеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе ныҡ яратабыҙ. Һәм үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе, телебеҙҙе һәм халҡыбыҙ тарихын өйрәнәбеҙ. Беҙҙең түңәрәк ҡор һәм конкурс сиктәрендә ошо теманы сығарыу кәрәкмәҫ ине. Ошо проблема буйынса бында бар негативты сығарыу урынһыҙ. Тел проблемалары арҡаһында сәйәси проблемалар хасил була, тип әйтеүегеҙ менән һис тә килешмәйбеҙ. Минең коллегаларым да ошо фекер менән килешмәйәсәк".**

Ни әйтәһең - хаҡ һүҙҙәр. Рәсәй ҡануниәтенә ярашлы, мәктәп эшмәкәрлеге, мәғариф сәйәсәттән ситтә торорға тейеш. Әммә Рәсәй кимәлендәге ҡайһы бер чиновниктар ғына түгел, хатта ғалим исемен йөрөтөүсе вазифалы шәхестәр ҙә туған тел уҡытыу проблемаларына маҡсатлы рәүештә сәйәси төҫ биреп, үҙ мәртәбәләрен күтәрергә тырыша. Тик улар ошондай аҫтыртын ғәмәлдәренең ил киләсәге өсөн үтә хәүефле булып, үҙҙәренең Рәсәй халыҡтары берҙәмлеген ҡаҡшатыусы көскә әүерелеүен аңлайҙармы икән?

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда армияға көҙгө саҡырылыш буйынса план 90 процентҡа үтәлгән. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә саҡырылыш комиссияһын үткәреү буйынса кәңәшмәлә республика хәрби комиссары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рәмил Баһауетдинов белдерҙе. Планға ярашлы, 2019 йылдың октябренән декабренә тиклем Башҡортостан Республикаһы 4603 егетте хәрби хеҙмәткә оҙатырға тейеш.

✓Башҡортостанда "Бәхетле билет" акцияһы башланды. Республика мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларының ҡайһы бер тамашаларына билеттарҙы 50 процент ташлама менән һатып алырға мөмкин. Проектҡа Өфө һәм республика ҡалалары театрҙары, концерт ойошмалары, музейҙары, филармониялары, күргәҙмә залдары ҡушылды.

✓Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексына ярашлы, 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар - яңы йыл каникулдары, 7 ғинуар - Христос Раштыуаһы - байрам көндәре булып тора, тип иҫкә төшөрә республиканың Хеҙмәт министрлығы. 2020 йылда 4 һәм 5 ғинуарҙағы байрам көндәре шәмбегә һәм йәкшәмбегә тура килә. Шуға күрә 4 ғинуарҙағы ял көнө - 4 майға, 5 ғинуарҙағыһы 5 майға күсерелә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2019 йылдың өсөнсө кварталына халыҡтың йән башына 9567 һум күләмендә йәшәү минимумы дәүмәлен билдәләне. "10 186 һум - эшкә һәләтле халыҡ өсөн, 7801 һум - пенсионерҙар өсөн һәм 9548 һум - балалар өсөн", - тип хәбәр иттеләр республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✓Башҡортостандың ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәттәре үҙҙәренең автопаркын тулыландырҙы. Республика балалар клиник дауаханаһы, Дыуан, Бәләбәй, Белорет райондары үҙәк дауаханалары, Нефтекама, Сибай, Күмертау, Октябрьский ҡала дауаханалары ун Ford Transit маркалы ашығыс медицина ярҙамы машинаһы (реанимобиль) аҫҡыстарын алды. Стәрлетамаҡтың санитар автотранспортына ике реанимобиль тапшырылды.

✓Республика ҡарамағында булған Өфө - Белорет - Магнитогорск юлы федераль милеккә күсеүе мөмкин. Трассаның оҙонлоғо 350 саҡрым тәшкил итә. Әлеге ваҡытта Өфө - аэропорт юлының 9 саҡрымын Федераль юл агентлығына тапшырыу рәсмиләштерелә. Орск - Ырымбур юлы ла Рәсәй Федерацияһы милкенә тапшырыла. Әле Башҡортостанда федераль юл селтәре 785 саҡрым иҫәпләнә.

ҺОРАУ - ЯУАП

# ПЕНСИЯ ХӘЛЕ НИ ХӘЛ?

**? Кемдәр ваҡытынан алда китә?**

Ошоға тиклем дә ваҡытынан алда хаҡлы ялға китеү хоҡуғы булған күпселек граждандарҙың пенсияға сығыу йәше шул көйө һаҡланып ҡалды, тип әйтергә була. Зарарлы һәм хәүефле эштә (шахтерҙар, ҡотҡарыусылар һ.б.) 5 һәм унан күберәк балалы ҡатындар, гәрип бала ҡараусы ата-әсәләргә үҙгәрештәр бөтөнләй ҡағылманы. Ваҡытынан алда хаҡлы ялға китеү хоҡуғы йәше тулыу менән бәйле тәғәйенләнеүсе хоҡуғы булған табиптар, уҡытыусылар, артистар өсөн һаҡланып ҡалды. Ләкин 2019 йылдан уларға пенсияға сығыу ваҡыты пенсия йәше арттырылыу менән бәйле күсеү осорон иҫәпкә алып, махсус стаждары тулған көнгә күсерелә. Быйылдан алып пенсияға ваҡытынан алда сығыусыларҙың яңы төркөмө барлыҡҡа килде. Улар ҙур стажға (ирҙәр - 42 һәм ҡатындар 37 йыл) эйә булыусылар, 3 һәм 4 балалы әсәләр. Әгәр пенсия алды йәшендәгеләр эшкә урынлаша алмаһа, күсеү осоро иҫәпкә алынып, уларға пенсия яңы пенсия йәшенән ике йылға иртәрәк тәғәйенләнә.

**? Ниндәй һалым?**

Пенсия алды йәшендәгеләргә ташламалар һәм социаль ярҙам саралары элек пенсия йәше еткәндә бирелә торғандағы кеүек үк. Бынан тыш, 2019 йылдан яңы төр ташлама һәм түләүҙәр булдырылды. Мәҫәлән, диспансерлашыу үтеү. Пенсия алды йәшендәгеләр хәҙер уны үтеү өсөн йылына бер тапҡыр ике көнгә эштән ебәрелә ала һәм был осраҡта эш урыны ла, уртаса хеҙмәт хаҡы ла һаҡланып ҡала. Шулай уҡ эшһеҙ пенсия алдындағыларға ҡайһы бер ташламалар булдырылды (эшһеҙлек буйынса юғары күләмдә пособие, уны оҙайлы ваҡытҡа түләү), ҡабаттан уҡыуөйрәнеү буйынса программалар, эш урындарының һаҡланыуы. Федераль сараларҙан тыш, төбәк ташламалары бар: йәмәғәт транспортында йөрөүгә, коммуналь түләүҙәргә, бушлай дарыуҙар алыуға һ.б. Пенсия алды ташламаларының күпселегенә яңы пенсия йәшенә 5 йыл ҡалғас хоҡуҡ бирелә. 2019 йылдан һуң ташламаға хоҡуҡ менән 1968 йылғы ҡатындар һәм 1963 йылғы һәм унан өлкән ирҙәр файҙалана ала, тик был ҡағиҙә һалым ташламаһына ғына ҡағылмай. Ул элекке пенсия йәше тулғанға тиклем ғәмәлдә ҡала.

**? Пенсия алды йәшен раҫлаусы белешмәне ҡайҙан алырға?**

2019 йылда Рәсәй Пенсия фонды пенсия алды йәшенә еткән рәсәйҙәр хаҡында белешмә биреүсе яңы мәғлүмәт сервисы булдырҙы. Был мәғлүмәттәр граждандарға ташламалар тәғәйенләүсе власть органдары, ведомстволар һәм эш биреүселәр тарафынан файҙаланыла. Быйыл ярты йыл эсендә генә лә Рәсәй Пенсия фонды 724 мең пенсия алды йәшендәге кешенең һәр төрлө социаль ярҙам сараларына хоҡуғын раҫланы. Бынан тыш, пенсия алды йәшендәгеләрҙе ҡабаттан уҡытыусы, квалификацияларын күтәреүсе, артырылған күләмдә пособие түләүсе мәшғүллек үҙәктәренә йыл башынан ошондай ҙур күләмдә раҫлаусы мәғлүмәттәр ебәрелде.

**(Дауамы бар).**

ЕТӘКСЕ ҺҮҘЕ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров юғары вазифаға һайланып ҡуйылғандан һуң беренсе тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһап, уҙған йыл һөҙөмтәләрен барланы һәм алдағыһына бурыстар билдәләне. "Бер йыл элек республикаға ҡайтҡас, хәл-торошто баһаланым һәм проблемаларҙың торлаҡ-коммуналь хужалыкта, медицинала йәки мәғарифта ғына түгеллеген аңланым, - тип башлап китте сығышын Радий Фәрит улы. - Ата-бабаларыбыҙҙың бөтөн эште бергә хәл итеү ғәҙәте булыуға ҡарамаҫтан, идара итеү вертикалендә лә, айырым коллективтарҙа ла берҙәмлек булмауын күрҙем. Ниндәйҙер пессимизм, үҙ көсөңә, республиканың киләсәгенә ышанмаусылыҡ бар ине һәм ул бөгөн дә бар. Шуға күрә мин идара итеү командаһы алдына берҙәмлеккә өлгәштерер маҡсаттар ҡуйҙым..." Түбәндә Мөрәжәғәтнамәнең төп мәлдәренә туҡталып, өлгәшелгән маҡсаттарҙың ҡайһы берҙәрен барлап үтәбеҙ.**

# РЕСПУБЛИКА МЕНӘН БЕРГӘ ҮҪӘЙЕК!



**Инвестициялар һәм яңы производстволар.** Быйыл Башҡортостан иҡтисадына инвестициялар күләме 15 процентка артҡан. Һуңғы йылдарҙа былдай күрһәткес нолгә тигеҙ булған. "Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, әлеге ваҡытта күптәр насар, ярлы йәшәй. Күптәрҙең йәшәү шарттары ауыр. Улар яҡшыраҡ йәшәһен өсөн көслө бюджет, көүәтле иҡтисад, ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа тәртип кәрәк. Был мәсьәләләр берҙәмлек булғанда, клан, сәйәси, этник һәм башҡа уйлап сығарылған сәбәптәр ҡамасауламағанда ғына хәл ителә", - тип Радий Фәрит улы дөйөм алғанда 100 инновацион проектты тормошҡа ашырыу планы менән уртаҡлашты һәм быйыл инвестицияларҙың артыуының яҡшы һөҙөмтә булыуын, Башҡортостан өсөн бының алдыңғы эшлекле үҙәк, эшҡыуарҙар өсөн иң яҡшы төбәк булыуға тәүге аҙым икәнлеген билдәләп, йыл һөҙөмтәләре буйынса республиканың Рәсәйҙең иң һөҙөмтәле төбәктәр иҫәбенә инеүен һәм 1,3 миллиард күләмендә РФ Хөкүмәте грантына лайыҡ булыуын белдерҙе.

**Бюджетты урлау.** Радий Фәрит улы белдереүенсә, элекке 37 юғары вазифалы кешегә коррупция енәйәте хөкөмө сығарылған, тағы 42-һенә ҡарата енәйәт эше асылған. "Беҙ дәүләт кеҫәһенә ҡул тығыусыларҙың исемдәрен асыҡтан-асыҡ атаясаҡбыҙ, сөнки юлдар төҙөлөшөнән, подъездарҙы һәм ихаталарҙы ремонтлауҙан ғына түгел, хатта мәктәп ашханаларында балаларҙың ризығын да урлайҙар", - тине ул.

**Инцидент һәм социаль селтәрҙәр мониторингы.** "Командамдағы һәр кемдән кешеләрҙең проблемаһының айышына төшөнөүҙәрен, уларҙы хәл итеү юлдарын табыуҙы, уларҙың мөрәжәғәтен ишетә белеүҙе талап итәм. Бында бер йыл элек индергән "Инцидент менеджмент" системаһы төп ҡорал булып тора. Һөҙөмтәлә власть халыҡҡа йөҙ борҙо. Киләһе йылдан иһә республикала Төбәк менән идара итеү үҙәге ойошторола саҡ", - тине Радий Хәбиров.

**Төҙөкләндереү һәм дөйөм эштәр.** Бында республика Башлығы тормошобоҙға үтеп ингән вандаллыҡҡа иғтибар йүнәлтте. Ысынлап та, бөгөн генә ремонтланған, төҙөкләндерелгән урындар иртәгәһенә ҡыйратыла, емерелә икәненә шаһит булып тора быҙ. "Үҙ йортонда, ихатанда, республикала тәртип булдырыу - һәр ҡайһыбыҙҙың эше икәнлеген аңлатырға, бер-беребеҙҙең ихтыяжын иҫәпкә алып, килешеп эшләргә, халыҡты яңырыу энергетикаһы менән зарядларға, уларҙы уртаҡ төҙөкләндереү эше менән берләштерергә, подъездарҙың, ихаталарҙың, лифттарҙың ремонтланған, матур булыуы фатир хаҡтарын һиҙелерлек арттыра икәнлеген аңлатырға кәрәк", - тине ул. Әйткәндәй, быйыл 400 ихата, 3 мең подъезд ремонтланһа, 700 километрҙан ашыу урамға яҡтылыҡ ҡуйылһа, киләһе биш йылда 3000 күп фатирлы йорт, 15 мең подъезд ремонтланасаҡ, йыл һайын 400 ихата төҙөкләндереләсәк.

**Торлаҡ төҙөлөшө.** Йыл дауамында 2 мең ғаилә үҙ фатирының ишеген асып ингән. Алдағы йылдарҙа башҡалар ҙа бәхетле мәлдәрен кисерәсәк. Ғөмүмән, йыл башынан алып 2 миллион квадрат метр сатаһы торлаҡ төҙөлгән. Подряд эштәрен башҡарыусы компаниялар бер үк ваҡытта социаль объекттар төҙөй, территорияны төҙөкләндерә. Балалар баҡсалары, мәктәптәр, поликлиникалар төҙөргә риза булмай тороп, төҙөлөшкә ризалыҡ бирелмәй.

**Уңайлы мөхит.** Республикала уңайлы ҡала мөхите булдырыу, парктарҙы һәм скверҙарҙы ремонтлау буйынса ҙур күләмле программа эшләй. Баш ҡала "Беренсе Май" паркы яңыртылған да инде. Тиҙҙән "Ҡашҡаҙан" паркы, Бейеүсе торналар фонтаны торған "Дубки" скверы йөҙөн үҙгәртәсәк. Совет майҙаны ла танымаҫлыҡ булып үҙгәрәсәк, унда халыҡ йыйған аҡсаға генерал Шайморатов һәйкәле урынлаштырыласаҡ. Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларының яр буйы икенсе төҫ аласаҡ, Өфөнөң тарихи үҙәген реконструк-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓14 һәм 15 декабрҙә Өфөлә республиканың ауыл хужалығы етештереүселәре ҡатнашлығында ит йәрминкәләре үтәсәк. Шулай уҡ өфөләрҙе Балыҡ йәрминкәһенә лә саҡыралар. Ул 14 декабрҙә "Меркурий" сауҙа комплексы ҡаршыһындағы аллеяла ойошторола.

✓Башҡортостан спортсылары Ҡазанда үткән пуля менән атыу буйынса Рәсәй беренселегенән биш миҙал алып ҡайтты: өс "бронза", бер "көмөш" һәм бер "алтын". Уларҙы Белореттан Матвей Потапов, Даниил Борисов һәм Алексей Афанасьев яуланы. Шәхси-команда ярыштарында республика йыйылмаһы өсөнсө урынды алды.

✓Тиҙҙән теләгән һәр кемде хенд-мейдав темаһына ылыҡтырыу буйынса сираттағы проект: оҫталыҡ дәрестәренә яҙылыу һәм "Хыялға юл" проекты сиктәрендә оҙайлы курстар башлана. Был хаҡта уҡытыуға сираттағы грант отҡан Башҡортостандың Һөнәрселек палатаһы "Өфө. Арт. Һөнәрҙәр. Сувенирҙар" күргәҙмәһе барған көндәрҙә иғлан итте.

✓Башҡортостанда теләгән һәр кем Ҡыш бабайға шылтыратып, шиғыр һөйләй һәм үҙенең хыялын әйтә ала. Ҡышҡы тылсымсы шылтыратыуҙарҙы +7(347) 214-92-54 номеры буйынса ҡабул итә, тиелә new-year-party.ru порталында. Ҡыш бабай иҫәнләшә, уға кемдең шылтыратыуын һорай, уның тәртибе менән ҡыҙыҡһына, шулай уҡ шиғыр һөйләргә, хыялын әйтергә тәҡдим итә һәм Яңы йыл менән ҡотлай.

✓Өфө тарихы музейында билдәле рәссам-карикатурасы Камил Буҙыҡаевтың күргәҙмәһе асылға. Күргәҙмә "Мына ҡарале!" тип атала. Рәссам үҙенең сатирик эштәре, Башҡортостандың иҗтимағи-сәйәси тормошо күренештәренә бик тиҙ яуап биреүе һәм хатта ваҡиғаларҙы алдан күрә алыуы менән ҙур популярлыҡ яуланы. Күргәҙмә Ленин, 72 адресы буйынса 10 декабрҙән 2020 йылдың 10 ғинуарына хәтлем эшләй.

✓2019 йылдың декабрендә Үзбәкстандан Өфөгә беренсе автобус рейсы юллана. Бынан тыш, Ташкент һәм Рәсәйҙең тағы 10 ҡалаһы, шул иҫәптән Мәскәү, Санкт-Петербург, Һамар, Новосибирск араһында автобустар йөрөй башлай. Быға тиклем Үзбәкстандан Рәсәйҙең ике ҡалаһына - Түбәнге Новгородҡа һәм Ҡазанға ғына автобустар йөрөй ине. Өфөнән Ташкентҡа поезда һәм самолетта барып етергә мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

цыялау буйынса ҙур проект тормошҡа ашырыла башлаясаҡ.

**Йәмәғәт транспорты.** "Башавтотранс"ҡа баш ҡаланы барлыҡ район үҙәктәре, ә барлыҡ район үҙәктәрен һәр бер ауыл менән бәйләүсе даими транспорт хәрәкәте булдырыу бурысы ҡуйылған. Республикала был тармаҡ илдә иң яҡшыһы булырға тейеш.

**Юлдар.** Үтеп барған йылда 1,5 мең километр самаһы юл ремонтланған, 900 километрына ҡом-таш түшәлгән, 50 километр юл һалынған һәм 5 күпер төҙөлгән. 2024 йылға барлыҡ проблемалы күперҙәр ҙа тәртипкә килтереләсәк.

**Медицина хеҙмәте.** "Беҙ ҡыҫҡа ваҡытта дауаханаларға һәм поликлиникаларға 660 медицина хеҙмәткәре йәлеп итеүгә өлгәштек. Халыҡты беренсел ярҙам менән тәьмин иттек. Сираттарҙа тороу ваҡытын кәметтек. Табипҡа яҙылыуҙы ябайлаштырҙыҡ... Был өлкәлә барлыҡ проблемаларҙы ла хәл иттекме? Юҡ, әлбиттә. Әммә ошо тема буйынса граждандарҙың мөрәжәғәттәре күпкә кәмене, тимәк, беҙ дөрөҫ юлдан барабыҙ", - тине республика Башлығы. Билдәләнеүенсә, йыл башынан йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙарынан, яман шештән вафат булыусылар, юл-транспорт фажиғәләре, үҙ-үҙенә ҡул һалыу, алкоголь менән ағыуланыу һөҙөмтәһендә яҡты донъя менән хушлашыусылар һаны кәмегән.

**Еңеү көнө тураһында.** Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршылағанда ветерандар барыһы ла торлаҡ менән тәьмин ителергә, фронтта булыусыларға һәм тыл хеҙмәткәрҙәренә ярҙам күрһәтелергә, барлыҡ хәрби мемориалдар һәм стелалар тәртипкә килтерелергә тейеш. Шулай уҡ ул юбилей йылында "Патриот" хәрби-патриотик парки төҙөлөшөн башлау хаҡында ла белдерелде.

**Атай-әсәй булыу - бәхет.** "Беҙ матди байлыҡ, карьера, аҡса эшләү менән артыҡ мауығып, иң мөһиме - атай-әсәй бәхете икәнлеген онотоп ебәрҙек. Яңы машина, фатирҙағы ремонт, турсәйәхәт бала йыламайыуынан да мөһимерәк була аламы? Тормошобоҙҙа шунан да ҡиммәтерәк тағы нимә бар?" - тип һорау ҡуйҙы республика Башлығы һәм йәштәргә мөрәжәғәт итеп, хөкүмәттең һәр бала өсөн ҡыуанғанын, дәүләт тә, хөкүмәт тә ярҙам итергә әҙерлеген белдерҙе. Билдәләнеүенсә, граждандарҙың яуаплылыҡтан ҡурҡыуы һөҙөмтәһендә республикала йыл һайын 10 мең сабый тыумай ҡала...

**Тәбиғәт байлыҡтары.** Радий Хәбиров үҙенең сығышында төбәктә тәбиғәт байлыҡтарын урлауға, урмандарҙы ҡырҡыуға нөктә ҡуясағын белдерҙе: "Кайһы бер эшмәкәрҙәр мине ишетмәне, беҙ һаман да тәбиғәт байлыҡтарын юғалтыуҙы дауам итәбеҙ. Мин был проблеманы мотлаҡ ослап ҡуясаҡмын".

**Фәнни белем биреү үҙәге.** "Беҙ был үҙәк сиктәрендә дүрт: химия, энергетика, медицина, аҡыллы машиналар һәм авиация йүнәлештәренә иғтибар туплаясаҡбыҙ, - тине республика Башлығы. - Ошо тармаҡтарҙа технологик лидерҙар булдырырға тырышасаҡбыҙ. Яңы перспективалы һөнәрҙәр асасаҡбыҙ, абруйлы ғалимдарҙы саҡырасаҡбыҙ. Беҙҙә 150 вуз-ара кафедра, яҡшы йыһазландырылған лабораториялар барлыҡҡа киләсәк. 5 мең урынлыҡ заманса вуз-ара студенттар кампусы төҙөйәсәкбеҙ". Шулай уҡ республикала Евразия федераль университеты ла ойоштороласаҡ. Киләһе йылда Өфөлә математика һәм IT-технологиялар буйынса һәләтле балалар өсөн республика лицей-интернаты асыласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика Башлығы сығышының һуңында былтыр алынған йүнәлештәр һәм эшмәкәрлек буйынса фекеренең үҙгәрмәүен һәм артабан да ошо юҫыҡта эш алып барырға кәрәклеген белдерҙе. Шулай ҙа йәштәргә айырым мөрәжәғәт итте: "Йәштәр һәр саҡ яҡшы тормош әҙләп сығып китә, икенсе кемдер булдырған мөхиткә инеп китә ала. Әммә был осраҡта улар үҙҙәре булдырғандың түгел, кемдеңдер уйының бер өлөшө генә булыуын аңларға тейеш. Бында, тыуған ереңдә, ауырлыҡтарҙы - бюрократияны, юҡлыҡты, аңлашмаусанлыҡты һ.б. еңеп, үҙегеҙҙең тарихығыҙҙы яҙаһығыҙ! Уны үҙегеҙ эшләйһегеҙ! Ул һеҙҙең идея һәм проект, һеҙҙең ижад, һеҙҙең республикағыҙ буласаҡ".**

**"Беҙҙең бай тарихыбыҙ, ҡеүәтле иҡтисадыбыҙ, үҫешкән мәҙәниәтебеҙ һәм иҫ киткес тәбиғәтебеҙ бар. Әммә улар беҙҙең ҡаҙаныш түгел. Улар барыһы ла Аллаһы Тәғәлә һәм беҙҙең бөйөк ата-бабаларыбыҙ тарафынан булдырылған. Ә мин үҙебеҙҙең ҡаҙаныштар, үҙебеҙ булдырғандар, үҙебеҙ төҙөгәндәр менән ғорурланыуыбыҙҙы, бүлә-бүләсәрҙәребеҙҙең "рәхмәт" тип әйтеүен теләйем, - тине йомғаҡлау һүҙе итеп республика Башлығы. - Әйҙәгеҙ, республика менән бергә үҫәйек, уны көн һайын матурыраҡ, яҡшыраҡ, байыраҡ итергә тырышайыҡ. Һәм үҙебеҙ ҙә яҡшыраҡ булайыҡ. Был беҙҙең ҡулдан килә. Бергәләп алға, Башҡортостан!"**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# БӨТӨН ЕРҘӘ "ПИ-ПИ-ПИ"...

**Ҡала урамдарында яңы объекттарға, үҙгәрештәргә иғтибар итһәм дә, кешеләргә артыҡ иғтибар биреп бармай инем. Социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары союзы рәйесе Рәшиҙә Солтанованың аптырап, әсенеп яҙған: "Халыҡ! Бөгөн үҙәк урамдар буйлап йәйәү үттем. Ҡот осҡос! Һәр ерҙә һүгенәләр. Мин уларҙы оялтып маташам, улар хатта нимә өсөн икәнен дә аңламай!" - тип яҙған посын уҡығас, урамда кешеләргә иғтибар итергә булдым. Ысынлап та, туҡталышта ғына торғанда ла һүгенеү һүҙҙәренең ниндәйен генә ишетмәйһең. Был бигерәк тә йәштәргә хас. Улар өсөн эргәләрендә ҡыҙҙар торамы, ололармы - бар тип тә белмәйҙәр. Ҡыҙҙар егеттәрҙең телмәренә иғтибар итеү йәки уларҙы тыйыу түгел, хатта үҙҙәре ҡушылып һүгенә. Элегерәк телевизорҙа, гәҙәттә шоу-программаларҙа, һүгенеү һүҙе килеп сыҡһа, шунда уҡ "пи-пи-пи" тигән сигнал ҡуялар ине. Бөгөн урамдағы телмәрҙе тыңлағанда, ул "пи-пи-пи" тип кенә ишетеләсәк...**

Медиктарҙың тәжрибәһендә шундай күҙәтеүҙәр бар: фалиж һуҡҡанда, тулыһынса һөйләшеү һәләтен юғалтҡанда ҡайһы бер кешеләр бары тик һүгенеү һүҙҙәрен генә әйтә ала. Тимәк, кешенең нормаль телмәренән айырмалы, һүгенеү бөтөнләй икенсе нерв сылбыры аша үтә. Һәм был процесты тикшергән профессорҙарҙың береһе, беҙ һүгенеү һүҙҙәре тигән терминдар мәжүсилек заманындағы кеше затын боҙоу, милләткә түлһеҙлек саҡырыу өсөн ҡулланылған ҡарғыш, тигән фекергә килгән. Юҡҡа ғына улар ир-аттың һәм ҡатын-ҡыҙҙың енес ағзалары менән бәйләнмәгән. Шулай уҡ башҡа һүгенеү һүҙҙәре - мәжүси аллаларҙың, йәғни шайтандарҙың исеме икән. Ошо исемдәрҙе әйткән кеше, үҙе лә аңламаҫтан, ошо йән эйәләрен үҙенә, балаларына, затына саҡыра. Һүгенеү - кешенең йәшәү көсө булған "үҙәген" - әсәлек башланғысын һәм аталыҡ көсөн юҡҡа сығарырға һәләтле.

Ғалимдар күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһендә тағы ла шундай ҡыҙыҡ һығымта яһаған: телдәрендә енес ағзаларына бәйле һүгенеү һүҙе булмаған илдәрҙә һәм милләттәрҙә Даун һәм ДЦП сирләр бөтөнләй юҡ икән.

Ә беҙҙә иһә был һүҙҙәрҙе икмәк урынына ашайҙар! Торлаҡ биләмәләре эстетикаһы йылын иғлан итеп, халыҡтың зауыҡын күтәрергә ниәтләйбеҙ, бәлки, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында ғына түгел, барлыҡ коллективтарҙа этиканы күтәреү йылын да иғлан итергә кәрәктер? Зауыҡ булыу менәнме ни, илдә тәрбиә, тәртип булмаһа һәм аҙым һайын ҡолағыңа "пи-пи-пи" тигән сигналдар ғына ишетелеп торһа...

**Гөлгөнә ҒӘЛИНА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ХУЖАҺЫҘ ТРАНСПОРТТАР



**Баш ҡалала ташландыҡ транспорт сараларының хужаларын асыҡлау эше дауам итә. 28 ноябрҙә Орджоникидзе районы территорияһында үткәрелгән махсус комиссияның рейд һөҙөмтәләре буйынса, шундай 12 машина асыҡланған һәм уларҙы махсус һаҡлау урынына күсереү тураһында белдереү таратылған. Әлегә бары тик бер генә хужа транспорт сараһын икенсе урынға күсергән.**

25 декабргә тиклем комиссия асыҡланған автомобилдәрҙе тағы бер тапҡыр тикшерәсәк һәм иғтибар булмаған осраҡта, икенсегә белдереү таратасаҡ. Бынан һуң да иғтибар булмаһа һәм талаптар үтәлмәһә, тейешле бойороҡ булғандан һуң, мәғлүмәт ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында һәм "Вечерняя Уфа" гәзитендә баҫылып сығасаҡ һәм был транспорт саралары мәжбүри рәүештә махсус туҡталҡаларға күсереләсәк. Был осраҡта инде уларҙы һаҡлау өсөн уның хужаһынан, ул килеп алғанға тиклем, һәр тулы тәүлек өсөн билдәле хаҡ алынасаҡ. Һорауҙар тыуған осраҡта, транспорт хужаларына Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығына Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 84 адресы буйынса 308-се бүлмәгә йәки (347)273-12-62 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Бынан тыш, ташландыҡ транспорт саралары тураһында +7(986) 964-13-22 номеры буйынса WhatsApp ҡушымтаһына яҙырға мөмкин. Мәғлүмәткә ташландыҡ транспорттың фотоһы йәки маркаһы, моделе, төҫө, дәүләт теркәү билдәһе (әгәр булһа), ентекле итеп уның ултырған урыны һәм мәғлүмәтте ебәреүсенең фамилияһы, исеме, атаһының исеме яҙылырға тейеш.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Инсульт

❖ Лимондың яртыһын ҡабығынан таҙартып ваҡларға, өҫтөнә ылыҫ ҡайнатмаһын ҡойорға һәм ашарҙан 1 сәғәт алда йәки ашағандан 1 сәғәт үткәс эсергә (көнөнә ике лимон ҡулланырға ярай). Дауаланыуҙы 2-3 аҙна дауам итергә һәм бер ай туктап торғандан һуң тағы ҡабатларға мөмкин.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған кипкән сөйәл үләнен 1 стакан ҡайнар һыуға һалып 15 минут бешерергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2 ҡалаҡ эсергә. 2-3 аҙна дауаланырға.

### Файҙалы һарымһаҡ

❖ Һуған ете ауырыуҙан дауа булһа, һарымһаҡ - етмеш ете ауырыуҙандыр. Ул иммунитетты яҡшырта, ашҡаҙан, йөрәк, ҡалҡан биҙенә ыңған тәьсир яһай, ҡан тамырҙарын таҙарта, яман шеш барлыҡҡа килеүен иҫкәртә. Дөйөм файҙалы төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 кг һарымһаҡты ваҡларға һәм өс литрлыҡ банкаға һалып, 1 литр һыу ҡойорға. Банканы ҡапҡас менән ябып ике аҙна-бер ай төнәтергә. Иртәнге аштан 15-20 минут алда 1 балғалаҡ төнәтмәне 1 стакан ҡайнатылған һөткә ҡушып болғап эсергә кәрәк.

### Һалҡын тейгәндә

❖ Юл япрағын, туҡранбаштың сәскәһен, кейәү үләне, бөтнөк, мәтрүшкә, болон туҡранбашы үләндәрен, үгәй инә үләне япраҡтарын, ҡырағай алмағас япрағы һәм емешен, бесәй тырнағы, андыҙ һәм ҡурийн үләне (солодка) тамырҙарын һалып әҙерләнгән сәй һалҡын тейгәндә яҡшы дауа.

### Ҡоро йүтәл булғанда

❖ Тулыр-тулмаҫ бер ҡалаҡ шәкәрҙе ул ҡара-һоро төҫкә ингәнсе ут өҫтөндә тотоpға. Шунан ирегән шәкәрҙе һөт һалынған шешке аҫтына ҡойорға. Ошо рәүешле әҙерләнгән шәкәрле кәнфитте имеп йөрөү ҡоро йүтәлдән ярҙам итә.

### Тамаҡ ауыртҡанда

❖ Сөгөлдөрҙө пластмасса ҡырғыста ваҡ ҡына итеп ҡырып, 1 ҡалаҡ аш һеркәһе ҡойорға. Сөгөлдөрҙөң һуты һарҡҡандан һуң, шул һут менән ауыртҡан тамаҡты сайҡарға кәрәк. Сөгөлдөр урынына кишер ҙә ҡулланырға була.

✓ *Радио-телевидениела "Урал батыр" сәғәттәре, ҡырғыҙҙарҙа - "Манас көнө", яҡуттарҙа олонхо көнө булған кеүек, республикала "Урал батыр көнө", Урал батыр исемендәге премиялар, исемдәр булдырырға кәрәк.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Бер пар ҡусҡар бер нисә традицион берләшмә биргән. Тәү сиратта был мөгөҙгә оҡшаш мотив варианттары. Бер нөктәнән башланған, саҡ ҡына төрлө яҡҡа айырымланған, кәкерсәктәре аҫҡа ҡарай бөгөлгән мөгөҙҙәр һөҙәк була һәм ҡырҡа барып тамамлана алған.**

Ҡайһы бер парлы мөгөҙҙәр бағана йәки ҡыя шаҡмаҡ формаһындағы тояҡта күтәрелеп торған. Өҫкө һыҙаты тулҡынланып торған мөгөҙҙәр зауыҡлы күренгән. Мөгөҙ рәүешендәге һүрәт ырғаҡтар менән уратылған, япраҡтар, бармаҡ кеүек һөңгө баштары, таж япраҡтары менән өҫтәп биҙәгәндәр. Уйһыуҙан ҡусҡарлы үҙәк күтәрелгән. Һәр яңы пар мөгөҙ үҙ сиратында бәләкәй генә өсмөйөш һәм трапеция формаһындағы һырлы һөңгөләр, йә төрлө төҫтәге ырғаҡ ҡусҡарҙар ярҙамында биҙәлгән. Ҡапма-ҡаршы төҫтәргә буялған парлы мөгөҙҙәрҙән торған пирамидалар айырыуса йәмле күренгән. Учалы ҡалаһының тарихи-крайҙы өйрәнеү музейы коллекцияһындағы туй янсығында ҡыҙыл төҫтәге мөгөҙҙәрҙән һары мөгөҙҙәр "үҫеп сыға", һарынан - ҡара. Ҡыҙыл пар мөгөҙҙәрҙән таралған ҡусҡарҙар шәмәхә ептән ҡайылған, һары парҙан - йәшелдән; ҡара мөгөҙҙәр ырғаҡланып торған ҡыҙыл үҫентеләр менән биҙәлгән.



*Ҡусҡар биҙәк: мөгөҙгә оҡшаш. Автор һүрәте.*

Симметриялы орнаменттың уң һәм һул яҡ биҙәген ҡайығанда төрлө ептәр ҡулланылыуы ихтимал булған. Әбйәлил районы Бурանғол ауылында беҙ күргән янсыҡта (1971 йылғы экспедиция) ике пар мөгөҙҙән торған ябай биҙәк дүрт төҫлө итеп эшләнгән: аҫта йәшел һәм һары тоташҡан, өҫтәрәк ҡыҙыл һәм күк ҡусҡарҙар. Ҡусҡар орнаментының нигеҙен тәшкил итеүсе булараҡ кәкерсәк был әйберҙәрҙә айырыуса асыҡ сағыла.

Мөгөҙ биҙәктәр бер-береһенә ҡабарынҡы яғы менән тейеп торған нағыштар серияһы үрҙә телгә алынғанға яҡын; ике яҡҡа айырымланған ҡусҡар тояҡтары фигураны тигеҙләгән. Алдан әйтеп үтелгән осраҡтағы кеүек ырғаҡ-кәкерсәктәр, япраҡтар һәм үренделәр менән тулыландырылған бер һәм ике ҡатлы биҙәктәр осрай. Төҫө ҡатлам һайын үҙгәртелгән, йыш ҡына уң һәм һул яҡтар тап килмәгән. Шуға күрә үҙәк бағана ике һыҙаттан тороп төрлө төҫтән дә эшләнер булған. Был нағыштар серияһының төп фигураһы һәр ваҡыт кешегә оҡшаш (антропоморф) һынды хәтерләткән.



*Ҡусҡар биҙәк: мөгөҙгә оҡшаш. Автор һүрәте.*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*АФАРИН!*

**Бөгөн йәмғиәттә милли идеология һәм милли идея эҙләү дауам итә. Әммә боронғоларҙың, һәр яңылыҡ - ул онотолған иҫкелек, тиеүе бер ҙә юҡҡа түгел. Сөнки был тормош һәр саҡ циклдар һәм спираль рәүешендә бара, күпмелер ваҡыттан һуң ул яңырып тора. Ә тормош нигеҙен тәшкил иткән ҡиммәттәр үҙгәрешһеҙ ҡала, һәр хәлдә, улар ҡасандыр тормош һәм тәбиғәт тарафынан барлыҡҡа килтерелгән һәм үҙгәрергә тейеш түгел.**



# УРАЛ РУХЫ ҠЫУАНҒАНДЫР

Бөгөн, ниһайәт, нисәмә йылдар әҙерлек эштәре алып барылғандан һуң республикала "Урал батыр" мәктәбе" асылды. Проект авторҙарының береһе, педагог, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәрйәм Бураҡаева билдәләүенсә, "Урал батыр" эпосы - башҡорт халҡының милләт булып тупланыуында, формалашыуында төп тәғлимәттәрҙең иң әһәмиәтлеһе булған. Бөгөн был тәғлимәттәргә яңынан әйләнеп ҡайтабыҙ, сөнки улар беҙҙең булмышыбыҙҙа, ҡаныбыҙҙа. Йәғни башҡорт халҡының бөйөк ижады беҙҙең үҫеш юлында һут биреп тороусы тамырҙарыбыҙ ул. Уның аша бөгөнгәсә йәшәү һуты алабыҙ. Йәшәйешебеҙҙе "Урал батыр"ҙа тупланған тәғлимәттәргә нигеҙләгәндә, халҡыбыҙҙы һәм Башҡортостаныбыҙҙы алдынғы, көслө, батыр, аҡыллы, аңлы төбәккә лә әйләндерергә мөмкин. Ул тәғлимәттәр ниндәй һуң? "Урал батыр" мәктәбе"н ойоштороусылар уларҙың ошо йүнәлештәрен тәҡдим итә:

- Тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү ("Тау буйҙары йәшәрһен, Мәңге үлмәҫ төҫ алһын", тиелә эпоста).
- Ҡараусыһыҙ ҡалғандарға, ярҙамға мохтаж булғандарға иғтибарлы булыу, ярҙам ҡулы һуҙыу ("Еҫерҙәрҙең алдында Күҙенә керпек булығыҙ").
- Матди яҡтан хәлле йәшәгән милләттәштәрҙең әүҙем ярҙамын ойоштороу ("Ил ынйыһын йәшереп, Ергә күмеп ҡуймаҫҡа").
- Эскелеккә ҡаршы көрәш ("Яҡшының эскәне - һыу булыр, Яманның эскәне - ыу булыр").
- Атай-әсәйһеҙ ҡалыу ғына түгел, илһеҙ ҡалыу ҙа етемлек икәнен аңлатыу ("Ил күрергә сыҡтым мин, Ер ҡошонан түгелмен. Йәшәй торған илем бар, Илһеҙ етем түгелмен").
- Ҡыйыш юлға баҫыусыларҙы туғанлыҡ тойғоһо көсө менән туралап ебәреү ("Атамдың хаҡы өсөн, Әсәмдең хәтере өсөн, Тағы ла бер һынайым").
- Ғилем юлына баҫыусыларҙың өлгөһөндә тәрбиәләү, уңыш ҡаҙанғандарҙы хуплау ("Күккә менер баҫҡысһыҙ, Ерҙе асыр аҫҡысһыҙ").
- Яҡшылыҡты онотмау, рәхмәтле була белеү ("Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ Ҡыла торған йола бар").
- Башҡорт халҡының йәшәү рәүешендә эпос аҡылының төп роль уйнағанын, ошо принциптарҙан тайпылыуҙың Шүлгәнлеккә килтергәнлеген, Урал батыр васыятының асылын аңлатыу, эпос йөкмәткеһен белеү - һәр башҡорттоң төп бурысы ("Олоно оло итегеҙ, Кәңәш алып йөрөгөҙ. Кесене кесе итегеҙ, Кәңәш биреп йөрөгөҙ").
- Ни сәбәптәндер онотолған йәки онотторға мәжбүр ителгән шәхестәребеҙҙе, тарихыбыҙҙы милләтебеҙгә кире ҡайтарыу, йәш быуынды абруйлы шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләү ("Йәншишмәнән һыу алып, Үлгәндәрҙе терелтеү өсөн тыуған батырмын").

Быға са күренекле ғалимдарыбыҙ Фәнүзә Нәҙершина, Әхмәт Сөләймәнов, Салауат Ғәлин, Дамир Вәлиев, Салауат Ғәлләмов, Рәшит Шәкүр, Зәкирйән Әминев, Шәүрә Шәкүрова, Гөлнар Юлдыбаева һәм башҡалар эпосты халыҡҡа яҡынайтыуҙа ҙур эш башҡарып, ул милли сәнғәттә, телевидение программаларында төрлө яҡлап яҡтыртыла. Эпос мәктәп программаларына ла индерелгән. Әммә һуңғы йылдарҙа эпосҡа бөтөнләй икенсе - психология, медицина, психосоматика, география күҙлегенән дә ҡарай башлауҙары ҡыуандыра. Был йүнәлештә психологтар Ғәлиә Сәлихова, Рөстәм Кәлимуллин, Айбулат Уразбахтин, Урал Вәлишин уңышлы эшләй. Ысынлап та, "Урал батыр" эпосы - ул тере шишмә кеүек, асылып бөтмәҫ сер сығанағы. Бәлки, заманында уны һәр кеше шунда уҡ аңлағандыр, әммә бөгөн ул үҙенең серен яйлап һәм һайланмыштарға ғына аса. Ошо хәҡиҡәтте аңлағандар берләшеп, бер йүнәлештә эшмәкәрлек алып барғанда йәмғиәттең аңын үҙгәртеүе еңелерәк тә, тиҙерәк тә булаҫаҡ. "Билдәле булыуынса, халыҡ араһына сығыусы мосафирҙар, сәсәндәр, ғөмүмән, зиһен яҡтыртыусылар булған һәм улар халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалып, шул фекергә дөрөҫ йүнәлеш биргән. Бөгөн беҙ шундай юлды дауам итергә, ошондай эште алып барып сығарырға тейешбеҙ. Эпос бынан меңәр йылдар элек ижад ителһә лә, ундағы фекерҙәр бөгөнгә ауаздаш, бөгөнгө заманса яңғырай. Шуға ла һәр беребеҙ "Урал батыр" эпосының нуры менән нурланып, уның фекере менән йәшәргә тейеш", - ти Мәрйәм Бураҡаева.

Бында бигерәк тә йәш быуынға нығыраҡ иғтибар бирергә кәрәк, сөнки улар бер нисә йылдан бөгөнгө етәкселәр урынына килеп, йәмғиәтте тулыһынса үҙгәртергә тейеш. Ошо алмашыныу осоронда дейеү-аждаһалар ҙа, Шүлгәндәр ҙә нык ҡаршы тораҫаҡ. Шул осорҙо бирешмәй үткәреп ебәреп, яңы нигеҙҙә яңы йәмғиәт ҡорғанда ғына еңеллек киләсәк. Ә бөгөн, ниһайәт, "Урал батыр" эпосы - башҡорт халҡының йәшәйеш коды, үҫеш, яңырыу программаһы икәнен сәхнәнән тороп асыҡтан-асыҡ әйтә, Урал батыр рухын ҡыуандыра алғаныбыҙға ҡыуанайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтә ошо һөйләнгәндәр буйынса филология фәндәре кандидаты Гөлнар Юлдыбаева ошондай фекерен белдерҙе:** "Әлбиттә, доға ҡабатлауҙан иҫкермәй, тиҙәр, әммә "Урал батыр" эпосына таянып нимәлер эшләргә кәрәк икән, балалар баҡсаһынан башлап "Урал батыр" сәғәттәре, мәктәптәрҙә дәрестәр генә түгел, ә аҙналыҡтар үткәрергә, юғары уҡыу йорттарында гуманитар йүнәлештә уҡығандарға ғына түгел, ә республиканың бар юғары уҡыу йорттарында, бөтә төр йүнәлештәрҙә дәрестәр ойоштороу зарур. Радио-телевидениела "Урал батыр" сәғәттәре, ҡырғыҙҙарҙа - "Манас көнө", яҡуттарҙа олонхо көнө булған кеүек, республикала "Урал батыр көнө", Урал батыр исемендәге премиялар, исемдәр булдырырға, урамдарға Урал батыр исеме бирергә кәрәк һ.б. Күптән инде Урал батырға арналған монументаль һәйкәлдәр тураһында һөйләнелә, ҡайҙа улар? Эпос геройҙарына һәйкәлдәр эшләү тигәндән, республиканың ниндәй районына барып, ҡайһы яҡҡа ҡараһаң да, Урал батырҙы иҫкә төшөрөүсе урындар булырға тейеш. Урал батыр тирәләй бер тере индустрия тыуҙырырға кәрәк. Ә беҙҙә Урал батыр хаҡында китаптар ҙа юҡ, булғандары ҡиммәт, ябай халыҡҡа барып етмәй.

Әлеге көндә бик матур эштәр алып барыла, әлбиттә. Уларҙы ла дауам итергә кәрәк. Хәҙерге компьютер заманында балалар мәғлүмәтте күберәк радио-телевидение, телефондар аша һеңдерә. Телефондарҙа эпос тарихы буйынса ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына булһа ла йәнһүрәттәр, эпос геройҙары менән бәхетле, изгелектең еңеүе менән тамамланған уйындар кәрәк. Учалылар бер йыл "Урал батыр" эпосы буйынса флешмоб башлағайны, уны ла туҡтатмай, йыл һайын ҡабатлау фарыз. Эпосты төрлө телдәргә тәржемә итеүҙелға һалғанда ла насар булмаҫ ине, ул әле бары тик энтузиастар арҡаһында ғына тормошҡа ашырылып килә. Республика етәкселеге ярҙам итһә, был эпостарҙы тәржемә итеү, уларҙы киң ҡатлам уҡыусыға таратыуҙа бер аҙым булыр ине..."

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*✓ Иртыштан Дунайғаса Дәште Ҡыпсаҡ тип аталған төрки ҡәүемдәре иле барлыҡҡа килә. Был илдә бер үҙәктән идара ителеүсе дәүләтселек булмай, төрки ҡәбиләләре айырымланған берләшмәләр составында үҙаллы көн итә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ДАЛА УЛДАРЫ - ҠЫПСАҠТАР БЕҘ!



Сирҙар урта быуаттарҙағы төрки дәүләтселеге тарихында мөһим урын биләй. Ҡытай хроникаларында улар се (сйе) исеме аҫтында билдәле була. Тан династияһына (618-917 йй.) арналған "Тан шу" ҡытай хроникаһында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Сйеяньто ҡәүеме ике ырыуҙан - Сйе һәм Яньтонан хасил булып, улар бергәләшеп күсеп йөрөнө, ә һуңынан Сйе Яньто ырыуын буйһондорҙо... Тйеле ҡәүемдәре араһында улар иң көслөһө ине. Ғөрөф-ғәҙәттәре, башлыса, тукюестәрҙеке (төркиҙәрҙеке. - **авт.**) кеүек." Әйтергә кәрәк, ҡытайҙар тйеле йә иһә теле исеме менән уғыҙ ҡәбиләләре кешеләрен атаған. С.Г. Кляшторный яҙыуынса, тйеле боронғо монгол телендәге tegreg һүҙенең ҡытайса варианты булып, тәгәрмәс, арба мәғәнәһендә ҡулланылған. Хәҙерге монгол телендә арба "тэрэг", тип атала. Әммә тарихсы С. Хәмиҙуллин быны ң киреһенсә булыуы, йәғни, ошо һүҙҙең монгол теленә төрки телдәренән килеп инеүе ысынбарлыҡҡа яҡынораҡ, тип иҫәпләй. Төркисә tegrek һүҙе тәгәрмәс туғынын, түңәрәк тигәнде аңлата. Ҡытайҙар боронғо төркиҙәрҙе, шул иҫәптән уғыҙҙарҙы ла, берсә тйеле, берсә гаогюй, гаоцзюй (бейек арбалар), тип атай, был төркиҙәрҙең күсеп йөрөгән саҡтарында япмалы арба ҡулланыуының асыҡ сағылышы ул.

"Вэй шу" ҡытай хроникаһында (VI б.) шундай мәғлүмәт бар: "Гаоцзюй, күрәһең, боронғо чидинан тороп ҡалған бер тармаҡтыр. Иң әүәл улар дили тип атала ине, төньяҡта уларҙы чилэ, ә Ҡытайҙа гаоцзюй динлин (бейек арбалы динлиндар), тип йөрөттөләр. Дөйөм алғанда, уларҙың телдәре сюнну теленә оҡшаш, ҡай сағында ҙур булмаған айырымлыҡтар осрай." Ҡытайҙар чиди атамалы ҡәүем кешеләрен "ерән сәсле шайтандар", тип нарыҡлай, ә ҡытай теләнән чи-ди "ҡыҙыл ди", тип тәржемә ителә. Күрәһең, улар сығыштары менән һинд-европалыларға яҡын булғандыр. Ҡытайҙар ошо төрки ҡәүемдәренең ата бабаларының һундарҙан (сюнну) булыуы хаҡында ла мәғлүмәт ҡалдырған.

Антик авторҙары телгә алған серҙарҙың, ҡытай хроникаларындағы сеяньто һәм синьлиларҙың, боронғо төркиҙәрҙең руник ҡомартҡыларындағы сирҙарҙың бер үк ҡәбилә кешеләренең төрлө атамалары булыуы хаҡындағы фараз иң тәүҙә тарихсы Ю.А. Зуев тарафынан иғлан ителә. Ул бына ниҙәр яҙа: "Беҙҙең эраға тиклем III-II быуаттар сигендә үк һун шаньюйы Модэ синь-ли ҡәбиләһен буйһондора, был атаманы боронғо төрки руналарындағы сирҙар һәм антик авторҙарҙың (Плиний) зәңгәр күҙле серҙары менән сағыштырып була. Шул ваҡыттан бирле ҡытай тарихи яҙмаларында уларҙың һун, ә унан толесс (һун варисҡары) сығышлы итеп ҡарау традицияһы башлана... Сир, сер, се (сир) һәм синьли атамаларының тап килешлеген инҡар итеп булмайҙыр. Был 650 йылда сеяньтолар Чэбни ҡаған тарафынан тар-мар ителгәндән һуң уларҙың Отюкен тауҙарында элек йәшәгән төйәктәренең Синь-ли (йәғни, Сир) тутуклығы, тип аталыуы менән дә раҫлана."

Төркиҙәр, шул иҫәптән гаогюй (уғыҙ) ҡәбиләләре, үҙҙәре менән йәнәш йәшәүсе башҡа халыҡтар менән бәрелештәрҙә ҡатнашып тора, әммә V быуатта Жужань ҡағанатына буйһонорға мәжбүр була. 487 йылда гаогюйҙарҙың бер өлөшө, жужандәрҙән айырылып, Иртыш буйҙарына йүнәлә. VI быуат уртаһында Бумын ҡаған етәкселегендә Төрки ҡағанаты барлыҡҡа килә. Төркиҙәрҙең яулап алыу һуғыштары уңышлы бара, Орхондан Итиль йылғаһына тиклемге территорияла йәшәгән ҡәбиләләр уларҙың хакимлығы аҫтында ҡала. Ҡытайҙарҙың "Суй шу" (VII б.) хроникаһында башҡа бер халыҡтар менән бергә Арал буйында көн итеүсе божуцзюли (башукили) ҡәүеме лә иҫкә алына, тарихи әҙәбиәттә был атаманың башҡорт этнонимына тура килеүе раҫлана.

628 йылда Көнсығыш төрки ҡағанаты хакимы Иль ҡаған еңелеүгә дусар була, ә 630 йылда әсиргә алына. Емерелгән ҡағанатта сирҙар һәм уйғырҙар өҫтөнлөк алырға тырыша, Ҡытай императоры Тайцзун сирҙарҙы өҫкә сығара, уларҙың башлығы Инанчы-иркин үҙен Йенчу Билге ҡаған, тип иғлан итә. Шулай итеп, төрки һәм сирҙар союзына нигеҙләнгән яңы ҡағанат барлыҡҡа килә. Сир ҡағанаты оҙаҡ йәшәмәй - үҙ-ара низағтар, бәрелештәр арҡаһында сеяньто-уйғыр коалицияһы 642 йылда тарҡала. Сирҙар 646 йылда тамам тар-мар ителә, күп кешеһен юғалта, уларҙың 50 меңе самаһы көнбайыш тарафтарына ҡасып китергә мәжбүр була.

Әммә сеяньто-сир ҡәүеме юҡҡа сыҡмай. Артабанғы тарихта улар башҡа төрки ҡәбиләләре менән союзға инеп, II Көнсығыш ҡағанатын тергеҙеүгә күп көс һала, һәм был берләшмә төрки яҙма ҡомартҡыларында "turk sir budun" рәүешендә теркәлеп ҡала. 679 йылда ҡытай хакимлығына ҡаршы баш күтәргән төркиҙәр Ашина Ҡотлуғ исемле төрки принцын үҙҙәренең юлбашсыһы итеп таный, уға аристократик нәҫелдән сыҡҡан уҡымышлы Тоньюкук кәңәшсе булып килә. Ашина Ҡотлуғ Ильтериш ҡаған исеме аҫтында тарихҡа инә. II Көнсығыш төрки ҡағанаты 744 йылда баш күтәргән уйғыр, басмыл һәм карлук ғәскәрҙәре тарафынан тарҡатыла, уның урынын Уйғыр ҡағанаты ала. Тоньюкукҡа арналған руник ҡомартҡылағы яҙма бына нисек тамамлана: "Әгәр Эльтериш ҡаған булдырырға тырышмаһа, йә иһә ул үҙе булмаһа һәм мин үҙем, аҡыллы Тоньюкук, булдырырға тырышмаһам, йә иһә йәшәмәһәм, Капаган ҡаған һәм төрк-сир ерендә бер ниндәй ҙә дәүләт ойошмаһы, халыҡ та, кешеләр ҙә, хаким да булмаҫ ине. Эльтериш ҡаған һәм аҡыллы Тоньюкук тырышлыҡтары арҡаһында Капаган ҡаған һәм төрк-сир халҡы йәшәй. Төрк Билге ҡағаны төрк-сир халҡын һәм уғыҙ халҡын күтәрә."

II Көнсығыш Төрки ҡағанаты тарҡалғандан һуң ҡыпсаҡтар Иртыш йылғаһына яҡын ерҙәрҙә көн итә. Бында IX быуат урталарына яңы сәйәси берләшмә - Ҡимаҡ ҡағанаты ойоша. XI быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы әл Гардизи был берләшмәнең имур (эймур), йемек (ҡимаҡ), татар, ҡыпсаҡ, байандур, ланиказ, аджлад ҡәбиләләренән хасил булыуы хаҡында яҙа. Һуңғы ике ҡәбилә хаҡында аныҡ мәғлүмәт юҡ, ә эймур, байандур һәм татар ҡәбиләләре әүәл Уйғыр ҡағанаты ҡарамағында көн итә. Эймурҙар һәм байандурҙар туғыҙ уғыҙ ҡәбиләһе составында була, ә татарҙарҙың монгол телле ҡәүемдәрҙең береһе икәнлеге билдәле. Уларҙың ата-бабалары хәҙерге Көнсығыш Монголия һәм Манчжурия ерҙәрендә йәшәй. XI быуаттың билдәле телсе ғалимы Мәхмүт Ҡашғари үҙенең "Диван Луғат ат-Турк" китабында былай тип яҙа: "Үҙ һөйләше булған һәм төрк телен белгән Жумул, шулай уҡ Кай, Йабаку, Татар, Басмыл - күскенселәр. Был төркөмдәгеләрҙең барыһының да үҙ телдәре бар, шулай уҡ улар төрк телен яҡшы белә. Артабан Кырҡыз, Кифджак, Угуз, Тухси, Жикил, Уграк һәм Жарук. Уларҙа саф төрк теле, берҙәм тел. Йамак һәм Башгирт телдәре уларға яҡын."

Ҡимаҡ ҡағанаты XI быуатҡа тиклем йәшәй. X быуатта яҙылған "Худуд ал-Алам" ("Донъя сиктәре") фарсы трактатында Ҡимаҡ ҡағанатына тотош бер бүлек арналған. "Әл Ҡимаҡ батшаһына килгәндә, ул әл хаҡан тип йөрөтөлә. Ҡимаҡ илендә уның ун бер хакимы бар, власть уларҙың тоҡомдарына нәҫел буйынса тапшырыла. Әл Хифчаҡ иле әл Ҡимаҡ иленең бер өлкәһе булып, уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәре бер ни тиклем әл Гуз иленекенә оҡшаш..."

X быуаттың икенсе яртыһында Һырдаръя буйында йәшәүсе уғыҙ ябгулары (хакимдары) державаһында тарҡаулыҡ көсәйеп, уларҙың Сельджук исемле бейе бер төркөм уғыҙ яугирҙары менән Дженд ҡалаһын баҫып ала. Улар Ислам диненә күсеп, төркмән мосолмандары, тип атала башлай. Сельджук бейҙең ейәндәре Урта һәм Яҡын Көнсығышта Сельджук империяһын төҙөүгә өлгәшә. Әммә уғыҙҙарҙың күпселеге элекке ерҙәрендә ҡалып, XI быуатта монгол сығышлы кидандар ҡыҫымына дусар булып, көнбайыш тарафтарына табан күсеп китергә мәжбүр ителә. Был осорҙа бәғзе бер ҡәбиләләр икенселәре йәшәгән территорияға үтеп инә, улары бушыраҡ ятҡан ерҙәр эҙләп, арыраҡ күсенергә мәжбүр ителә. Был Евразия киңлектәрендә төрки ҡәбиләләренең көнбайышҡа табан йүнәлтелгән экспансияһына сәбәпсе була. XII-XIII быуаттарҙа Иртыштан Дунайғаса йәйрәп ятҡан киң далала Европала Дәште Ҡыпсаҡ тип аталып йөрөтөлгән төрки ҡәүемдәре иле барлыҡҡа килә. Был илдә бер үҙәктән идара ителеүсе дәүләтселек булмай, төрки ҡәбиләләре айырымланған берләшмәләр составында үҙаллы көн итә. Ҡыпсаҡ исеме менән аталған хәлдә лә, был территорияла бер нисә тиҫтә башҡа төрки ҡәбиләләре йәшәй. XIII быуатта улар барыһы ла монголдар тарафынан яулап алынып, артабан Алтын Урҙа дәүләте олоҫтары составына инеп китә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

"КИСКЕ ӨФӨ" ҠАМУСЫ



# МАЛИЕВТЫҢ ӘЙТКӘНЕ...

**Башҡорт халҡының тарихы һәм этнографияһы ғилми нигеҙҙә XVIII быуаттың икенсе яртыһында Петербург Фәндәр академияһы ойошторған экспедицияла ҡатнашыусылар тарафынан өйрәнелә башлай. Ундай тикшеренеүҙәр XIX быуатта ла дауам итә.**

Билдәле булыуынса, XIX быуат уртаһында яңынан-яңы фән өлкәләре барлыҡҡа килә. Шуларҙың береһе - антропология. Антропология (грек тел. антропос - кеше; логос - фән) кешенең килеп сығышын һәм эволюцияһын, расаларҙың барлыҡҡа килеүен һәм кешенең физик төҙөлөшөнөң төрҙәрен тикшергән фән. Төп бүлектәре: морфология, антропогенез, расаларҙы өйрәнеү. Бөгөнгө көндә антропологияла төрлө алымдар ҡулланыла: антропометрия (үлсәү методикаһы), краниология (баш һөйәген өйрәнеү), остеология (һөйәк һөлдәһен тикшереү), антропоскопия (тасуирлау методикаһы), дерматоглифика (тире рельефын өйрәнеү) һәм башҡалар.

Рәсәйҙә XIX быуаттың икенсе яртыһында антропологияның кешенең физик төҙөлөшөн тикшереү йүнәлеше нығыраҡ үҫеш ала. Нәҡ шул ваҡытта башҡорттар антропологияһына бағышланған беренсе фәнни хеҙмәт донъя күрә. 1876 йылда Ҡаҙанда "Труды Общества естествоиспытателей при Казанском университете" серияһында (V том. 5 сығар.) Н.М. Малиевтың "Антропологический очерк башкир" ("Башҡорттарҙың антропологияһы хаҡында очерк") исемле очерк нәшер ителә.

Николай Михайлович Малиев 1841 йылда тыуа. Ул Һамарҙа Духовный семинария тамамлай, артабан Ҡаҙан университетында уҡыуын дауам итә. Унан һуң шул уҡ университетта хеҙмәт итә башлай. 1888 йылда ул Томск ҡалаһына яңы ғына асылған университетҡа анатомия кафедраһына ординарный профессор булып эшкә күсә һәм шул уҡ ваҡытта медицина факультетының секретары (деканы) була. Пенсияға сыҡҡас, Н.М. Малиев Петербургҡа күсеп китә һәм Петербург университетының медицина факультетында уҡыта. Николай Михайлович Малиев 1916 йылда вафат була.

Н.М. Малиев "Антропологический очерк башкир" тигән хеҙмәтенә материал әҙерләгәндә Башҡортостанға килеп тикшеренеүҙәр үткәрә. Өфө губернаһында ул 40 башҡортто 32 билдә буйынса ныҡлап өйрәнә. Шул нигеҙҙә ул башҡорт халҡын 2 типҡа бүлә: урман һәм ялан башҡорттарына. Шулай уҡ башҡорттарҙың байтаҡ күсмә формалары һәм типтары бар тип фараз итә. Уларҙы айырым-айырым күрһәтә. Автор башҡорттарҙың ике тибын шулай тасуирлай: "Башҡорттар араһында урман һәм ялан антропологик типтарын билдәләп була. Беренсеһе (урман тибы - **А.П.**) үҙенең һыҙатланышы менән кавказ тибына яҡын, ул Урта Азияның күп халыҡтарына хас. Ялан тибы башҡорттар араһында иң күп таралғаны, яҫы һәм киң бите, тәрән батырылған йәки тура танауы менән айырылып тора. Улар араһында ла күсмә формалар күп кенә". Н.М. Малиевтың хеҙмәте башҡорттарҙың антропологик составы бер төрлө булмауын, башҡорт халҡының этник тарихы ҡатмарлы булыуын күрһәтә.

Әйтергә кәрәк, ул осорҙа башҡорт этногенезы проблемаһы буйынса бер үк ваҡытта ике гипотеза йәшәгән - уғыр-мадьяр һәм төрки. Николай Михайлович Малиев үҙенең "Антропологический очерк башкир" әҫәрендә башҡорттарҙы төрки халыҡ тип иҫбатлай. Авторҙың ул хеҙмәте беҙҙең өсөн шуның менән дә ҡиммәт.

**Айбулат ПСӘНЧИН.**

# МӨХӘББӘТ

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы

**Уның шиғырҙарына битараф ҡала алмай. Рухлы, милли-патриотик булһынмы улар, мөхәббәт лирикаһымы, ҡатын-ҡыҙ һыҙланыуымы, йәшәйеш фәлсәфәһеме - ҡойоп ҡуйған, йәнде арбар, илһамландырыр, тертләтер, хистәрҙән сәсәтер кимәлдә була ла ҡуя. Бирелһә бирелә икән кешегә шиғри һәләт! Шиғри ғына түгел, кешелеклек һәләттәрен дә, мәрхәмәтлек һәләттәрен дә, аҡыл, сабырлыҡ һәм сибәрлекте лә йәлләмәгән уға Яратыусыбыҙ. Ошондай фекергә килдем мин Зөлфиә ХАННАНОВА менән яҡындан аралашҡандан һуң.**

**Зөлфиә апай, һеҙҙең "Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла..." тигән шиғырығыҙ бар. Ошонан ғына ла кемдәр мәктәбендә ижади нигеҙ алыуығыҙ аңлашыла. Һеҙ әҙәбиәттең бер көслө быуыны менән аралашып ҡалыу бәхетенә өлгәшкәнһегеҙ, шулай бит?**

- Аралашып ҡына түгел, улар менән ҡайнап йөрөп, бергә эшләп-йәшәп ҡалдым. Бик көслө ижадсылар, хатта ки хыялый ижадсылар ине улар. Беҙ беренсе курсҡа килгәндә ағайҙарҙың күптәре дүртенсе-бишенсене тамамлай ине инде. Барыһы ла "Шоңҡар" ға йөрөй, әҙәбиберекмә гөрләп тора, осрашыуҙар бер ялҡынлы митинг формаһында үтә. Студенттар төрлө райондарға сығып шиғыр кисәләре ойоштора, ҡәләм тирбәтеүсе балалар менән эшләй. Ауылдарҙа халыҡтың шул Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙуллаларҙың шиғырҙарын яратып ҡабул иткәнен, дәррәү ҡул сапҡанын, ниндәйҙер әҫәрҙәрен һорап уҡытҡанын күреп ҡайтаһың да, их, бына шулай итеп яҙырға ине, тип уйлайһың. Ысынлап та, шул илһам менән тоҡанып, уларҙың ижадына ғашиҡ булып, яҙғандарын ятлап алаһың. Һәм тағы ла, һин шиғыр кимәлен аңлайһың. Ҡайһындай һүҙ оҫталары янында йөрөп, уларҙың ижадҡа мөнәсәбәтен күреп, һин дә юҡ-бар менән ҡағыҙ бысратмаҫҡа икәнде төшөнәһең. Әлбиттә, һәр авторҙың үҙ кимәле һәм һәләт сиге була. Шулай ҙа һин планкаңың ниндәй юғарылыҡта булырға тейешлеген һәйбәт тояһың.

Ағайҙарҙың артынан әйәрә килгәндәрҙән беҙҙең йәштәш Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева ул ваҡытта прозаик түгел, ә шағирә ине. Һәм уның шиғриәте лә иҫ киткес ине. Зөлфирәнең һоҡланғыс образдарын әле лә иҫләйем мин:

*"Көтмәгәндә ҡап уртаға*
*Буленде тулған айым,*
*Төүге тапҡыр мөхәббәтһеҙ*
*Яҙымды ҡаршылайым.*
*Ярым-ярты... Ә Етеган*
*Сүмесләп бәхет һона,*
*Юҡ, кәрәкмәй! Ҡыйғас айым*
*Яңынан тыуғас ҡына*
*Тулы бәхет үҙе килер.*
*Ә бер сүмес аҙ бит ул!*
*Табыштырыр, ҡауыштырыр*
*Йүләр миҙгел - яҙ бит ул..."*

Артабан Айһылыу Ғарифуллина танылды арабыҙҙа. Беләһегеҙ ул шағирәнең образдар байлығын, тел маһирлығын, һәләтен, ихласлығын. Шул уҡ осорҙа Салауат Әбүҙәров, Марат Кәбировтар килде. Һәр яңы шиғырҙы тиҙерәк бер-беребеҙгә ишеттерергә теләп, 1-се ятаҡтың төрлө ҡаттары араһындағы баҫҡыс майҙансығында булһа ла йыйыла һалып, шиғыр уҡышабыҙ. Үәт, егеттәр яҙа ине, исмаһам!

Беренсе-икенсе курстарҙа ғына әле беҙ, "шоңҡарҙар", Ҡаҙанға барып, Ҡаҙан дәүләт университетының "Әллүки" ижадсылары менән шиғри бәйгеләр яһап ташлай инек. БДУ-ның татар теле һәм әҙәбиәте факультеты эргәһендәге "Аҡсарлаҡтар" ҙа беҙҙең менән. Бөгөн Татарстанда киң билдәле шәхестәр: дәүләт эшмәкәрҙәре, шағирә, журналист булып танылған Люциә Шәрәфиева, Таңсулпан, Жәмилә Әхтәмоваларҙың ятаҡ бүлмәләрендә туҡтайбыҙ. Әхирәттәребеҙ менән ҡала урамдарын ҡыҙырып, Ҡаҙандағы һәйкәлдәрҙе, музейҙарҙы ҡарайбыҙ, кисәләр ойоштораbыҙ. Ҡаҙан дәүләт университетында, Арча педагогия училищеһында сығыш яһайбыҙ. Ҡырлайҙағы ҙур шиғыр байрамында ҡатнаштыҡ. Унан үҙҙәрен Өфөлә ҡабул иттек, урман күргебеҙ килә тигәс, Белорет районына әҙәби сәфәр ойоштороҡ.

Быназ ошо һанап үтелгән ҡәләмдәштәр менән инде нисә йылдар дауамында ла һаман да һағынышып осрашабыҙ. Бер-беребеҙҙең ижадын күҙәтеп барабыҙ.

Бигерәк иртә баҡыйлыҡҡа күскән ағайҙарыбыҙ юҡһындыра...

**Ошондай зарлы, һағышлы күңелле шағирә итеп кем үҫтерҙе һеҙҙе? Ата-әсәйегеҙ кемдәр булды?**

- Әсәйем (беҙ инәйем тибеҙ) бер йәшендә генә етем ҡалып, өләсәһе ҡулында үҫкән. Олатайым Ғәлим Вәлиев йәш саҡтан кәүҙәгә бик таҙа, төҫкә матур булғас, ҡатын-ҡыҙҙың күҙ осонда ғына булғандыр инде, һүҙ йөрөтөп, ҡәртнәйем менән араларын бутап ҡуйғандар. Ир кеше балаһын алып ҡалған, бирмәгән. Әсәйемде Гәйнисафа ҡәртнәйем күрше ауылдан һигеҙ саҡырым араны йүгереп үтеп, төндә генә килеп, имеҙеп китер булған. Ә Иҫке Хәлилдән Яңы Хәлилгә ҡайтып еткәнсе тағы һигеҙ саҡрым юл үтергә кәрәк. Унан йәштәр һәр берейе үҙ тормошон ҡорған, әсәйем һигеҙ йәшенә тиклем Маһикамал ҡәртнәйем ҡулында тәрбиәләнгән. Аҙаҡ атаһы, олатайым, уны яңы ғаиләһенә күсереп алған. Олатайым Ишембай район комитетында агитация бүлеге мөдире вазифаһын үтәгән, һуғышҡа тиклем Стәрлебаш районын етәкләгән, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 275-се кавалерия полкы партбюро секретаре булған. Уның тураһында полк комиссары Сәғит Әлибаевтың "Утлы йылдар" китабында күп тапҡыр телгә алына. Һуғыштан һуң Өфөлә Нефтселәрҙең профсоюз өлкә комитетында эшләй.

Һуғыш йылдарында институт тамамлаған әсәйемде ауылға ҡәртнәһен ҡарарға ҡайтарып ебәрәләр. Шунда үгәй әсәй, Рауза ҡәртнәйем ҡулында буй еткергән ун һигеҙ йәшлек әсәйем ҡәртнәһе менән күрше ауылға йәйәүләп барып, тәү тапҡыр үҙ әсәһе менән осраша. Әйткәндәй, әсәйемә ике яҡ туғандары ла ныҡ яҡын күрҙе. Ғәлим ҡарттайымдың балалары ла, Гәйнисафа ҡәртнәйемдең балалары ла үҙ итте, тығыҙ аралашып йәшәне.

Әсәйемдең фиҙаҡәрлегенә, рухи көсөнә әле булһа аптырайым. Ул 38 йыл ғүмерен уҡытыусылыҡ эшенә арнаны. Ситтән тороп икенсе юғары белем алған әсәйем бик ентекле итеп ауыл тарихын өйрәнә, уға, әлбиттә, ҡарттайым да, ауылдашыбыҙ абруйлы фән эшмәкәре Таһир Баишев та ярҙам итә. Быуаттар төпкөлөндә Ислам динен таратырға килгән миссионерҙарға барып тоташҡан һәм 21-се быуынды тәшкил иткән шәжәрәбеҙҙән алып ауылдың бөгөнгөһөнә тиклемге ваҡиғалар сылбырын бәйнә-бәйнә теркәп, оло бер тарих яҙып ҡалдырҙы әсәйем. Ер-һыу атамалары тарихын да иғтибарҙан ситтә ҡалдырманы. Һөнәре буйынса тарихсы ла, географ та булғас, барыһын фәнни нигеҙҙә, тәплә, тоғро итеп билдәләп, теркәп ҡуйған. Йыл һайын ошо хеҙмәтен байытып, тулыландырып, ҡул машинкаһында ҡат-ҡат баҫтырып торған ул.

Атайым да уҡытыусы булды минең, башланғыс синыфтарҙы уҡытты, физкультура, хеҙмәт, башланғыс хәрби әҙерлек (НВП) дәрестәрен уҡытты,интернатта тәрбиәсе булды. Ауылда бит уҡытыусы - ул ойоштороусы ла, политинформатор ҙа, артист та, депутат та. Шул тиклем яуаплы ине бит элек ауылдағы һөнәрле кешеләр, уларға барыһы ла күҙ терәп тора ине.

Быназ ошо матур зыялы ғаиләлә бишенсе бала булып донъяға килгәнмен. Мин тыуғанда атайыма 57, әсәйемә 44 булған. Апай-ағайҙарым был көтөлмәгән ваҡиғаны төрләсә ҡабул иткән. Улар бит минән күпкә оло. Рәфисә апайыма - 22, Мәҙинә апайыма - 20, Зөфәр ағайыма - 16, Илдар ағайыма 13 йәш булған. Мәҙинә апайым телефондан һөйләшеү пунктынан шылтыратып, Мәскәүҙә институтта уҡып йөрөгән Рәфисә апайымдан һөйөнсө ала: "Беҙҙең ҡыҙ туғаныбыҙ бар. Зөлфиә тип исем ҡуштыҡ", - ти икән. Үҙе кәйеүгә сыҡырға йөрөгән апайым: "Ниңә генә Зөлфиә тип ҡуштығыҙ инде? Ул исемде ҡыҙым булһа, мин ҡушырмын тигәйнем", - тип илай икән. Һуңыраҡ үҙе ике малайға әсәй булғас: "Әлдә шул исемде һинә ҡушҡандар, туғаным!" - тип ҡыуана торған булды. Ә үҫмер ағайҙарым әсәйебеҙҙең хәтһеҙ йыуанайып китеүенән гәрләнеп йөрөгәндәр икән, бала тыуғас та, оялып бер булғандар. "Беҙ ул балаға яҡын да бармайбыҙ", тип турһайғандар. Ә шулай ҙа бала табыу йортонан алып ҡайтҡас, сәңгелдәктә бер "сыр" итеүем булған, икеһе ике яҡтан йүгереп килеп еткән. Мин уларҙың мине нисек ҡарағанын үҙем дә иҫләйем, елкәләрендә генә йөрөтөп, ауыҙыма төмле-татлы һоғондороп ҡына, өрөлтә-өрөлтә кейендереп, сәсемде үреп, берсә велосипедҡа, берсә мотоциклға атландырып, үҙҙәре менән балыҡҡа алып барып, һөйөп-иркәләтеп үҫтерҙеләр. Ныҡ иркә булдым шуға. Һунынан инде мин уларҙың балалары менән уйнаным. Минән саҡ ҡына кесерәк булған туғандарымды йәй һайын һағынып көтөп алыр булдым. Быназ әле апай-ағайҙарымды исемләп барлап ултырҙым да ҡуҙҙәремә йәш төйөлдө. Гәзиз кешеләремде бер-бер артлы ерләнем. Иң өлкәнем Рәфисә апайым менән икәү генә тороп ҡалдыҡ...

**Беренсе яҙған шиғырығыҙҙы хәтерләйһегеҙме? Ҡасандан һиҙҙегеҙ үҙегеҙҙә ошо илһамды?**

- Һаман да хәтеремдә биш йәштә сығарған ошо шиғырым:

*Тәҙрә төбөндә гөләм,*
*Бигерәк матурһың үҙең.*
*Күбәләк килеп ҡунһа,*
*Шатланаһың бик үҙең,* - тигән дүрт юллыҡ ине. Ә икенсе класта ижад иткән "шедевр" ошолайыраҡ яңғырай: "Беҙҙең Зилә бигерәк уңған, Үҙе үҫтерҙе һуған..." Быназ шулай... Хәҙер миңә көлкө булһа ла, ул саҡта яҙғанымды атайыма уҡытҡайным, ул мине маҡтап ебәргән булды. Тап уға күрһәтергә икәнде лә төшөнгәнмен, сөнки уның блокнотына шиғырҙар күсереп яҙғанын күрә, был ижадҡа һөйөүгә барлығын аңғара инем. Ғаиләбеҙҙә тағы ла Мәҙинә апайым ижад итергә яратты.

Шөкөр, әсәйем дә, атайым да мине шағирә итеп белеп өлгөрҙө. Бөгөнгөләй күҙ алдымда, атайым менән күтәрмәлә баҫып торабыҙ, ул миңә: "Ҡыҙым, һин яҙыуыңды ташлама. Һин айырым, үҙенсәлекле балам булдың, әйткәнемде онотма!" - тине. Атайым көслө хәҙрәттәр тоҡомонан, ауыр аҡыллы кеше ине. Үҙе бөтә нәмәне белгән һәм хәл итә алған әсәйем дә уның һүҙенән сыға алмай, күҙенә генә ҡарап торҙо. Ысынлап хөрмәт иттерә, буйһондора, тыңлата торған ир ине...

**Һеҙҙең шиғриәттә иҫ киткес мөхәббәт лирикаһы! Уҡығанда ирекһеҙҙән "Ҡайһындай ғазап" тигән уй килә. Әйтә алаһығыҙмы, быларҙың инеше ҡайҙан?**

- Беләһеңме... Беҙҙең өйҙә ғәйбәт, насар һүҙ, кеше һөйләү тигән төшөнсәләр булманы. Оло кешеләр ҡулында тәрбиәләнгәс, нисектер, донъяға ҡарашым да башҡасараҡ ине. Мәктәптә берәй яҡшылыҡ эшләгән малайға ғашиҡ булып, "был ҡайһылай һәйбәт" тип иҫем китә ине. Икенсе көн икенсеһенә һоҡланып ҡайтам. Эргә - тирәмдәгеләр барыһы ла матур, барыһы ла һәйбәт һымаҡ. Шундай үтә хисле, ныҡ асыҡ күңелле булдым. Иремә лә оло мөхәббәт менән кейәүгә сыҡтым. Яратҡан кешем янындағы бәхетле ҡатын инем. Әммә миңә сит яҡ, икенсе ғаилә, ят характерҙағы кешеләр мөхитенә өйрәнеү бик ауырға тура килде. Университетты тамамлау менән кейәүгә сыҡтым, әммә Айбулат менән тиңдәштәр булһаҡ та, уға медицина институтында 6 йыл уҡырға кәрәк, ә унан һуң тағы бер йыл интернатура. Шулай итеп, өйләнешкәс ике йыл самаһы айырым йәшәнек. Мин бәләкәй бала менән ауылда, ҡәйнәләр янында, ул - ҡалала, студенттар араһында. Тәүҙән үк бер бөтөн булып йәшәмәгәс, аңлаша алмаған осраҡтар күп булды. Һөйләр, күңел бушатыр яҡыным юҡ, шуға ла бар хистәрем шиғыр булып урғылғандыр, һәр хәлдә, тап ошо осорҙа тәрән һыҙланыулы мөхәббәт лирикаһы барлыҡҡа килде.

Ғаилә тормошом миңә, иркә балаға, бик ҙур һынау булды. Яратылыуҙан башҡаны белмәгән булмышым ҡапыл ғына "килен" формаһына килеп инде лә, был роль үтә лә ауыр кеүек тойолдо. Урман-тау халҡы тәбиғәте менән дә ҡатыраҡ халыҡ бит инде... Ә шулай ҙа ҡәйнә тупһаһының ыңғай яҡтары күп ул: күп эшкә өйрәндем, килен мәктәбен "по полной программе" үттем. Ҡәйнәмә ҡырҡ дүрт кенә йәш, шундай матур ҡатын. Минең уға "әсәй" тип өндәшкем килде, сөнки беҙҙең ғаиләлә еҙнә-еңгәләрем әсәйемә шулай тип өндәшә ине. Тик миңә баштан уҡ: "Әсәй берәү генә була, ҡәйнә, тип, өндәшерһең", - тип ҡәртә ҡуйҙылар. Һәм

***✓ Диндә ниндәйҙер сикләүҙәр бар икән, ул шәхсән шағирәгә генә ҡағылмай, ул барлыҡ мосолмандарға ла ҡағыла. Киреһенсә, яңы темалар, тәрәнерәк фәлсәфә, быға саҡлы аңлай алмаған күп һорауҙарға яуаптар алып килде.***

## ...ҠЫРҠ СЫРАҒЫ

# ЙЫРСЫҺЫ

мин шул кәртәне бер ваҡытта ла аша үтергә ярамағанлығын аңланым... Бөгөн быларҙың барыһына ла фәлсәфәүи ҡарайым. Ҡәйнәм менән ҡәйнымды балаларымдың бик яратҡан олатаһы менән өләсәһе тип ҡабул итәм. Уларҙың һәр бер изгелеге өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен. Үҙемдең атай-әсәйем күптән гүр эйәһе булғас, уларҙың барлығына ҡыуанам, аҡыллы фекерҙәренә, кәңәштәренә таянам.

Абруйлы урындарҙа эшләгән, егәрле, ҡарағайҙай буй-һынлы, матур мөләйем йөҙлө тормош иптәшем дә һәр саҡ иғтибар үҙәгендә булды. Һөнәре буйынса ла һәр ваҡыт ҡатын-ҡыҙҙар араһында ине. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла төрлөләре бар бит. Бер табында ҡунаҡ булып, туғанлашып йәшәгәндәр араһында ла күңелде ҡыйырға баҙнат итеүселәр булыуы мөмкин. Мөхәббәт йөрөтә микән ундайҙарҙы, аҙғынлыҡмы, кем белә инде. Ундайҙарҙы бер ни ҙә туҡтата алмай: ҡараңғы төн дә, бикле ҡапҡа ла... Бына ошондай донъяуи



кисерештәр, һынауҙар ҙа минең мөхәббәт лирикаһына бер сағылыш булып өҫтәлде.

▸ **Һеҙ бөгөн яулыҡта. Баш ҡалабыҙҙағы берҙән-бер яулыҡтағы ҡатын-ҡыҙ чиновник та, бармаҡ менән генә һанарлыҡ дини шағирәләрҙең береһе лә. Яулыҡ һеҙҙең ижадҡа йоғонто яһанымы, йәки чиновник булыу сикләмәйме шағирәне?**

- Дин беҙҙең ғаиләгә ят нәмә булманы. Атайым ҡөҙрәтле көскә эйә булған хәҙрәттәр тоҡомонан ине, тигәйнем бит, әсәйем дә олоғайған көнөндә дингә килде. Үлер алдынан фалиж һуғып, өс йыл түшәктә ятты. Апайҙарым менән алмаш-тилмәш ҡараныҡ. Өсөнсө балам Әминәне табып алғас, әсәйем миндә генә булды. Ҡулда бәләкәй бала, әсәйем дә - сабый халәтендә. Көнөм менән төнөм буталды. Төндә берсә сабыйымды имеҙәм, берсә әсәйем уята: "Ҡыҙым, доғаларыңды уҡы әле, зинһар!" - ти. Баш осона ултырып, белгән доғаларымды уҡыйым. Әлхәмдүлилләһ, һуңғы юлға ла "Йа син" сүрәһе менән оҙаттыҡ. Әсәкәйем түшәмгә ҡарап, күҙҙәре менән кемдәрҙелер барлап, йылмайып йән бирҙе. Уға 80 йәш ине. Атайыма ла Аллаһу Тәғәлә хәйерле үлем насип итте. 83 йәшендә изге рамаҙан айының йома иртәһендә әхирәткә күсте.

Артабанғы тормошта үҙемдең иң ауыр саҡтарымда, кемдән яҡлау эҙләргә белмәгәндә, шул Юғары көскә һыйындым. Башта доғалар уҡыным, ураҙа тоттом, яйлап намаҙлыҡҡа баҫтым. Яулыҡ өсөн иһә бик оҙаҡ әҙерлек эштәре алып барҙым. Башта өйҙәгеләрҙе өйрәтергә тура килде. Яулыҡ ябынып сыҡҡан өсөн танау алдында машина ишеген шарт ябып, мине ултыртмай, киноға сығып киткән саҡтары ла булды ғәзиздәремдең. Шул тиклем ҡарайһым килгән фильм ине! Уныһынан бигерәк яҡындарымдың мөнәсәбәте... Түҙҙем. Унан эшкә килгәндә, ҡайтҡанда яулыҡта булдым, яйлап кабинетта ла йоҡа яулыҡты һалмай башланым. Был тәңгәлдә ҡаты бәрелеүҙәр ҙә, етди һөйләшеүҙәр ҙә булманы түгел. Мин уларҙы үттем һәм бөгөн, әгәр яулыҡ өсөн мине эштән ебәрергә теләйҙәр икән - һис үкенесһеҙ китәсәкмен. Быны үҙем өсөн хәл иткәнмен инде.

Дин минең ижадыма бер ниндәй сик тә ҡуйманы. Ә инде диндә ниндәйҙер сикләүҙәр бар икән, ул шәхсән шағирәгә генә ҡағылмай, ул барлыҡ мосолмандарға ла ҡағыла. Киреһенсә, яңы темалар, тәрәнерәк фәлсәфә, быға саҡлы аңлай алмаған күп һорауҙарға яуаптар алып килде. Аллаһу Тәғәләгә мең шөкөр, сабырлыҡ, рух ныҡлығы өҫтәлде.

Ә инде чиновник булыу, киреһенсә, миңә шәхес булараҡ үҫешергә форсат бирһә лә, шағирә булараҡ аяғыма тышау һала. Ваҡыт етмәй. Күңелдә бөрөләнеп килгән шиғырҙар ҙа сабып йөрөгәндә онотолоп, хәтерҙән сығып осалар. Артыҡ ҡоро, фактик, бөткөһөҙ мәғлүмәти йәшәйеш ижад ҡойомдо һайыта кеүек. Йәнә... Уҡыусыларым менән осрашыуҙарға һыуһайым, ә сығып йөрөү мөмкинлектәре сикләнгән. Киләсәктә, тынысыраҡ мөхиткә күскәс, ошо үткән йылдарым өсөн дә яҙмаҡсымын әле, Аллаһ бирһә.

▸ **"Йөрәк һүҙе" проекты һеҙҙе халыҡҡа асты, һеҙ иһә уны астығыҙ кеүек булды. Әгәр шунда һеҙ ҡатнашмаһағыҙ һәм "Мөздәлифә", "Күрешергә һүҙ усыңды...", "Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға?" тигән шиғырҙарығыҙҙы уҡымаһағыҙ, был программаның "йөҙөмө" лә булмаҫ ине кеүек. Һәм шул уҡ ваҡытта был бәйге һеҙҙе шиғри һүҙ әйтә белеүсе, уны ижад итә белеүсе талант эйәһе итеп данлатты ла. Килешәһегеҙме?**

- Мин үҙемде улай ситтән ҡарап әйтә алмайым, шиғриәт бәйгеһендә, ғөмүмән, бик көслө шәхестәр ҡатнашты, әммә бер фекер менән килешәм. "Йөрәк һүҙе" шиғырға, шағирҙарға халыҡ һөйөүен ҡайтара торған бер иҫ киткес проект булды. Уны уйлап тапҡан һәм ойоштороусыларға Аллаһтың рәхмәте яуһын! Элек шағирҙарҙы ауылдарҙа күтәп ала, йотлоғоп тыңлай инеләр. Һуңғы йылдарҙа был йола онотолоп, шағирҙарға һәм шиғриәткә битарафлыҡ булып киткәйне. Шул уҡ ваҡытта шиғри формалағы яһалмалыҡтар ҙа күбәйҙе. Шиғырҙың бәҫе, киммәле төшөп, уның кеше аңына алып барып еткерә торған идея-тематик көсө кәмеп киткәйне. Ошо проект уны үҙ урынына ҡуйҙы Был мәртәбәле проекттың артабан да тап шағирҙар һәм ысын шиғриәт мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүен теләр инем.

▸ **Һеҙ үҙегеҙҙе ҡыйыумын тип һанамайһығыҙ. Ә үҙегеҙ күҙ ҙә йоммайынса "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ", "Ҡарағайҙар", "Түрәкәйҙәр", "Өфө етә барыһына ла", "Яҙмышыбыҙ беҙҙең бер икән", "Башҡортлоҡ" кеүек рух күтәрелеүҙән, йән әсеүҙән сәсәп китерлек шиғырҙар яҙаһығыҙ. Минеңсә, быңдай әҫәрҙәр ҡурҡаҡ йөрәктән сыға алмай!**

- Алда әйткәнемсә, шиғырҙарым бик һыҡраған һәм хистән быуылған мәлдә тыуа. Һәм улар башҡаса булып тыуа ла алмай. Ундай илһам солғанышында булғанда кемдәндер ҡурҡыу йәки шикләнеү, ярайлы-ярамаймы, нимә әйтерҙәр, тип уйлап ултырыу булмай. Был бит һинең күк менән тоташҡан, үҙең үҙеңдеке булмаған сағың була. Аҙаҡтан ғына: "Һин эш урыныңдамы ул?"- тип хафаланып дуҫтар шылтырата, туғандар борсола...

Миндә, моғайын, илһамлы саҡта асылып өҫкә бәрә торған боронғо башҡорт ҡатын-ҡыҙы рухы йәшәй. Илемә, халҡыма булған сикһеҙ һөйөү йәшәй. Милләтемде, шул милләттең дауамы булған затымды, балаларымды ҡурсырға теләү теләге йәшәй. Шул ғына. Минең башҡа был тормошҡа бер талабым да юҡ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

### Өнһөҙлөк

Таш йорттарҙы, гүйә, йәнле итә
Үҙебеҙҙең милли орнамент,
Ошо матурлыҡҡа хайран ҡалып
Күҙҙе алмай, торам арбалып.
Боронғолоҡ күсә йәндәремә,
Хәтерләтмәй ҡалам сит илде,
Ата-бабам Урал тауҙарына
Ырып яҙған тарих шикелле
Бик күп әйбер һөйләй миңә таштар.
Кәмһетелгән. Еңгән. Онталған...
Әммә бирешмәгән! Ана, нисек
Мең төҫтәрҙә балҡый баш ҡалам!
Түбәтәйле ҡарттар сифатында
Сәләм биргән кеүек таш йорттар.
Их, йәшәһен ине шул йорттарҙа
Милли кейем кейгән башҡорттар!
Һөйләшһендәр ине туған телдә
Аҫыл балалары халҡымдың!
Их, ҡысҡырғым килде ошо хаҡта!
Их, ҡысҡырғым килде... Тартындым.
Әллә ҡурҡтым микән?
Уйланыммы
Үҙем тураһында иң элек:
Индәремдә - елән, ә телемдә -
Таш йорттарҙан күскән
Өнһөҙлөк...

* * *

Телһеҙ, моңһоҙ мин кем инде?
Йортһоҙ-илһеҙ - мин ҡайҙа?
Ауыҙлыҡһыҙ уйҙар кеүек
Аттар саба туғайҙа...

Аттар саба. Азатлыҡтың
Белә улар хаҡтарын.
Төңгөлөккә тышамағыҙ,
Зинһар, башҡорт аттарын.

Тышамағыҙ. Ер күп бит ул
Рәсәй тигән киңлектә.
Исмаһам, бер таңға саҡлы
Аттар сапһын иректә!
Аттар сапһын иректә...

### Доға ҡылам

*"Иле юҡтың ғына теле юҡ!"*
*Рәми Ғарипов*

Аңлар өсөн аҡыл етмәй
Кемдәр нимә ҡылғандар?!
Халҡымды бит аяп тормай
Дин өсөн дә ҡырғандар,
Ер өсөн дә,
Ил өсөн дә,
Тел өсөн дә ҡырғандар.

Ошо ғәзиз дүрт төшөнсә
Ҡибла кеүек дүрт яҡтан,
Уны ҡабат үртәр өсөн
Кемдәр бөгөн ут яҡҡан?!

Ерһеҙ ҡалһаҡ - ил бөтөр,
Илһеҙ ҡалһаҡ - тел бөтөр,
Телһеҙ ҡалһаҡ - дин бөтөр,
Динһеҙ ҡалһаҡ - көн бөтөр...

Үрсем артыр - ер булһа,
Күсем артыр - ил булһа,
Көсөм булыр - дин булһа,
Был донъяла Башҡорт тигән
Исемем булыр - тел булһа!

Ер - беҙҙе йортло иткән,
Ил - беҙҙе ҡотло иткән,
Дин бит ул һаҡлы иткән,
Тел бит хоҡуҡлы иткән!

Доға ҡылам "Илем" тип,
Минең берҙән-берем, тип.
Ерем, телем, динем, тип,
Ерем,
Телем,
Динем, тип!

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

✓ ***Мәҫәлән, бер Ейәнсура районында ғына ауылдарҙа йылына биш меңләп шәл бәйләнә. Улар ҡайҙа һатыла? Башлыса, Ырымбур яғына оҙатыла, унан алыпһатар юлы менән башҡа яҡҡа таратыла.***



*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**"Кәзә ҡайт, кәзә ҡайт, ҡунаҡтарға һөт кәрәк...", "Аллаһыу, аллаһыу, кәзәләрҙе тауға ҡыу..." тигән сәңгелдәк йыры быуаттар буйы тирбәлә Уралтау буйҙарында. Ҡулдарына күҙ ҙә эйәрмәҫтән тиҙ-етеҙ итеп шәл бәйләгән уңған, тырыш, булдыҡлы әсәйҙәребеҙ баҫалҡы ғына йылмайып күҙ алдына килә... Беҙҙең шәлсе әсәйҙәр... Улар ил иңенә мамыҡ шәл ябып йылытҡан да, йыуатҡан да, уҡытҡан да быуын. Башҡорт шәленә арнап матур илһамлы йырҙар ижад ителә. Тағы ниндәй һөнәр эйәләренә һәм уларҙың ҡул-йөрәк йылыһы яғылған эштәргә ил рәхмәте йыр аша тапшырыла икән?**

# БАШҠОРТ ШӘЛЕ ТИГӘН МӨҒЖИЗӘ

## Кәзә сеймал бирә...

Башҡорт балы, башҡорт ҡымыҙы, башҡорт ҡурайы янында бөтә илгә дан ҡаҙанған башҡорт шәле лә бар. Башҡорт дебет шәле Башҡортостан халҡын ғына түгел, бөтә Урал буйын, Ырымбур өлкәһен, Үзбәкстан, Алыҫ Көнсығыш, Себер, Мәскәү, Ханты-Мансы тарафтарын да йылыта. Уның шифалы йылыһын халҡыбыҙ борондан белгән, дебет алыу-һайлау серен, бәйләү оҫталығын ҡулдан-ҡулға тапшырған. Башҡортостанға күсеп килгән халыҡтар ҙа был мөғжизәнең бөйөклөгөн аңлап, үҙ оҫталығын, үҙ йүнселлеген өҫтәгән.

Ҡыуандыҡ, Хәйбулла, Йылайыр, Һарыҡташ, Ейәнсура, Күгәрсен, Мәләүез, Стәрлебаш, Федоровка, Көйөргәҙе, Миәкә, Ғафури районына саҡлы урманлы-далалы төбәктә халыҡ һәйбәт дебетле кәзәләрҙең нәҫелен өҙмәйенсә һаҡлаған. Улар хатта "башҡорт кәзәләре тоҡомо" тип йөрөтөлә. Был тоҡомдо республикабыҙҙың төньяғына, көньяҡ-көнбайышына, көнсығыш яландарына күсереп ҡарағандар, бер-ике йылдан мамығының сифаты бөтөнләй үҙгәрә торған булған. Бөтә хикмәт - таулы-шишмәле ерҙәрҙең үләнендә һәм һыу көсөндә. "Кәзәнең кәзәһенә хәтле урын һайлай", тип әйтә алаһығыҙ, сөнки кәзәнең ашау-эсеүгә ни хәтле һайлансыҡ, талымлы булыуын уны аҫраған бөтә кеше белә. Ҡыш буйы кәзәгә яҡшы йәшел бесән, ярма, таҙа йылы һыу, витаминлы аҙыҡ биреү мотлаҡ икәнен һәр кем белә. Кәзә өҫтөнә бесән ҡойолмаһын, уны үтә ел йәки артыҡ һыуыҡ һуҡмаһын, малҡай епшек буран-рашҡыла ҡалып күшекмәһен, өҫтөндә елберҙәп кенә ҡалҡып торорға тейешле мамығы уҡмашмаһын, ул тынсыу-тар урында интекмәһен - көн уртаһын ҡояшлы саф һауала, асыҡ кәртәлә үткәрһен... Ҡышҡы селләнең ҡояшҡа боролған бер мәлендә - шаҡай-февраль айы урталарында кәзәнең дебете ҡалҡа, уның иң ҡуйы һәм иң ныҡ сағы ошо - сатлама һыуыҡ һәм салт ҡояш нуры ергә тура төртөлә башлаған мәл. Тарар алдынан бер-ике көн кәзәләрҙе ныҡ йылы урында тоталар, мамыҡ ҡылдан айырыла, тиренән ҡупшый, өҫкә ҡалҡа һәм тарап алыу еңелләшә, тиҙәр... Йыл ҡоро килһә, дебете ҡыҫҡа һәм ҡуйы, һалҡын килһә - оҙон һәм ҡалын, ямғырлы икән - һуҙылыусан һәм һирәк була. "Үҙебеҙҙең йорт кәзәһенең холҡо дебетендә лә ҡала: бармаҡҡа яғылып, уралып тора бит, кешегә йылышып-иркәләнеп бара. Шуға ла беҙҙең башҡорт шәле муйынға уралып, йылытып-хәстәрләп, иркәләп-һөйөп тора хужаһын. Теләһә ниндәй ауырыуға ла дауа, шәлеңә уран да Хоҙайҙан һаулыҡ һора, шул хәтле килешә, ысын! Тере кәзә өҫтөнән генә тарап алынған тере мамыҡты кәзә беҙгә үҙ теләге менән бирә, ҡурҡмай-өркмәй, рәхмәтле-риза булып тапшыра. Кәзәбеҙ беҙгә дебетен бүләк итә! Шуға ла беҙҙең дебет әллә нисә йыл ятһа ла боҙолмай, ойошмай, иҫкермәй. Тетеп-аялап ал да бәйлә, ябынып рәхәтлән!"-тиҙәр шәл оҫталары, егәрле башҡорт ҡыҙҙары!

## Төрҙәре бер нисә

***1. "Һуҡҡан шәл", "Һуҡма шәл, "Йыяр шәл"*** - әүәл халҡыбыҙҙа башлыса һуҡҡан шәл киң таралған, ә бәйләү аҙағыраҡ башланған, тигән фекер бар. Әбйәлилдәр һуғылған шәлде "йыяр шәл" тиҙәр. Амангилде ауылынан Ғәшүрә Әбүбәкирова һуҡҡан һоро, аҡ шәлдәр рәссам Әхмәт Лотфуллиндың картиналарындағы башҡорт ҡатындарының монументаль портретын ғына сағылдырмай, ә башҡорттар йәшәгән һәр төбәктәге тарихи хәтерҙе ҡуҙғыта. Башҡорт һуҡма шәле кәзә дебетенән генә һуғыла, бер ниндәй ҙә еп-ҡатлыҡ ҡушылмай.

***2. "Дебет шәл", "мамыҡ шәл"*** - уртаса ҡалынлыҡта иләнгән (1-1,5мм) дебеттән бәйләнгән классик йылы шәл, ул халыҡсан ысул менән - ситтәре биҙәк һалынып һәм "тел" менән семәрләп айырым бәйләнә һәм тегеп йә бәйләп урта өлөшкә ҡушыла, тигеҙ дүртмөйөш яҡтарының оҙонлоғо 70 см-ҙан бер метрға хәтле булыуы мөмкин. Шәл ситенә биҙәк һалыу элекке йола булһа, бөгөн шәл уртаһына ла биҙәкте йәлләмәйҙәр. Оҫталар дебет шәл биҙәктәренә яғымлы исемдәр ҡуша: "һалма", "кәкерсәк", "бесәй табаны", "тулҡын", "тура биҙәк", "йәйғор", "шыршы", "борсаҡ", "төймә", "тәгәрмәс эҙе", "Заһира бейеүе", "тау биҙәге", "тәрәҙә биҙәк", "өҙмәкәй".

***3. "Ауыл шәле", "оло шәл", "сана шәле", "ҡалын, ҙур шәл"*** йәки ***"урман шәле"*** - кәзә дебете йыуан итеп иләнеп (диаметры 2-3 мм), ҙур энә менән бәйләнә. Ҙурлығы 1,5х1,5м йәки 2х2м. Бындай шәл ныҡ ҡабарыуҙан үтеп, бешеләнеп, кейеҙләнеп китә, ҡышҡы һыуыҡта тун кеүек йылы була, сәкмән өҫтөнән кейелә, юрған урынына ла ҡулланыла. Ауыл шәлен Йылайыр яғында бөгөн дә бәйләйҙәр.

***4. "Селтәр шәл"*** йәки ***"үәл"*** - эре итеп йыш күҙ салып, күп биҙәк һалып, нәҙек иләнгән дебеттән һирәк итеп бәйләнгән үтә күренмәле шәл;

***5. "Өсмөйөш"*** йәки ***"косынка"*** - ҡышҡы кейем эсенән һалып йәки йорт араһында ябына торған баш ябыуы, хәҙер ул бик күп етештерелә.

Кәзә дебетенән ҡатын-ҡыҙҙар шәл менән үәлдән тыш башҡа бөтә нәмәне лә - кейәү бирсәткәләренән башлап йылы балаҫ-юрғандарға хәтле бәйләй. Дебеттән бәйләнгән еңһеҙ өҫ кейеме көртөй тип йөрөтөлә, дебет сәкмәндәр иркен итеп бәйләнә. Кәзә дебетенән бәйләнгән заманса кейем-ҡаралты төрҙәре лә киң таралған башҡорттарҙа.

Башҡорт дебет шәленең дәрәжәһе һис тә кәмемәй. Киреһенсә, шәл бәйләүселәр күбәйә, оҫталыҡ арта. Бөгөнгө ғаилә бюджетына ярҙам итә дебет шәл. Балалар уҡытыу, дауаланыу, йорт һалыу, машина алыуҙа дебет шәл Башҡортостан халҡының ышаныслы таянысы булып ҡала. Башҡорт шәленең мөғжизәһе һаман илгә, күңелгә, сәләмәтлеккә хеҙмәт итә.

## Ырымбур яулығынан айырмаһы...

Күренекле рус этнографы Сергей Руденко 19-сы быуатта былай тип яҙа: "...Ырымбур губернаһында башҡорт ауылдарында өй һайын туҡыу станогы тора һәм кәзә дебетенән һуғылған буй баластар күп осрай, шулай уҡ башҡорт ҡатындары кәзә дебетенән иҫ киткес йылы шәлдәр һуға, уларҙы баҙарҙа һатып ғаиләһе өсөн аҙыҡ-түлек таба". Совет власы осоронда "Оренбургский пуховый платок" - "Ырымбур мамыҡ яулығы" тип аталып киткән ҡупшы мамыҡ яулыҡты етештереүсе фабрика тап башҡорт шәленең матурлығын, файҙалы һәм зауыҡлы эш булыуын иҫәпкә алып асыла. Рәсәйҙә кәзә мамығын эшкәртеп, ҡулланыуға бәйле ике абруйлы бренд бар. Икеһе лә гүзәл хеҙмәт емеше. Беренсе бренд - борон-борондан Көньяҡ Башҡортостан хужалыҡ һәм тәбиғәт шарттарына ярашлы барлыҡҡа килгән уникаль кәсептең өҙөлмәй-юғалмай дауам ителгән күренеше - халыҡ оҫталары бәйләгән "Башҡорт шәле". Икенсе бренд - "Оренбургский пуховый платок", фабрикала бәйләнгән биҙәкле "Ырымбур мамыҡ яулығы". Шәл менән яулыҡтың айырмаһы билдәле.

Ағиҙел, Оло Эйек, Һаҡмар, Һүрәм, Ашҡаҙар, Юшатыр йылғалары буйында йәшәгән оҫталар етештергән йылы дебет шәлдәр Ырымбур, Ташкент, Өфө, Стәрлетамаҡ баҙарҙарында һатылды. Йылғыр алыпһатарҙарҙың Башҡортостан ауылдары буйлап өй беренсә ябырылып йөрөп, Ырымбур һәм Урта Азия, Себер баҙарҙарында һатыу өсөн шәл йыйыуы әлеге көндә лә дауам итә. Мәҫәлән, бер Ейәнсура районында ғына ауылдарҙа йылына биш меңләп шәл бәйләнә. Улар ҡайҙа һатыла? Башлыса, Ырымбур яғына оҙатыла, унан алыпһатар юлы менән башҡа яҡҡа таратыла. Боронғо "Ебәк юлы" кеүек, "Дебет шәл юлы" ла киң тармаҡлы һәм өҙлөкһөҙ яңырып тора.

## Шәл клубтары

Башҡортостанда бөгөн өс халыҡ шәл-клубы эшләй. Хәйбулла районы Бәләкәй Арыҫланғол ауылында "Вәзәм һуҡма шәлдәре", икенсеһе Стәрлебаш районы үҙәгендә "Стәрлебаш биҙәктәре", өсөнсөһө Йылайыр районы Юлдыбай ауылындағы шәлклубы. Улар Башҡортостан Халыҡ ижады үҙәге һәм "Урал" га-








✔ **Кавказ төбәктәрендә спорт яҡшы үҫешкән. Унда спорт залына йөрөгән өсөн, кереһенсә, һәр кешегә аҡса түләнә. Тренерҙарҙың эш шарттары, эш хаҡы һәм социаль тәьминәт бик юғары кимәлдә.**



лереяһы юллауы менән барлыҡҡа килде. Дүртенсе "Ейәнсура шәле" шәл-клубының асылыуы көтөлә.

Иҫәнғол ауылында йәшәгән Зөлфиә Бикбулатова республика "Башҡорт шәле" фестивалдәрендә дүрт мәртәбә (!) гран-при бүләген яулаған легендар шәлсе. Унының ижадын өйрәнергә, хупларға, рәхмәт әйтергә генә ҡала. Ошо урында бер һорау тыуа: республика фестивалендә гран-при бүләген яуларлыҡ шәл бәйләү оҫталарын, халыҡ кәсепһөнәре сәнғәтен үҫтереүсе булараҡ, Башҡортостан Хөкүмәте кимәлендә хуплар-дәртләндерер баһалар ҙа булырға тейештер бит? Унан һуң, Хәйбулла, Йылайыр, Ейәнсура һәм башҡа районлар боронҙан килгән шәл бәйләү, балаҫ һуғыу бер ҡасан да эш булыуҙан туҡтамаған. Үҙ йортонда, үҙ йәйина эш урындары булдырыусы, шуның менән ғаиләһен туйындырыусылар бит улар, шәлсе ҡатын-ҡыҙҙар. Ләкин... "Башҡорт шәле" тигән мөғжизә халыҡ кәсептәре күргәҙмәһе буйлап йөрөгәндә генә республика етәкселәренең иҫенә төшә, йәки зауыҡлы бүләк кәрәкһә, шәлселәрҙең иң ҡупшы эштәрен таптыралар... Ҡыҫҡаһы, йәҙ илле йыл әүәл Сергей Руденко бөтә донъяға һөйөнсөләгән башҡорт милли кәсебе беҙҙең етәкселәрҙең күҙенә лә эленмәй...

### Киләсәге нисек булыр?

2019 йылдың 5-7 декабрендә Өфөләге Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә 6-сы Бөтә Рәсәй халыҡ һөнәрмәндәре форумы үтте. Унда егермеләп павильонда башҡорт шәлдәре күргәҙмәгә ҡуйылды. Бөтә Башҡортостандан иң-иң оҫталары халыҡҡа үҙ шәлдәрен күрһәтте, һатты, бүләкләнде. Әлбиттә, уларҙың бөтәһе лә ҙур маҡтауға лайыҡ. Халыҡ һөнәрмәндәре эшмәкәрлеген Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы ғына түгел, Сәнәғәт министрлығына ла үҙ ҡарамағына алырға күптән ваҡыт. Башҡорт шәлдәре иң юғары халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә лә беҙҙең милли оҫталыҡтың сағыу күрһәткесе булырлыҡ, тигән фекерҙе Хөкүмәтебеҙ кимәлендә лә ишетергә тейештәр, тигән һүҙҙәр ҡат-ҡат яңғыраны был күргәҙмә сиктәрендә үткән түңәрәк ҡорҙарҙа, конференцияларҙа. Уларҙа башҡорт шәленең киләсәге хаҡында тағы шундай тәҡдимдәр әйтелде: Башҡортостанда мамыҡ кәзәләрен үрсетеү дәүләт ярҙамына алынһын; шәл бәйләү - республикала махсус сәнәғәт тармағы булырға тейеш; шәл һатыу магазиндарын асылһын; башҡорт шәле тураһында фәнни хеҙмәттәр, махсус каталогтар сығарылһын; шәл оҫталарының даими күргәҙмәләре ойошторолһон; башҡорт шәле Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары исемлегенә теркәлһен; башҡорт шәле - Башҡортостан ҡото, бренды тип рәсми иғлан ителһен. Киләһе Фольклориада йылында был алтын һүҙҙәр һыуға һалынмаҫ, изге уй-ниәттәр онотолмаҫ, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Сәрүәр СУРИНА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘ ТАНЫЛЫРҒА...

## ҡеүәтебеҙ бар, шарттар кәрәк



**Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тигән әйтемде йыш ҡына телмәребеҙҙә ҡулланабыҙ. Һәм был һүҙҙәрҙең һәр ваҡыт өҫкә сығыуына, ысынлап та тән сәләмәтлеген ҡайғыртҡан кешенең йән-күңел торошо ла һау булыуына инанып торабыҙ. Ошо бөтәбеҙгә лә таныш, әммә күптәребеҙ һаңға һуҡмаған хәҡиҡәткә күптән түгел Италияға барып, панкратион буйынса Донъя чемпионатында алтын миҙал яулап ҡайтҡан яҡташыбыҙ - Белорет ҡалаһынан Эвилина Хаджиева һәм уның тренеры, "Яугир" ҡатнаш һәм һуғыш алышы спорт үҙәге" төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Абдулҡадир Нурғәлин менән әңгәмәләшкәндә лә инандыҡ.**

➔ **Тәү сиратта һеҙҙе был юғары уңышҡа килтергән юл тураһында һөйләп китһәгеҙ ине.**

**Э. Хаджиева:** Мин Белорет районы Үҙән ауылы ҡыҙы, хәҙерге ваҡытта Белорет ҡалаһындағы Металлургия колледжында 3 курста уҡыйым. Бер ваҡыт дәрестәрҙән ҡайтып барышлай "Яугир" ҡатнаш алыштар клубының иғланын күреп ҡалдым. Быға тиклем Сермән мәктәбендә уҡығанда 3-4 ай тирәһе тай бокс менән шөғөлләндем, ә бына Белорет ҡалаһында ундай спорт түңәрәктәре барлығын белмәй ҙә инем. "Яугир"ға килеп, панкратион йүнәлешенә яҙылдым. Дөрөҫөн әйткәндә, унда самбо, башҡа ҡатнаш алыш төрҙәре буйынса күнекмәләр барлығын белмәнем дә, һайлап та торманым. Хәҙер ике йыл дауамында панкратион буйынса төрлө кимәлдәге ярыштарҙа бик күп тапҡырҙар көсөмдө һынап ҡарағас, дөрөҫ юлдан барыуыма һәм күңелемә яҡын спорт төрөн табыуыма ҡыуанам. Әйткәндәй, донъя кимәлендәге ярышҡа үтеү өсөн генә лә тәүҙә Башҡортостан, төбәк-ара төрлө ярыштарҙа беренсе урындар алырға, шунан Волга буйы федераль округы буйынса, һуңынан Башҡортостан йыйылма командаһы составында Рәсәй кимәлендәгеһендә ҡатнашып, енеүҙәр яулау талап ителде. Рәсәй йыйылма командаһы составында сығыш яһап, беренсе урын алыу бәхете шулай тәтене.

**А. Нурғәлин:** "Яугир" ҡатнаш һәм һуғыш алышы спорт үҙәге" төбәк йәмәғәт ойошмаһы тип ноябрь айынан ғына атала башланыҡ. Быға тиклем беҙҙең юридик статусыбыҙ "ҡатнаш алыштар клубы" тип кенә билдәләнә ине. Әммә әлегә юридик яҡтан ғына "үҫтек", физик яҡтан бер нәмә лә үҙгәрмәне. Спорт үҙәгендә шөғөлләнеү урыны бик тар ғына, артыҡ уңайлы шарттар ҙа юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, эшебеҙҙе дауам итәбеҙ һәм тырышлығыбыҙҙың һөҙөмтәләрен күреп ҡыуанып торабыҙ. Бигерәк тә быйылғы йыл беҙҙең өсөн бик уңышлы булды, Рәсәй кимәлендә Эвилина Хаджиева 18 йәшлектәр араһында 1 алтын һәм 1 бронза яуланы, Мәхмәтсәит Шәрипов 16 йәшлектәр араһында 3 алтын миҙал яуланы һәм бының менән үҙҙәренә донъя чемпионатына юл астылар.

Панкратиондан тыш, беҙгә тура килгән төр алыштар, мәҫәлән, ҡатнаш алыш сәнғәте (ММА), әрме ҡул һуғышы, һуғыш самбоһы, күп стилле каратэ, кикбоксинг, һуғыш джиуджитсу, грэпплинг буйынса ла ярыштарҙа ҡатнашабыҙ һәм уңыштарыбыҙ бар. Әле беҙҙә 4 йәштән алып төрлө йәштәрҙәге 50-гә яҡын кеше шөғөлләнә, ҡыҙҙар һәм малайҙар төркөмдәре айырым һәм күнекмәләр көн дә үтә.

➔ **Италия һәм Донъя чемпионаты ҡалдырған тәьҫораттар ниндәй?**

**Э. Хаджиева:** Италия, әлбиттә, бик матур ил, бай тарихлы. Әммә мине сит илдәр артыҡ ылыҡтырмай, унда барып төшөү менән кире өйгә ҡайтҡым килеп тик торҙо. Донъя чемпионатында 22-гә яҡын илдәрҙән, улар араһында Рәсәй, Украина, Беларусь, Италия, Ҡаҙағстан, АҠШ-тан 700-гә яҡын кеше ҡатнашты һәм ярыш 3 көн дауам итте. Мин 18-19 йәшлектәр араһында 65 кг ауырлыҡ категорияһында сығыш яһаным һәм Рәсәй, Беларусь һәм Италия көрәшселәрен еңеп, беренселекте алдым. Ярышташтар көсһөҙ булды тип әйтә алмайым, барыһының да кимәле юғары, яҡшы әҙерлек үткән ҡыҙҙар.

Мин ярыш алдынан бер аҙ тулҡынландым, үҙемде БДИ тапшырырға йыйынған кеүек хис иттем. Әммә келәмгә аяҡ баҫыу менән баштағы бөтә уйҙарҙы ситкә ташлап, иғтибарҙы алышҡа ғына йүнәлтергә тырыштым. Алдыма ҡуйған аныҡ маҡсаттарым, хыялдарымды тормошҡа ашырырға ынтылышым һәм һәр ваҡытта күтәрмәләп торған яҡындарым ярҙам итте. Ғөмүмән, ниндәй кимәлдә булһа ла ярышта ҡатнашыу, ниндәйҙер берәй уңышҡа өлгәшеү - үҙе үк күңелдәрҙе елкендереп, дәртләндереп ебәрә. Ярыштан урын алып ҡайтыу инде артабан үҫешергә, камиллашырға ҙур этәргес.

➔ **Спорт менән шөғөлләнеүҙең кешенең холоҡ-фиғеленә, тәртибенә лә йоғонто яһауы шикһеҙ. Һеҙҙең был тәңгәлдә тәжрибәгеҙ ниндәй?**

**Э. Хаджиева:** Үҙ миҫалымдан алып та спорт тынысландыра, сабырыраҡ булырға һәм дисциплинаға өйрәтә, тип әйтә алам. Ташып торған дәрт-дарман күнекмәләргә йүнәлтелә, аныҡ маҡсатың бар һәм ярамағандан тыйылырға кәрәкте аңлайһың. Ғөмүмән, ваҡыт ҡәҙерен белергә һәм бирелгән мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, киләсәгең һәм тормошоң үҙ ҡулыңда булыуына ла спорт төшөндөрә.

**А. Нурғәлин:** Белорет ҡалаһында спорт клубы асыуымдың да төп сәбәбе - балалар урамда аҙыраҡ йөрөһөн, насарға өйрәнмәһендәр, интернет ҡоло булмаһындар, айырыуса малайҙарға ир-егет тәрбиәһе бирелһен тигән теләгемде тормошҡа ашырыу ине. Беренән лә сер түгел, ҡайһы бер балаларҙың насар йоғонтоға бирелеүе лә, тейешенсә тәрбиә алмауы ла үҙебеҙҙең күҙ алдында. Шуға, бөтәһе лә чемпион булмаһа ла, сығыш һәм үҙҙәрен һаҡларға өйрәнһендәр, рухи яҡтан көслө булып, милләтен, тарихын, динен һәм үҙ асылдарын белеп үҫһендәр, тигән ниәттә эшләйбеҙ. Беҙҙә ябай физик күнекмәләр генә алып барылмай, бөтә яҡтан да белемебеҙ менән бүлешеп торабыҙ, уҡыуҙарын да тикшереп, урамда һәм кеше араһында үҙҙәрен нисек тотоуҙарына ла иғтибар итеп торабыҙ. Бер яҡтан, атай-әсәйҙәре ҡыуана, тренерҙарының иғтибарын тойған бала үҙе лә күп яҙыҡ эштәрҙән тыйыла, эсеү-тартыу тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Шуға ла ярыштарға йөрөгәндә беҙҙекеләр айырылып тора, "Яугир" тигән исемгә тап төшөрмәҫкә, элекке кеүек яҡшы дандары алдынан йөрөгән башҡорт яугирҙары кеүек булырға ынтылып торалар. Әммә бына был урында башҡорт балаларының спортта бик әүҙем булмауҙарын да телгә алып китергә кәрәк. Был тәү сиратта тәрбиәнән килә, икенсенән, йәшәү шарттарына бәйле. Ауыл, бәләкәй ҡала ерҙәрендә балалар һәм үҫмерҙәр өсөн спорт менән шөғөлләнеү бушлай булырға тейеш. Юғиһә, бик һирәктәр өсөн генә мөмкин булған ҡиммәтле хеҙмәт күрһәтеү төрөнә әйләнде лә ҡуйҙы спорт түңәрәктәре, секциялары. Төбәктәрҙә эш хаҡының кимәле түбән, ә баланы спорт секцияһына йөрөтөү өсөн генә түгел, махсус кейем-һалымға ла, башҡа кәрәк-яраҡтарына ла аҡса кәрәк.

➔ **Әйткәндәй, шарттар тураһында. Бөтә нәмә сағыштырыуҙа беленә, ти. Уңайлыҡтар һәм мөмкинлектәр йәһәтенән кимәлебеҙ ниндәй?**

**Э. Хаджиева:** Беҙҙә спартандарса шарттар. Бөтә кәрәкле ҡорамалдар, кейем-һалымдарыбыҙ юҡ, күнекмәләр үткән бүлмә лә Өфөләге кеүек шәп йыһазландырылмаған. Беҙгә уңышҡа өлгәшергә көслө теләгебеҙ, ихтыяр көсө һәм рух ныҡлығы, бәлки, шундай ҡаты шарттарҙа сынығыу үтеү ҙә ярҙам итәлер.

**А. Нурғәлин:** Эйе, шарттар йәһәтенән Башҡортостандың Өфө, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Октябрьский ҡалалары менән сағыштырғанда ла күпкә ҡайтышбыҙ, тиергә кәрәк. Баш ҡаланан алыҫыраҡ ятҡан төбәктәргә иғтибар етеңкерәмәүе менән аңлатырға ла булыр был. Балаларҙан йыйған айлыҡ түләүҙәр кәрәкле инвентарҙар алыуға, ярыштарға йөрөүгә сарыф ителеп тора. Ә инде дөйөм Рәсәйҙәге торошҡа күҙ һалһаҡ, бигерәк тә Кавказ төбәктәрендә спорт яҡшы үҫешкән. Унда спорт залына йөрөгән өсөн, кереһенсә, һәр кешегә аҡса түләнә. Тренерҙарҙың эш шарттары, эш хаҡы һәм социаль тәьминәт бик юғары кимәлдә. Уларға, йәшәргә урыным юҡ, ярышҡа барырға транспорт таба алмайым, икенсе эшкә урынлашмайынса ғаиләмде ҡарай алмайым, тип борсолорға урын юҡ. Ә беҙҙә тренерҙар үҙ көстәре менән бушлай тиерлек эшләй, "Яугир"ҙа ла балалар менән төп эштән һуң килеп шөғөлләнәбеҙ.

➔ **Яңы йыл - ғүмер дәфтәренең яңы, таҙа битен асыр саҡ етеп килә. Үҙегеҙ һымаҡ йәштәргә теләктәрегеҙ ниндәй булыр?**

**Э. Хаджиева:** Ниндәй генә саҡырыу ташлаһам да, кешенең үҙендә яңы тормош башларға ынтылыш булмаһа, әйткәндәрем елгә осор төҫлө. Бына минең менән колледжда бергә уҡыған йәштәр араһында ла маҡсатлы рәүештә спорт менән шөғөлләнеүселәр, йырбейеү түңәрәктәренә йөрөгәндәр, белем алырға ынтылып тороусылар, эшләп тә йөрөүселәр бар. Булған мөмкинлектәрҙе файҙаланмай, ваҡыттарын бушҡа уҙғарыусылар ҙа бихисап. Йәштәштәрем ошо йәштән үк тормошта үҙ урындарын табыуҙы, яраткан эше менән шөғөлләнеүҙе һәм әүҙем булыуҙы маҡсат итһен ине. Күңелгә яҡын эштә уңыш ҡаҙаныуҙың ҙур бәхет икәнен тойоу мөһим. Мин дә киләсәгемә ҙур өмөттәр бағлайым һәм юғары юридик белем алыу менән бер рәттән, панкратиондан да һис айырылмаҫмын, тип тәүәкәлләйем.

**А. Нурғәлин:** Башҡаларға үрнәк булып йәшәйек, тип теләр инем милләттәштәргә төбәп. Тарихыбыҙҙы, рухи байлыҡтарыбыҙҙы хәтерҙә тотайыҡ һәм киләсәгебеҙ - балаларҙы сәләмәт, рухлы, көслө шәхестәр итеп тәрбиәләүгә һәр беребеҙ үҙ урынында тырышлыҡ һалайыҡ. Ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм хөкүмәт бер юҫыҡта эшләгәндә тағы ла ҙур уңыштарға өлгәшә алыуыбыҙға шигем юҡ. Сөнки беҙҙә потенциал бар, тейешле шарттар ғына кәрәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨЛӘ-КӨЛӘ...

## сәй эсәйек

■ Көләү кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, сәләмәтлекте лә яҡшырта, тип белдерә Һиндостандың Indraprastha Apollo дауаханаһы белгестәре. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, көләү йөрәк һәм үпкәләр өсөн яҡшы күнекмә булып тора, был ваҡытта йөрәк тибеше йышая, мейе ял итә. Ғалимдар әйтеүенсә, көләү стрестан һаҡлаусы яҡшы сара ла. Тик быны өсөн ауыҙҙы асып, рәхәтләнеп көләргә кәрәк. Ә ирендәрҙе ҡымтып ҡына хихылдау организмға кире йоғонто яһай. Ғалимдар шулай уҡ хәҙерге ваҡытта кешеләрҙең һирәк көләүе тураһында ла белдерә. Иҫәпләүҙәргә ярашлы, элегерәк барыһы ла көнөнә 18 минут самаһы көлһә, хәҙер был ваҡыт 6 минутҡа ла тулмай.

■ Инглиз ғалимы, Лондон университетының фитохимия профессоры Симон Гиббонс раҫлауынса, көнөнә өс сынаяҡ ҡына яңы бешерелгән сәй эсеү сәләмәтлеккә һаҡларға мөмкинлек бирә. Сәй эсергә ғәҙәтләнеү баш мейеһе шеше, инсульт, төрлө инфекциялар кеүек ауырыуҙарҙы булдырмай. Нидерланд ғалимдары 1996 йылда уҡ сәй эсергә яратыусыларҙа инсульт һирәк осрауын билдәләгән. Ҡара сәйҙәге флавоноидтар артерияларҙы һәм ҡан тамырҙарын зарарлы холестериндан һаҡлай. Белгестәр әйтеүенсә, бында сәйҙең йәшел йәки ҡара, шәкәрле йәки шәкәрһеҙ булыуы мөһим түгел. Сәйҙе тик һөтһөҙ эсергә кәрәк, сөнки һөт организмға эсемлектең файҙалы матдәләрен үҙләштерергә ҡамасаулай.

■ Банан - энергия, витаминдар һәм ферменттар (сахароза, глюкоза һәм лактоза) сығанағы ғына түгел, тип белдерә ғалимдар. Был емеш йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан, артриттан файҙалы, нервылар системаһын нормаллаштырырға лә ярҙам итә. Уның составындағы матдәләр шатлыҡ гормоны - серотонин бүленеп сығыуға ярҙам итә. Аргентинала үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, банан аш һеңдереү системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡатын-ҡыҙ организмын стрестарҙан һаҡлай.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитрусլы үсемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асыҡыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

■ Мөһим ҡарарҙарҙы ятып хәл итеү яҡшыраҡ, тип белдерә Австралия ғалимдары. Экспериментта төрлө интеллектуаль һәм белем кимәле төрлө булған 20 кеше ҡатнаша. Уларға 32 башватҡыс тәҡдим ителә, уларҙың яртыһын тороп, яртыһын ятып сисергә кәрәк була. Тикшеренеүҙәр һуңында горизонталь торош иң продуктив, тип табыла. Ғалимдар быны шулай тип аңлата: кеше баҫып торған саҡта унда танып-белеү һәләте менән бәйле эшмәкәрлек өсөн кәрәк булған норадреналин бүленеп сыға, ул, үҙ сиратында, ижади фекерләүҙе аҡрыһайта. Ә ятҡан саҡта был матдә аҙыраҡ бүленә һәм мейе яҡшыраҡ эшләй башлай.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**"Һөйөнсө! Беҙ Төркиәгә барып ҡайттыҡ!" тип ҡаршы алды беҙҙе Гусевка ауылында бер төркөм ағинәйҙәр. Путевка менән ял итеп ҡайтҡан ағинәйҙәрҙең шатлыҡтары йөҙҙәренә нур булып яғылған: Айға осҡандармы ни! Әбйәлил районы ауылдары ағинәйҙәре Гусевка ауылы мәсетенә тап ошо әхирәттәренең имен-аман юл йөрөп ҡайтыу шатлығын уртаҡлашырға, ҡорбан ашынан ауыҙ итеп, Мәүлит байрамын билдәләргә йыйылғайны.**

# АҢЛЫ ҒҮМЕР АРТЫНАН

Исемләп танышмай ҙа булмай бынса "сәйәхәтселәр" менән: Роза Таһирова (Әбйәлил районының баш агинәйе), Сәриә Абдрахманова, Гөлзифа Ғафарова, Гөлнур Фаҡиева, Көнһылыу Яруллина, Рәсимә Баймырҙина, Сулпан Һатлыҡова, Флүрә Ғиззәтова, Айһылыу Рожкова була ял сәфәрендә. Бына улар яңы йола иғлан итә: сәфәр күренештәрен фотоальбомға беркетеп, һеҙ ҙә донъя күреп йөрөп ятығыҙ, үҙегеҙҙең алдынғы эштәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ, тип, ағинәйҙәрҙең киләһе йыйыны эстафетаһын Асҡар ауылына тапшыра. Ә район үҙәгенең баш агинәйе Зәлифә Шакирова агинәйҙәр ҡорон йыйыу бурысын ҡабул итеп алғанда үҙҙәренең бик матур уй-ниәттәре барлығын һөйөнсөләй.

Табын артына йыйылып бөткәс, йәшел яулыҡ ябынып, йәшел камзул кейгән Сәриә Йәнбирҙина асыҡ тауыш менән Мәүлит уҡыу тәртибе тураһында иҫкә төшөрә: "Һәр һижри йылда рабиғел ахыр айының ун икенсе көнөндә мосолмандар хәҙрәти Рәсүл Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тыуған көнөн байрам итә һәм уның кешелеккә мираҫ иткән иң саф, иң яҡшы сифаттарын һанап үтә. Һәммәбеҙ ҙә Бәйғәмбәр әйҙәүенсә инсафлы, эштә тырыш, донъя көткәндә киң күңелле булырға, оло быуынды хөрмәт итеп, кеселәрҙе тәрбиәләп йәшәргә тейеш. Был сифаттар ағинәйҙәр ынтылған идеалдарға ла тура килә", - ти ул. Артабан зәңгәр буйлы шарф-таҫтар ураған Гөлзифа Ғафарова матур көйләп аят уҡый башлай, ҡалғандар уға ҡушыла. Кемдән өйрәнгәндер был ханым бынса моңло көйләп аят уҡырға, һәр хәлдә, йыр кеүек, тәсбих кеүек яңғыраны уның тауышы...

Гөлнур Фаҡиева ла бик үҙенсәлекле тауыш менән ойотоп ҡына Ҡөрьән сүрәләрен бағышланы. Уның менән танышҡанда һөйләшкән һүҙҙәре уйҙарға урала: "Аллаһы Тәғәлә кешегә аң биргән, балаһына дөрөҫ тәрбиә бирерлек ғаилә ҡанундары бар. Беҙҙең Дәүләт ауылы агинәйҙәре район мәғариф идараһы, мәктәптәр менән бергә ошо мәңгелек тәрбиә нигеҙҙәрен ҡабатлаған "Хәҙистәр" кисәләре үткәрә. Беҙ бөгөн ни хәтле ҡатмарлы заман килгәнен күрәбеҙ, етәкселәргә һәр яҡлап ярҙам итергә бурыслыбыҙ. Ауылда эш юҡ, йәш ғаиләләр ҡырға сығып китә, ҡайһылары тарҡалып ҡуя. Кемдер шешә төбөнә ҡарай. Был заман афәтен тик етәкселәр менән бергә тороп ҡына еңеп була..."

Артабан Гусевка ауыл мәсетенең ҡунаҡтары - Дәүләт, Урал, Асҡар, Иҙәш, Хәлил, Ҡусҡар, Таштимер, Ишкилде, Буранғол, Таштимер, Тупаҡ, Михайловка, Ишкол ауылдарынан килгән ағинәйҙәр ҙә телмәр тотто. Таҡһыр ауылынан Мәүлиха Өмөтҡужина һөйләй: "Ҡөрьән Кәримде йыл ярым ваҡыт буйына туғыҙ мәртәбә уҡып сыҡтым. Тәүге уҡыуҙарҙа бер нәмә лә аңламаным. Бары тик йөкмәткеһен аңларға тырыштым. Инде төшөндөм шуға: Ҡөрьәндә барлыҡ донъя көтөү ҡағиҙәләре - мал табыу, ир-ҡатын мөнәсәбәттәре, бала тәрбиәләү, сәләмәтлек нигеҙҙәре һүрәтләнгән. Бөгөнгө Мәүлит уҡыуында үҙебеҙгә үҙебеҙ һөкланабыҙ, һөҡ һуға күрмәһен, кем уйлаған ошо көндө күрербеҙ, Ҡөрьән тотоп уҡып ултырырбыҙ, тип..."

Әбйәлил агинәйҙәре араһында ветеран-уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре күп. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойошторған ҙур дәрәжәле баһаһы "Ал да нур сәс халҡыңа" мизалы менән бүләкләнгән Роза Вәлиева, Зәйтүнә Шәрипова, Мөслимә Мәсәлимовалар бөгөн үҙ ауылдарында тыуған яҡ тарихын өйрәнеү эшен дә алып бара. "Шәжәрә байрамын уҙғарған бер генә ара ла ҡалмаһын ине. Мәсәлән, беҙҙәге Юлдаш, Юнай ауылдары - арҙаҡлы тамъян ырыуы башлығы Шағәле Шаҡмандың тыуған төйәге икәнен белеп, архивтан раҫлатып, байрам яһаныҡ. Үҙебеҙ ҙә белмәй йөрөгәнбеҙ ил батыры тарихын. Уның хөрмәтенә "Шағәле Шаҡман" мөнәжәтен ижад итеп башҡарҙыҡ. Беҙгә бөтә тирә-яҡ хуплап ҡушылды, "Башҡорттоң яҡты даны артһын" тип, күмәкләп "Теләк теләү" йолаһын да үткәрҙек. Шунһыҙ булмай, рухты нығытырға кәрәк беҙгә, рух юғалмаһын", - тиҙәр улар.

Таштимер-Тупаҡ ауылынан Таңсулпан Мәғәфүрова үҙҙәрендә Мәүлит байрамының бик дәррәү үтеүен һөйләне: "Илгә именселек бир, әҙәмгә аҡыл бир, батшаларға баш бир, тип Хоҙайҙан һораныҡ. Ауылыбыҙҙың иманлы, айыҡ булыуын теләп, күмәкләп ҡорбан салдыҡ, ике йөҙләп кешене ашаттыҡ, мөнәжәттәр әйтеп ишеттерҙек. Беҙ берҙәм булайыҡ, ил-йорттоң тын алышын белешеп торайыҡ, тип йыйылабыҙ, был сараларҙан хужаларҙы ла ситтә ҡалдырмайбыҙ..."

Әлмөхәмәт ауылы ағинәйе Мөслимә Фәттәхованы бөтә гәм ауыҙ асып тыңланы: "Шишмәбеҙ бар - данлыҡлы, һыуы шифалы. Йәштәребеҙгә рәхмәт, бик белдекле, берҙәмдәр, аңлылар, үҙ-ара ифрат матурҙар. Ауылды тәрбиәләп тоталар йәштәр! Мәзинә Ибраһимова мәсет итеп үҙенең өйөн бирҙе, ҡандай рәхәт, аулаҡ, йылы унда. Мәсетле булып киңәнеп йәшәйбеҙ, барған һайын барғы килеп тора".

Гөлнур Фаҡиева тағы һүҙ алып, ағинәйҙәргә бөгөнгө гаджеттарға ҡамалған балаларҙы сит йоғонтоларҙан нисек ҡурсалау тураһында кәңәштәр бирә. "Мәктәптәргә, балалар янына

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# ФӘҠИРЛЕК ЭРГӘҺЕНДӘ...

## бысраҡлыҡ бар

### Менталитет

**Бала саҡта синыфташ ҡыҙҙың өйөндә, ата-әсәләре күрмәгәндә генә дивандарында һикерә торғайныҡ. Беҙҙә урыны-урыны менән өсҡә ҡалҡып торған диван пружиналары ҡыҙыҡтыра, һикергән һайын күтәрелгән саң таң ҡалдыра ине.** Егерме йыл үткәс бала саҡ әхирәтемә ҡунаҡҡа инеп сығырға булдым һәм беҙ һикергән диван һаман да мөйөштә торғаны күреп, шаҡ ҡаттым. Ул артыҡ үҙгәрмәгән дә һымаҡ ине. Әммә хәҙер мин йорттоң фәҡирҙәрсә йыһазландырылыуын күреп аптыраным. Күнелдән генә диванды ла, иҫкерғән ултырғыстар, ярылған һәм шоколад тышлыҡтары менән йәбештерелеп бөткән көҙгөнө лә яңыларына алыштырыу күпмегә барып баҫыр ине, тип иҫәпләй башлауымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Әхирәтем менән һөйләшкән арала түшәмде ағартып, обойҙарҙы "алмаштырып" өлгөрҙөм. Себен эҙҙәре ҡалған тәҙрәләрҙе йыуып алғым, диван аҫтындағы ҡатырға ҡаптарҙы алып ташлағым, ойоҡ менән бәйләп ултыртылған ярыҡ гөл һауытын сығарып ташлағым килде. "Аҡса яғы ҡыҫынҡылыр инде", тиғән уй килде. Әммә, исмаһам, ағас түшәмдәге осһоҙ ғына йәбештергес пленка һатып алып, өҫтәлде йәбештереп ҡуйғым килде. Ҡайҙа ғына баҡһам да күҙемә берәй эшлектән сыҡҡан нәмә, бысраҡ, таптар, сүп-сар салынды...

Ҡапыл мейемде бер уй ярып үтте: "Ни өсөн фәҡирлек булған ерҙә һәр ваҡыт бысраҡ?" Был һорауҙы һеҙгә лә төбәйем хәҙер. Хатта "һәр ваҡыт" тимәй, "ғәҙәттә" йәки "йыш ҡына" тип һөйләргә лә дөрөҫ булыр был һығымтам. Бысраҡлыҡ - ул аҡсаһыҙлыҡ билдәһе түгел, ә менталитеттан килә. Ә бысраҡлыҡ һәм фәҡирлек йәнәш йөрөгәс, ярлылыҡ та үҙенә күрә бер менталитет ул. Фәҡирлек йыуылмаған башта ултыра...

### Мещанлыҡ

**Мәктәптә әҙәбиәт буйынса бик шәп, юғары аңлы, үтә зирәк уҡытыусы - Тамара Григорьевна уҡытты.** Бер ваҡыт кемдер унан "Мещанлыҡ нимә ул?" тип һораны һәм уҡытыусыбыҙҙың яуабы мәңгегә хәтеремдә уйылып ҡалды: "Мещанлыҡ - ул сервантта яңы шәшке торғанда, ярсылып бөткән иҫке шәшкенән сәй эсеүҙе аңлата".

барайыҡ. Балаларға "ярай" менән "ярамай"ҙы ныҡлап өйрәтергә-аңлатырға ваҡыт. "Ярамайҙы белергә кәрәк" тигән дәрес-һабаҡ бирәйек. "Ярамай"ҙың көртәһе тар ғына, уны емерһәң, кире ялғап булмай. "Ярай"ҙың көртәһе киң, унда инһәң, башың-күҙең аҙашыр", тигән боронғолар..."

Мәүлит кисәһенең рухи ҡөҙрәтен ҡеүәтләп, Дәүләт ауылынан Сәғиҙә Йәнбирҙина бер риүәйәт һөйләне: "Һикһән алты йәштәге әсәйем гел генә Мәүлит байрамын үткәреүҙең сауабы тураһында һөйләп йөрөй. Атайым менән саҡ өйләнешкән йәш кенә саҡтары булған. Оло һуғыштан һуңғы үтә ярлы заман. Өй баштары һалам, ер иҙәндә ҡалтайып бер генә таҡта имен ҡалған. Шулай ҙа Мәүлит уҡытырға кешe йыя әсәйем. Хәйерлек аҡсаһы булмаға, үҙе көн элгәре өйбөрөнсә һоранып тинлектәр йыйып ала. Ояла-ояла ғына йыйғанын хәйер итеп өләшә. "Артабан ил турайҙы, тормош матурланды, хәләл көс менән тапҡан малыбыҙ бәрәкәтле булды", - тип шөкөр итә әсәйем. Ысынлап та, атайым менән алтмыш йыл бергә тороп, туғыҙ бала табып үҫтереп, тиң ҡартайҙылар. "Баяғы Мәүлит кисәһенең ҡөҙрәтенән булды ул, юғиһә, уны һанға һуҡмаған хәллерәк кешеләр өйө-еме менән юҡҡа сыҡты, балаһыҙ-яңғыҙ миктәшеп үлде", тип тә ҡуя әсәйем һүҙ араһында..."

Байым ауылынан килгән ағинәй Мәүлиҙә Сөнәғәтова ла "Байлыҡ, Бәхет, Мөхәббәт" тураһында фәһемле хәҙисте уртаға һалып, һүҙҙе дауам итте: "Беҙ һигеҙ кеше Троицк мәсетенә барып, Зәйнулла ишан рухына бағышлап аят уҡытып ҡайттыҡ. Мәктәп балалары менән йолалар буйынса осрашыуҙарҙа ҡатнашабыҙ. Бер бик яман эскән ҡатынды айыҡтырҙыҡ. Хоҙай беҙгә насип итте шул ғәмәлде. "Һин әсәйһең бит!" тип бер генә әйттек, ул бөтөн урамға эсеп сыҡманы. Ғаиләһенә Аллаһы ярҙам бирһен, эсмәһендәр бөтәнсә шайтан һыуын..."

Гусевка ауылы ағинәйҙәре ҡунаҡтарын тыңлай-тыңлай, тәмле-татлы ризыҡтары менән һыйлай-һыйлай, һүҙ араһында үҙҙәренең борсолоу һүҙҙәрен дә ҡыҫтырып ебәрә: "Беҙҙә лә әсә кешене тәрбиәләү етешмәй, балаларҙы туған телгә өйрәтеүгә лә битарафлыҡ көслө. Хатта мәсет эсендә лә балалар, ана бит, русса ҡысҡырып һөйләшә. Гусевка урамдары ла йәмһеҙ, уларҙы ҡотайтаһы бар. Юғиһә, ауыл эсендәге соҡорға бер депутат үҙе барып осто. Бына шулай етешһеҙлектәр тулып ята. Беҙ күрәбеҙ, нинә хужалар күрмәйҙер, аптыраш..." Гусевка ауылы мәсетендә имам-хатип булып торған Муса хәҙрәткә рәхмәтле булыуҙарын белдерҙе ағинәйҙәр. Ауылдың оло ағинәйе Фәриҙә апай Сафинаны ла ҡат-ҡат телгә алдылар: "Ул ике айлыҡ, ике, өс, дүрт йәшлек ваҡ балалары менән тол ҡалып, уларҙы аяҡҡа баҫтырған өлгөлө әсә, мәсет төҙөүселәрҙе бик тырышып ашатты-эсерҙе, тәрбиәләне, аҡса менән дә ярҙам итте. Ошо киң күңелле ил инәһе егерме биш йыллап ауылда берҙән-бер дин тотҡаны булды", - тине ауыл биләмәһенең ветерандар советы рәйесе Венера Шәйхисламова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтә аңлы ғүмерен халыҡ менән эшләүгә арнаған, милли традицияларҙы һаҡлауға, боронғо кәсептәрҙе тергеҙеүгә иғтибар биргәндәр байтаҡ Әбйәлилдә. Ауыл ҡотон арттырыусылар, тиҙәр улар хаҡында. Әбйәлил районы ҡатын-ҡыҙҙары теге замандарҙа беренселәрҙән булып Кейеҙ байрамына йыйылды, башҡа йолаларға ла башланғыс һалды. Шул традициялар бөгөн ағинәйҙәр тарафынан дауам ителә. Ауыл зыяратын көртәләү, хужаһыҙ йорттарҙы ипкә килтереү, экологик өмәләр үткәреү, ветерандарға, мохтаж ғаиләләргә, инвалид балаларға ярҙам, ауыл мәсете төҙөлөшөнә иғәнәләр йыйыу - һәр эштә башлап йөрөй ағинәйҙәр. Башҡорт халҡының "сая һәм һаҡсыл, хужалыҡлы һәм булдыҡлы әбйәлилдәр" тигән бер ҡәүеме ағинәйҙәр йыйынында бар байлығы, хозурлығы менән миңә тағы бер мәртәбә асылды.**

**Кинйә МӘЗИТ.**



Беҙ бит шулайбыҙ: яҡшы көндәргә, ҙур байрамдарға тип, яңы әйберҙәрҙе һаҡлап тотабыҙ, аҡса йыябыҙ. Киләсәктә, тип йәшәгәндәрҙең күбеһе шул шатлыклы мәлдәрҙе татып өлгөрмәй, арабыҙҙан китеп бара. Фәҡир булыу һәм бысраҡ йәшәүҙең оятын шунда аңланым. Мейеңә һеңгән бөлгөнлөк тойғоһо торлағыңдағы шарттарға ла, балалар тәрбиәһенә лә ҙур йоғонто яһаусағы көн кеүек асыҡ. Яҡшыраҡ киләсәк көтөп йәшәү бөлгөнлөккә килтерә лә инде ул...

### Көлбикә комплексы

**Дача һатып алырға тип егерме йылдан ашыу аҡса йыйған бер ҡатын менән танышмын.** Ул яңғыҙы ике ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерҙе. Ҡыҙҙар бутканан башҡа аш күрмәй, ас-туклы үҫте. Бер саҡ өлкәне тубыҡтары ямалған иҫке вельвет салбарҙа урамға сығырға унайһыҙланыуы тураһында һөйләгәйне. Ҡыҙ үҫкән һайын салбары ла серле рәүештә оҙоная барҙы. Салбарҙың балағы ҡыҫҡартып бөкләнгән урындан сантиметрлап төшөрөлә килде. Ошонан барлыҡҡа килгәндер ҙә әле урыҫтарҙың "Ярлыябаға уйлап сығарыуға оҫта" тиеүе.

Ниһайәт, дача һатып алынды. Әммә үҫеп буй еткергән ҡыҙҙарға уның кәрәге теймәне. Хәҙер инде улар ысын ҡатын-ҡыҙ булырға өйрәтмәгәне өсөн йыш ҡына әсәләренә үпкә белдерер булды. Әлбиттә, ҡыҙҙарҙа "Көлбикә комплексы" формалашҡайны. Яңы әйбер һатып алған һайын кәйефтәре ҡырылды. Иҫкергән кресло һәм һауыт-һаба, уңып бөткән таҫтамал һәм ете йыл элек алынған пальтоға өйрәнгәс, улар аҡсаларын үҙҙәре өсөн тотонорға ҡурҡыу барлыҡҡа килгәйне. Был тойғо "генетик фәҡирлек" тип атала. Ул аңға, ҡанға, һөйәккә, тәндең һәр күҙәнәгенә һеңә. Аҡсаны үҙеңә тотонорға йәлләү кешене ярлыландыра...

### Программалау

**Ҡубып төшөп торған стена күреп үҫкән балалар аңына фәҡирлеккә программа һалына.** Үҫмер саҡта уҡ улар быны ауырлығын тоя башлай. Заманында Антон Павлович Чехов та ҡубып төшөп торған диуарҙар һәм бысраҡ коридорҙар студенттың белем алыу һәләтенә насар йоғонто яһай, тип билдәләгән.

Бысраҡ һәм фәҡирлек кешене баҫа, күҙ өйрәнеп киткән ярлы йыһазландырылған өй эсе кешене уныштыҙлыҡҡа программалай. Әлбиттә, фәҡирлеккә булған нәфрәт үҫешкә һәм аҡса табырға этәрә, тип кемдер быға ҡаршы килер. Әммә фәҡирлектең ауырлыҡтары күтәрә алмай юғалып ҡалыусыларҙың һаны күберәк. Шуға ярлылыҡ кеүек бәләне ҡыуығыҙ, уйығыҙға һәм көнкүрешегеҙгә яҡынлатмағыҙ. "Байлыҡ - аҡыл торошо" тигән һүҙҙәр оҡшай миңә. Әйтергә кәрәк, фәҡирлек тә аҡыл торошо. Байлыҡ һәм фәҡирлек - ул һеҙҙең аҡыл һәм уйфекерҙәрегеҙ торошо икәнен онотмағыҙ.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

**Ейәндәрегеҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙ нисек? Баланы олатай менән өләсәй тәрбиәләүе файҙағамы? Быны түбәндәге тестан да белеп була.**

Бала тундырма йәки кәнфит һорай. Олатай-өләсәйҙәр үтенесте үтәмәҫкә үҙҙәрендә көс табамы?

*а)* ашар алдынан булһа, табалар; *б)* һәр ваҡыт түгел; *в)* бер ваҡытта ла тапмайҙар.

Бала уйынсыҡтарын, кейемдәрен ташлап бөткән. Олатай менән өләсәй был осраҡта нимә эшләй?

*а)* иҫкәртеү яһай; *б)* тиҙ генә тәртип урынлаштырыуҙы талап итә; *в)* үҙҙәре йыйыштыра башлай.

Ейәне насар һүҙҙәр әйтә. Олатай-өләсәйҙең реакцияһы?

*а)* сәбәбен аңлатып, тыя; *б)* яза бирә; в) иғтибар итмәй йәки көлә.

Оловлар баланы исек итеп эшкә өйрәтә?

*а)* үҙ өлгөһөндә; *б)* мәжбүр итеп; *в)* барлыҡ эштән азат итәләр.

Бала уйынсыҡ алырға һораһа, нимә эшләйҙәр?

*а)* үҙен яҡшы тотҡан осраҡта ғына алалар; *б)* уйынсыҡтың хаҡынан сығып эш итәләр; *в)* һәр саҡ баланың теләген үтәйҙәр.

Олатай менән өләсәй яҡшыны насарҙан айырырға өйрәтәме?

*а)* быға уларҙың ваҡыты юҡ; *б)* эйе, изгелекте хупларға тырышалар; *в)* юҡ, тормош өйрәтер әле, тип иҫәпләйҙәр.

Өй йыйыштырырға ярҙам иткәндә бала өләсәһенең яратҡан сынаяғын вата. Өләсәйҙең реакцияһы?

*а)* көйәләнеүен йәшермәй, әммә иҫкәрмә яһамай һәм ярсыҡтарҙы йыйып алырға ярҙамлаша; *б)* оҙаҡ итеп вәғәз һөйләй; *в)* башҡаса өй йыйыштырмаҫҡа ҡуша.

Олатай менән өлсәй баланың үҙ аллылығына нindәй мөнәсәбәттә?

*а)* бәләкәйҙән үҙ аллылыҡҡа өйрәтәләр; *б)* был сифатына шатланалар; *в)* баланың бала сағын төрлө хәстәрлектәр менән ағыуламаҫка кәрәк, тип иҫәпләйҙәр.

Балалар баҡсаһында, мәктәптә балаға территорияны таҙартырға ҡушалар. Быға ололар нисек ҡарай?

*а)* тырышырға кәрәк, тиҙәр; *б)* был мәсьәлә буйынса фекер алышмайҙар; *в)* ҡәнәғәтһеҙлек белдерәләр.

Атай-әсәй ҡылығы өсөн балаға яза бирә. Олатай-өләсәйҙең реакцияһы?

*а)* нейтралитет һаҡлайҙар; *б)* язаны хуплайҙар; *в)* баланы яҡлайҙар.

**А варианты өсөн яуапҡа - 10 мәрәй, В - 5, В - 1.**

**67-100 мәрәй:** олатай менән өләсәй ейәндәрен тәрбиәләүҙә, уларҙа изгелек формалаштырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Улар тейешенсә ҡәтғи һәм үҙҙәренең принциптарынан ситләшмәй.

**33-66 мәрәй:** Ейәндәрен тәрбиәләүҙә йомшаҡлыҡҡа юл ҡуялар. Ҡайһы бер ваҡыт тыңламауcанлыҡ уларҙың йәнен көйҙөрә. Тәрбиә алымының һайланған моделенән ситләшмәҫкә кәрәк, юҡһа, ҡапма-ҡаршылыҡтар балала сағылыш табасаҡ.

**32 мәрәй һәм кәмерәк:** Олатай-өләсәйҙең ейәндәренә булған һөйөүе, уның бәләкәй генә көйһөҙлөгөн дә ҡәнәғәтләндереү теләге сикһеҙ. Бындай алым йә эгоист, йә ялҡау, йүнһеҙ, ярҙамһыҙ шәхесте үҫтерәсәк.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



### 16 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Нюхач". Новые серии. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "Личное дело". [16+]
3.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Итоги недели (на рус. яз.).
14.45 "Специальный репортаж". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Әлләсе". [6+]
16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
16.15 "Гора новостей".
16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]
18.00 "Ради добра". [6+]
18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]
18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Дорожный патруль". [16+]
21.00 "Бизнес-обзор". [12+]
21.15 "Полезные новости". [12+]
22.00 "Тайм-аут". [12+]
23.00 "Теге өсәү!" [12+]
23.30 "Күстәнәс". [12+]
0.00 Х/ф "Мужчина в доме". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Ночной гость". [12+]
5.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
5.15 "Орнамент". [6+]
5.30 "Наука 102". [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 17 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Нюхач". Новые серии. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.55 Премьера. "Право на справедливость". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "Личное дело". [16+]
3.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]
11.15 "Республика Live. #Дома". [12+]
11.45 "Дорожный патруль". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45 "Интервью". [12+]
15.15 "Вопрос+Ответ=Портрет". [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 "Тайм-аут". [12+]
18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск).
22.00 "По сути дела". [12+]
23.00 "Колесо времени". [12+]
0.00 Х/ф "Последняя роль Риты". Новости (на баш. яз.). [12+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Молодые сердца". [12+]
5.00 "Бай". [12+]
5.30 "Наука 102". [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 18 ДЕКАБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 2.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Нюхач". Новые серии. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Избранники". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "Личное дело". [16+]
3.50 Т/с "По горячим следам". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Метод Фрейда-2". [16+]
11.15 "По сути дела". [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Бала-саға". [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 "Ты можешь!" [12+]
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Полезные новости". [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00, 6.00 "Историческая среда". [12+]
23.00, 4.30 "Ете егет". [12+]
23.45 "Земляки". [12+]
0.00 Х/ф "Джокер". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Не женщина - дракон". [12+]
5.15 "Орнамент". [6+]
5.30 "Наука 102". [12+]

### 19 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.15, 0.05 Время покажет. [16+]
14.00 Большая пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 Новости (с субтитрами).
19.00 На самом деле. [16+]
19.55 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Нюхач". Новые серии. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
2.45, 3.05 Наедине со всеми. [16+]
4.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 13.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.50, 17.00 "60 минут". [12+]
14.00 Большая пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
19.00 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Тайны следствия-19". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00 "Автограф". [6+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30, 5.15 "Земляки". [12+]
14.45 "Ради добра". [6+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Бирешмә. Профи". [6+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 "Эпоха Амира Абдразакова". [12+]
18.00 "Республика Live. #Дома". [12+]
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
21.20 Хоккей. КХЛ. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа).
0.30 Х/ф "Сердцеед". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]
4.45 "Күстәнәс". [12+]
5.30 "Наука 102". [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 20 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
23.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
1.25 Вечерний Ургант. [16+]
2.20 Д/ф Премьера. "Билл Уаймен. Самый тихий из Роллингов". [16+]
4.10 Концерт группы "The Rolling Stones". "Sticky Fingers". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
23.40 Х/ф "Украденное счастье". [12+]
3.25 Х/ф "Ты будешь моей". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00, 5.45 Д/ф "Они нас слышат". [12+]
10.45 "Учим башкирский язык". [0+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00, 22.00 "Точка Z". [12+]
12.30, 21.00 "Башҡорттар". [6+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Үткән ғүмер". [12+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 "Интервью".
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 "Детей много не бывает". [0+]
17.00 "Моя планета Башкортостан". [12+]
17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
19.00 "Башҡорт йыры" представляет". [12+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Дорожный патруль". [16+]
20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]
23.00 "Караоке по-башкирски". [12+]
23.30 "Уфа. Живое". [12+]
0.15 Х/ф "Пассажир из Сан-Франциско". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.45 Спектакль "Земляки". [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]

### 21 ДЕКАБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Премьера. "Открытие Китая" с Евгением Колесовым. [12+]
11.15 Д/с "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Идеальный ремонт. [6+]
13.00 Д/ф "Анастасия Вертинская. Бегущая по волнам". [12+]
13.50 Х/ф "Алые паруса". [6+]
15.30 Х/ф "Один из нас". [12+]
17.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.45 Премьера. Праздничный концерт к Дню работника органов безопасности Российской Федерации. [12+]
21.00 Время.
21.20 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.10 Х/ф Премьера. "Любовник моей жены". [18+]
0.45 Х/ф Премьера. "Логан: Росомаха". [18+]
3.20 Про любовь. [16+]
4.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.15 По секрету всему свету.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.50 Х/ф "Счастье из осколков". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Кривое зеркало любви". [12+]
1.00 Х/ф "Последняя жертва Анны". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 "Ты можешь!" [12+]
9.15 "Посмотрим". [6+]
10.00 "Иволга 0.2". Репортаж с молодежного форума. [6+]
10.15 "Преград.net". [6+]
10.30 "Сыйырсык". [0+]
10.45 "Тамыр селтэре". [6+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 "Асылташ". [6+]
12.00 "Күстәнәс". [12+]
12.30 "Ете егет". [12+]
13.15 "Земляки". [12+]
13.30 "Хазина о Хазине". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 "Колесо времени". [12+]
17.00 "Концерт заслуженной артистки РБ Резеды Аминевой". [12+]
19.00 "Праздник гусиного пера". [12+]
19.20 Хоккей. КХЛ. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа).
22.00 "Мисс Интернешнл". [12+]
22.30, 3.30 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Йәшлек шоу". Концерт. [12+]
1.45 Х/ф "Ришелье: мантия и кровь". Новости (на баш. яз.). [16+]
4.15 Спектакль "Подарок". [12+]
5.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.).

### 22 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Один из нас". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.55 Д/ф Премьера. "Лео Бокерия. Сердце на ладони". [12+]
14.00, 16.10 Д/с "Романовы". [12+]
15.00 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Командный спринт. Прямой эфир из Словении.
17.20 Точь-в-точь. [16+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.45 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
22.45 Большая игра. [16+]
0.30 Х/ф "Уилсон". [16+]
2.15 Про любовь. [16+]
3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

4.50 Сам себе режиссёр.
5.30, 1.50 Х/ф "Заезжий молодец". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 Х/ф "Родная кровь". [12+]
18.20 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.50 Д/ф "Операция "Аргун". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Моя вершина". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТек?!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 "Бирешмә. Профи". [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 "Башҡорттар". [6+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30, 5.30 "Историческая среда". [12+]
17.00 "Мисс Интернешнл". Концерт. [12+]
18.30 "Лидеры региона". [12+]
19.00, 5.15 "Полезные новости". [12+]
19.15 "Ты можешь!" [12+]
19.45 "Әлләсе". [12+]
20.30 "Теге өсәү!" [12+]
21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 "Специальный репортаж". [12+]
22.45 "Красная кнопка". [16+]
23.30 "Байык-2019". [12+]
0.30 Х/ф "О любви". [16+]
2.30 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "ӘЛИФБА" ТӨҘӨҮСЕЛӘР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Айбалта. Ҙур. Спецназ. Хата. Аждаһа. Ғәмбәр. Ойоҡ. Зов. Аласыҡ. Уҡа. Тверь. Рәхмәт. Асҡаров. Нәсих. Түбә. Ауаз. Торт. Руан. Ярма. Киев.

**Вертикаль буйынса:** Ғәбитов. Хәмиҙуллин. Аванс. Сатраш. Ихтыяр. Таҡ. Бәҙретдинов. Батрак. Наказ. Ойоу. Аҡназарова. Рамазанов. Архонт. Асҡыс. Артыҡ. Түрә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЭЛЕКТРОН ХЕҘМӘТ КЕНӘГӘҺЕ

**Күп илдәрҙә хәҙер граждандарҙың эш стажы, эшләгән урындары һәм квалификацияһы хаҡындағы мәғлүмәттәр ҡағыҙ кенәгәгә түгел, ә уның электрон вариантына индерелә. 2020 йылдан Рәсәйҙә лә хеҙмәт кенәгәһенең электрон вариантын индереү ҡарала.**

Дәүләт Думаһы тарафынан Хеҙмәт кодексына һәм "Мотлаҡ пенсия страховкаһы системаһында индивидуаль (персонификацияланған) иҫәпкә алыу тураһында" федераль законға һәм РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексҡа төҙәтеүҙәр индерелә. Шунан һуң илдә 2020 йылдан башлап электрон хеҙмәт кенәгәһенә күсеү башланасаҡ. Ләкин был ғәмәл теләк буйынса һәм әкренләп барасаҡ. Ниндәйҙер сәбәп менән хеҙмәт кенәгәһен ҡағыҙ көйө һаҡлап ҡалырға теләүселәр 2020 йыл аҙағына тиклем эш биреүсегә ошо турала ғариза яҙа һәм был мәсьәләгә ҡарата үҙ фекерен белдерә. Шул осраҡта эш биреүсе мәғлүмәттәрҙе электрон кенәгә менән бер рәттән, ҡағыҙ кенәгәгә лә индерергә бурыслы. Ғариза булмаһа, хеҙмәт кенәгәһе кешенең үҙенә ҡайтарып бирелә һәм уның варианты һанлы форматта алып барыла башлаясаҡ. Эшкә яңы урынлашҡан кешеләр хаҡында мәғлүмәттәр баштан уҡ электрон кенәгәгә тултырыласаҡ.

Ошо айҡанлы, электрон базала һаҡланған документ һәм мәғлүмәттәрҙең ышаныслы һаҡта булыуын кем гарантиялай ала, тигән һорау бирәләр. Рәсәй Пенсия фондының мәғлүмәт системаһы юғары кимәлдәге персональ мәғлүмәттәр менән эш итеү һәм иҫәпкә алыу өсөн аттестацияланған. Граждандарҙың персональ мәғлүмәттәрен иҫәпкә алыу буйынса фонд 1997 йылдан алып эшләй, был өлкәлә 20 йылдан ашыу тәжрибә тупланған. Мәғлүмәттәрҙе төҙәтеү йә юҡҡа сығарыу маҡсатында хакер яҫҡыныуҙары хәүеф тыуҙырмай. Мәғлүмәт бүлендек системалы бик менән һаҡҡа һалынған, был иһә уның юғалыуына юл ҡуймаясаҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 декабрь, 18 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрамаһы Өфө татар дәүләт "Нур" театры сәхнәһендә ҡуйыла. 16+

**21 декабрь "Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 11.00, 13.00 0+

**"Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 18.00 12+

**22 декабрь "Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00 0+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 декабрь** сәғәт 10.30, 12.00, **21-22 декабрь** сәғәт 12.00, 14.30 балалар өсөн **"Новогодний переворот"** Яңы йыл әкиәте күрһәтелә. 0+

**22 декабрь "Айболит и Бармалей"** Яңы йыл әкиәте. 12.30, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21-23, 28-29 декабрь** сәғәт 11.00, 13.00, 15.00

**24-27 декабрь** сәғәт 11.00, 13.00 **"Путешествие в мир сказок"** Өфөнөң Яңы йыл утренниғы. 0+

**22 декабрь "Baby-ёлка"**, 3 йәшкә тиклемге балалы ғаиләләр өсөн Яңы йыл байрамы. 17.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21-22, 28-30 декабрь** сәғәт 11.00, 14.00, 17.00 **"Приключения белых мышей"** (С. Чураева), Яңы йыл спектакле. 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (19) дүшәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (20) шишәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 18 (21) шаршамбы | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (22) кесе йома | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (23) йома | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 21 (24) шәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 22 (25) йәкшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Мәләүез ҡалаһынан** Нурзиә Ишмөхәмәтова, Руфия Мөхәмәтова, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Азамат Төхвәтуллин, **Баймаҡ районы** 1-се Этҡол ауылынан Рәжәп Азаматов, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Ғайсар Яҡупов, **Өфө ҡалаһынан** Раушания Кәбирова, **Сибай ҡалаһынан** Нурғәли Юнысов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Оҙон ғүмер юлығыҙ бәхеткә, ҡыуаныс-шатлыҡтарға, ҡояшлы көндәргә тулы булһын, сәләмәтлек, изгелек, уныштарҙы юлдаш итегеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ТЕАТРЫБЫҘҒА 100 ЙЫЛ

**Өфөлә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының 100 йыллығын билдәләнеләр. Үҙ бинаһында капиталь ремонт эштәре барғанлыҡтан, бөтә мәҙәни йәмәғәтселекте йыйған кисә Башҡорт опера һәм балет театрында үтте.**



Республика Башлығы Радий Хәбиров театрҙы бер быуатлыҡ юбилейы менән ҡотланы, театр хеҙмәткәрҙәрен ордендар һәм маҡтаулы исемдәр менән бүләкләне. Илһөйәр Ғәзетдиноваға, Илдар Ғүмәровҡа, Илдар Сәйетовҡа Дуҫлыҡ ордены тапшырылды, Хәрмәтулла Үтәшев Салауат Юлаев ордены кавалеры булды. Композитор, театрҙың музыкаль бүлеге мөдире Урал Иҙелбаев һәм актриса Эльвира Юнисова "Башҡортостан Республикаһында фиҙаҡәр хеҙмәт өсөн" билдәһе менән бүләкләнде. Гөлнара Әмироваға, Ирек Булатовҡа, Алһыу Ғәлинаға - "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы", актер һәм режиссер Фирҙәт Ғарифовҡа, актерҙар Римма Ҡаһармановаға, Артур Ҡунаҡбаевҡа, Руслан Хәйсаровҡа - "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы" тигән маҡтаулы исемдәр бирелде. Әҙәби-драма бүлегенең баш мөхәррире Динара Ҡәйүмова, тегеү цехы етәксеһе Ия Стародумова һәм театр директоры Иршат Фәйзуллин Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре булды.

Кисәнең беренсе бүлеге театрҙың мөһим этаптарына - бер быуатлыҡ тарихтың яҡты ла, фажиғәле лә биттәренә бағышланды. Икенсе бүлек Гамлеттың "Булырғамы, әллә булмаҫҡамы" монологынан мөңгелек һорау темаһына көлкөлө скетч менән башланды һәм бик күп ҡотлауҙар менән дауам итте. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың, Мостай Кәрим исемендәге фондтың телеграммалары уҡып ишеттерелде. Ҙур экранда Башҡортостандың беренсе президенты Мортаза Рәхимовтың видеоҡотлауы күрһәтелде.

# ҒАИЛӘЛӘРГӘ АРНАЛДЫ

**"Тамыр" телеканалының ишле ғаиләләр тураһындағы "Балалар күп булмай" исемле яңы проекты "Федерация" бишенсе телевизион конкурсында еңеү яуланы. Еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы Мәскәүҙә үҙҙы.**

"Балалар күп булмай" телетапшырыуҙар циклы күп балалы ата-әсәләргә һәм ошондай ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларға ихтирамлы мөнәсәбәт булдырыуға, йәмғиәттең күп балалыҡты хуплауына йүнәлтелгән. Ижади төркөм сценарий авторы Гөлфиә Раянова, режиссер Әлиә Миназева, оператор Александр Лысенко, монтаж режиссеры Дамир Сәлимов беренсе миҙгелдә республиканың ишле ғаиләләре тураһында 10 тапшырыу төшөрҙө. Алып барыусы - йәш хәбәрсе Рөстәм Төхбәтов һәр ғаиләнең тормошо менән таныштыра. Һәр береһенә үҙенсәлекле бүләк - фотоальбом әҙерләнә. "Һәр сығарылыш бер ғаиләгә бағышланған, - тип һөйләнеләр телекомпанияла. - Башҡорт телендә төшөрөлгән күп балалы Мөләковтар ғаиләһе хаҡындағы тапшырыуҙың еңеп сығыуы айырыуса ҡыуаныслы".

# ТЫЛСЫМЛЫ ШУЛ ҠУРАЙЫБЫҘ

**Башҡортостанда үҙешмәкәр ҡурайсыларҙың "Тылсымлы ҡурай моңо" асыҡ республика конкурсы үҙҙы. Конкурста Башҡортостан ҡалаларынан һәм райондарынан, шулай уҡ күрше Татарстандан 140-ҡа яҡын кеше ҡатнашты. Еңеүселәрҙе бүләкләү һәм гала-концерт Туймазы ҡалаһының "Родина" мәҙәниәт һарайында үтте.**

Туймазы районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Рәмзин Әпсәләмов хәбәр итеүенсә, конкурсанттар һаны йылдан-йыл арта. Быйыл бәйгелә республиканың төрлө төбәктәренән килгән 12 ҡурайсылар ансамбле оҫталыҡта көс һынашты. Айырыуса Балтас, Баҡалы, Благовещен райондары ҡурайсылары әүҙемлек күрһәтте. Ә бына Туймазы районынан конкурсҡа бер юлы өс коллектив ҡатнашты. Конкурсанттар араһында башлап ҙур сәхнәгә күтәрелгән коллективтар ҙа булыуы һөйөндөрҙө, мәҫәлән, Серафимовка музыка мәктәбенең ҡурайсылар ансамбле тәүге тапҡыр сығыш яһаны. Конкурс быуындар күсәгилешлеген сағылдырҙы - сығыш яһаусылар араһында балалар менән бер рәттән өлкән быуын вәкилдәре лә бар ине. "Тылсымлы ҡурай моңо" асыҡ республика конкурсының Гран-прийына Баймаҡ районынан Риф Ҡәйепҡолов лайыҡ булды.

# БУРАНҒОЛОВ СПЕКТАКЛЕ

**Салауат дәүләт башҡорт драма театрында Мөхәмәтша Бурանғоловтың "Иҙеүкәй менән Моразым" башҡорт халыҡ эпосы буйынса яҙылған әҫәренә нигеҙләнгән спектакль ҡуйылды. Уны Илсур Ҡаҙаҡбаев сәхнәләштерҙе.**

"Иҙеүкәй" спектакле камерный сәхнә өсөн ҡуйылған, тамашасы актерҙарҙы яҡындан күрә һәм үҙен дә сәхнәләштереүҙең бер өлөшө итеп тоя. Тәүге тамашаға сәхнәләштерелгән әҫәр авторы, "Алтын битлек" Рәсәй Халыҡ театраль премияһы номинанты Олжас Жанайдаров үҙе килде. "Мин драматург булараҡ эшләгән спектакль бик оҡшаны. Был традицион этник башҡорт театры һәм заманса Европа театры берләшеүенең өлгөһө. Был бик яҡшы күренеш, сөнки театр үҫешә, тик тормай. Һәм ҡайһы бер тарихты заманса итеп көйләндереү мөһим. Илсур Ҡаҙаҡбаев быны атҡарып сыға алған. Беҙ бөгөн күргән тарихта заман театрының бөтә һыҙаттары ла бар", - тип һөйләнә Олжас Жанайдаров. Спектакль өҫтөндә эшләүселәрҙең хеҙмәтен Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, театр тәнҡитсеһе Динә Дәүләтшина ла юғары баһаланы. "Иҙеүкәй" спектаклен күреп өлгөрмәүселәр уны яңы 2020 йылдың 10 һәм 17 ғинуарында ҡарай алаҫаҡ.

**"Башинформ"дан.**

# ҒӘЖӘП БЕР МОҢ



**Белорет районының Ҡоҙғон-Әхмәр ауылында 25 йыл буйы "Йәдкәр" фольклор-эстрада төркөмөн етәкләгән Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәли Хәмзин исеменә вокалистарҙың IV ябыҡ район конкурсы үтте.**

Ғәли моңо, Ғәли йыры... Йылдар аша тыуған төйәгенә әйләнеп ҡайтҡан, бер ваҡытта ла онотолмаҫ, әлеген-әле күңелдәргә берсә шатлыҡ, берсә һағыш һалыр Ғәли йыры. Бөгөн ул йөрәктәрендә моң йөрөткән һәр ҡайһыбыҙҙы берләштерә, тиһәк тә яҙыҡ булмаҫ. Һәм берләштерҙе лә. Мәртәбәле конкурс алты йыл әсендә дүрт тапҡыр уҙғарылып, йылдан-йыл маһир йырсыларҙы асыҡлай, башҡорт халыҡ йырҙарының үлемһеҙлеген раҫлай.

Шулай итеп, райондың төрлө төбәктәренән йыйылған конкурсант 16 йәшкә, 16-нан 35 йәшкә тиклемге һәм 36 йәштән өлкәндәр категориялары буйынса билдәләнде. Был юлы ла конкурс йырауҙылыҡ оҫталығын юғары күтәрҙе, үҙешмәкәр башҡарыусылар араһында яңы исемдәр асты. Быйылғы гран-при мәшһүр йырсының тыуған ауылында ҡалды. Улай ғына ла түгел, еңеүсе исемен йырсының йырҙарын яратып башҡарған, уға оҡшарға, унан өлгө алырға тырышҡан ҡустыһы Наил Хәмзин яуланы. Ғәли Хәмзин исемендәге район конкурсы икенсе һулышын кисерә. 2021 йылдан конкурс республика кимәлендә үткәрелә башлаясаҡ. Был турала сарала ҡатнашыусы БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев һәм БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Андрей Иванюта хәбәр итте.

**Эльвира КӘБИРОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӨЙӨК КЕШЕЛӘР...

## ике тапҡыр үлә

Бәхетең булмаһа, тапҡан алтының да бәҡырға әйләнә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Милләт намыҫы - ул ҡорол ҡуйылған мылтыҡ менән бер.

**(Вуди Аллен).**

Яңғыҙың ғына аҡыллы булып ултырғансы, барыһы менән бергә хаталаныуың яҡшыраҡ.

**(Марсель Ашар).**

Яҡшы итеп эшләү мотлаҡ түгел, әшләгәнеңде яҡшы итеп һөйләп биреү мотлаҡ.

**(Тристан Бернар).**

Әгәр ҙә кешеләр араһында һаҡ ҡыланыусылар күберәк, тип иҫәпләйһең икән, быға аптырама, сөнки һаҡ ҡыланмағандар күптән үлеп бөткән.

**(Эшли Брильянт).**

Үҙ күләгәңдән ҡурҡыу кәрәк, сөнки күләгән ҡайһы яҡта булырын бер ваҡытта ла алдан белеп булмай.

**(Веслав Брудзиньский).**

Бер кемдән бер ни ҙә талап итмәгәндәргә... барыһы ла ярҙам итергә әҙер.

**(Кароль Буньш).**

Беҙ ҡалай үҙебеҙ тураһында аҙ беләбеҙ! Шуныһы яҡшы: башҡалар беҙҙең турала тағы ла аҙыраҡ белә.

**(Януш Васильковский).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Франсуа Мориак).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер суфый стенала эленеп торған буш мөксәйҙы күреп ҡалған да, аптырашынан бот сабып: "Бары тик мөксәйҙә ғына мәкер булмай. Унда донъя бәләләренән дарыу ғына бар! Ул хәйләкәрҙәр батшалығы!" - тип белдергән. Уға башҡа суфыйҙар ҙа ҡушылған һәм көлә-илай буш мөксәйҙы маҡтарға тотонған.**

**- Ниңә ул бушлыҡты маҡтарға һуң? - тип һораған суфыйҙарҙың был ҡылығын нимәгә юрарға белмәгән үткенсе бер кеше.**

**- Һиңә бында урын юҡ! - тигән уға суфыйҙар. - Сөнки һин бары тик ҡул менән тотоп ҡарап була торған нәмәне генә күрәһең. Беҙҙе аңлар өсөн һиңә ғашиҡ булырға кәрәк, тик ғашиҡ кеше генә төнөн дә, көндөҙөн дә башҡаларҙың күҙенә күренмәгән һөйөүен күрә ала..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танығлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 13 декабрь 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2491/12